✓ *Кеше азатмы, түгелме икәнен белгең килһә, уға иғтибарлап бак һәм уның был тормоштан нимә алырға теләүен белергә тырыш. Әгәр ҙә ул был тормоштан бер ваҡытта ла ала алмаҫты көҫәй икән - тимәк, ул ҡол.*

**ЭПИКТЕТ.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19 - 25 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№47 (465)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бөгөнгө башҡорттарҙы күреп,**

немецтар илаған, ти...



6

**Әгәр кеше икәнһең...**

магнит бул



7

**Бында бәхет тараталар...**



йәки Димселәр ғаилә институтын нығыта

8-9

**Унған ҡатын...**

бала таба, ирен баға



12-13

14 **ТВ-программа**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Рәсәй Дәүләт Думаһына һайлауҙар яҡынлаша. Бәғзе берәүҙәрҙән, һайлауға йөрөмәйем, тигәнерәк фекерҙәр ишетергә тура килә. Ә һеҙ һайлауға барып, граждандыҡ бурысыңды үтәү һәр кемгә фарыҙ икәнен беләһегеҙме?*

***Әмир ШАМАЕВ, медицина һәм иҡтисад фәндәре докторы, академик, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған табибы:*** Рәсәй һәм Башҡортостан закондарына ярашлы, граждандар дәүләт властары органдарына һайланырға һәм һайларға хоҡуҡлы, был хаҡта ошо дәүләттәрҙең Төп законы - Конституцияларында бик асыҡ әйтеп бирелгән. Һайлауҙарға һәр кем барырға һәм тауыш биреү юлы менән үҙ ихтыярын белдерергә тейеш. Дәүләт Думаһына депутаттар һайлау, үҙегеҙ аңлап тораһығыҙ, бик етди мәсьәлә, ил яҙмышы, халыҡ көнкүреше күп йәһәттән ана шул депутаттар корпусы сәйәсәтенә бәйле. Шуға күрә быңдай мәлдә бөтә нәмәгә ҡул һелтәп, битарафлыҡ ҡылыу бер ҙә килешкән эш түгел. Эйе, бар ундайҙар, бөтөн донъяға үпкәләп, һайлауҙы инҡар итеп, тауыш бирмәй ятып ҡалалар ҙа аҙаҡ зарланалар. Ә бит зарланырҙан алда ҡулдан килгән нәмәне эшләп ҡарарға кәрәк. Быйылғы һайлауҙар, минеңсә, барыбер ҙә ғәҙел үтер, тигән өмөттәмен, сөнки ныҡ ҡына ышандыралар: күҙәтеү ышанысլы буласаҡ, бюллетендәр менән "әүеш-тәүеш" уйынына юл ҡуйылмаясаҡ, тип. Тик тауыш бирерҙән алда ныҡлап анализларға кәрәк: үткән һайлауҙарҙа биргән вәғәҙәләрендә торҙомо депутаттар? Вәғәҙә түгел, ә башҡарған аныҡ эштәре булғандар, йәғни һүҙе лә, эше лә бер булған шәхестәрҙе һайлайыҡ. Мин үҙем мотлаҡ барасаҡмын һайлауға. Беҙҙең быуын, пенсионерҙар, депутаттарҙың да, һайлауҙарҙың да төрлөһөн күрҙе. Беҙ беләбеҙ ҙә бит кемде һайларға, тик бына йәштәр ни уйлайҙыр - миңә уныһы ҡараңғы. Ғәҙәттә, улар тиҙ ышаныусан, ел ыңғайына бөгөлөүсән була. Үҙ аҙымдарын улар ил, халыҡ мәнфәғәтенән сығып яһаһын ине.

***Айгөл БИКТИМЕРОВА, студент:*** Быйыл миңә 18 йәш тулды, мин тәүге тапҡыр һайлауға барасаҡмын. Тормошомда был үҙенә күрә бер яңылыҡ булыуға ҡарамаҫтан, мин уны, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әллә ниндәй ҙур өмөттәр менән ҡаршылайым, тип әйтә алмайым. Ни өсөнмө? Сөнки Дәүләт Думаһының әлеге депутаттар корпусының нисек эшләгәнен, ни ҡыланғанын телевидение аша күреп тә, гәзиттәрҙән уҡып та беләбеҙ. Улар араһында ысын мәғәнәһендә халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусы депутаттар бар микән? Булһа, улар нисә бөртөк? Дәүләт Думаһы депутаттары үҙҙәрен ҡайғыртыуҙан бушамай, минеңсә: юғары эш хаҡы, премия, айырым йәшәү һәм ял шарттары... Улар халыҡтан бик алыҫ тора һымаҡ. Ултырыштарҙан репортаждарҙа яртылаш буш залдарҙы, берәүҙең бөтәһе өсөн рәт буйлап йүгереп йөрөп тауыш биреүен күреп аптырағаным булды. Тимәк, депутаттар хатта эшкә лә йөрөмәй! Сейле-бешле закондар ҡабул итәләр, һөҙөмтәлә улар эшләмәй. Нисә йыл инде, мәҫәлән, мәғариф өлкәһен яйға һалыусы бер һәм берәгәйле закон сығара алмайҙар! Көнбайыш өлгөһөн беҙҙең нигеҙгә күсерә алмай нисә йыл этләнә юғиһә Фурсенко! Унан бигерәк, уҡыусыларға, студенттарға һәм уҡытыусыларға нисек ҡатмарлашты тормош: көн дә бер эксперимент!

Һайлау тураһында курсташтарым менән дә һөйләшкәнем бар. Күбеһе кемгә тауыш бирергә лә белмәй, сөнки улар ниндәй фирҡәләр бар һәм уларҙың программалары ниндәй икәнлекте лә белмәй. Ғөмүмән, сәйәсәт менән ҡыҙыҡһынмайҙар. Мин уларҙы ғәйепләмәйем. Сәйәсәт - быҫраҡ уйын икәнлеген беләбеҙ. Әлбиттә, мин быны бөтә йәштәр исеменән түгел, ә үҙем белгән таныштарым, дуҫтарым исеменән әйтәм. Сәйәсәтте күҙәтеп барырға беҙҙең ваҡыт юҡ: көн дә тест, семинар, йә зачет... Шуны ғына әйтә алам: мин ысын мәғәнәһендә демократик илдә йәшәргә теләр инем. Шуныһы ғына үкенесле: был минең һайлауҙа ҡатнашыуыма йә ҡатнашмауыма бәйләнмәгән.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ӨМӨТ УЯТЫУСЫ СЫҒАНАҠ



**"Киске Өфө" - рухлы гәзит. Күңелгә уйланыу орлоҡтары сәсеүсе баҫма. Ил-тел, халыҡ, йәмғиәт, мөхәббәт, ғәҙеллек... "Киске Өфө"нө аҫҡан һайын үрҙә һанап үтелгән төшөнсәләр хаҡында ниндәйҙер яңы фекерҙәргә тап булаһың. Сикләү-ҡоршауҙарҙан ҡотолорға өйрәтә был баҫма, уҡыусыларын рухи азатлыҡҡа әйҙәй. Шуның менән баһалы ла минең өсөн "Киске Өфө".**

Күнегелгән күренештәргә, хаҡлы тип һаналған ҡараштарға икенсе күҙлектән бағыу мөмкинлеге үҙе бәхеттер. Тимәк, икенсе юлдар ҙа бар. Улар, үҙ яҙмышына үҙең хужа, тип әйтә төҫлө. Ошоно аңлаған кешелә бер ваҡытта ла өмөт осҡоно һүнмәйҙер ул. Тимәк, "Киске Өфө" халҡыбыҙҙың өмөтөн уятыусы сығанаҡ тип тә әйтергә була. Хәҙерге заманда, күпселек өмөтһөҙлөккә бирелә барғанда, был бигерәк тә мөһим. "Фекер төйөнө", "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикалары бик фәһемле, минеңсә, сөнки образлы тел менән еткерелгән хәҡиҡәт күңелдә тәрән уйылып ҡала. "Киске Өфө"нөң уҡыусылары күп булһын, тип теләйем. Бал баҫманы аңлап, уйлап уҡырға кәрәк. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ундай уҡыусылар йәмғиәтебеҙҙә әле бик һирәк.

**Олеся ӘХМӘТРӘХИМОВА. Дәүләкән районы.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЕНӘЙӘТ КОДЕКСЫ... "йомшартыласаҡ"

**Иҡтисади енәйәттәр өсөн мәжбүри эшләтеү рәүешендә яза тәртибе индерелә. Күптән түгел Дәүләт Думаһы Енәйәт кодексын ярайһы ғына йомшарта төшәсәк революцион төҙәтмәләрҙе икенсе уҡыуҙа тикшерҙе.**

Беренсенән, ауыр булмаған иҡтисади енәйәттәр өсөн ғәйепләнеүселәрҙе килтерелгән зыянды 5 тапҡыр ҡаплатыусы штраф күләмен түләгән хәлдә азат итеү мәсьәләһе ҡарала. Икенсенән, 2013 йылдан алып яңы төр яза сараһы - холоҡ төҙәтеү һәм мәжбүри эшләтеү индерелә. Холоҡ төҙәтеүҙе ғәйепләнеүсе туранан-тура үҙенең эш урынында, ә мәжбүри эшләүҙе махсус үҙәктәрҙә башҡарасаҡ. Мәжбүри эшләтеү ауыр булмаған, уртаса ауыр һәм тәүгә ҡылынған ҡайһы бер ауыр енәйәттәр өсөн иркенән мәхрүм итеүгә алмаш сара булараҡ ҡулланыласаҡ. Өсөнсөнән, мыҫҡыл итеү һәм яла яғыу өсөн, кеше хоҡуғы һәм азатлығы тигеҙлеген боҙған һәм законһыҙ рәүештә ҡиммәтле металл әйләнеше өсөн енәйәт язаһы биреүҙе, ғөмүмән, алып ташлау күҙҙә тотола.

Төҙәтмәләрҙең дүртенсе төрө буйынса законһыҙ наркотиктар әйләнеше өлкәһендә тәүгә ҙур булмаған һәм урта ауырлыҡтағы енәйәт ҡылған наркомандарға дауаланыу курсы бөткәнгә тиклем (ләкин 8 йылдан да артыҡ түгел) яза биреү срогын кисектереп тороу мөмкинлеге бирелә. Дауаланып, тулыһынса һауыҡҡан хәлдә енәйәт яуаплылығы юҡҡа сығарылыуы ла ихтимал.

Әйткәндәй, ил буйынса төрмәлә ултырған ҡулға алыныусылар һаны тотороҡло рәүештә кәмей бара. Язаны башҡарыу буйынса Федераль хеҙмәт мәғлүмәттәре буйынса, 2009 йылдың 1 ғинуарына төрмәлә 133,2 мең кеше ултырған булһа, бер йылдан улар 124,6 мең, ә 2011 йылдың 1 ғинуарына инде 113,1 мең тороп ҡалған. Бөгөн төрмәлә 107,8 мең кеше бар. Ә һуңғы 10 йылда тикшереү изоляторҙарында ҡулға алыныусылар һаны 2 тапҡырға кәмене. Киләсәктә изоляторҙар һанының да кәмей барыуы күҙәтеләсәк.

# ТӘМӘКЕ ҠАПТАРЫНДА... үлем һүрәте

**Тәмәке тартыусыларҙы насар ғәҙәттәренән арындырыуы бик ҡыйын. Тәмәкегә ҡаршы көрәшеүселәр быныҡ өсөн нимә генә уйлап сығармай. Бөгөн йәмәғәтселек тә был насар ғәҙәткә кире мөнәсәбәттә. Әммә тәмәке ауына яңынан-яңы ҡорбандар эләгә тора.**

Уларҙы ҡаптарҙағы "тәмәке тартыу үлтерә", тигән яҙыу ҙа ҡурҡытмай. Яҙмалар тәьҫир итмәгәс, ҡаптарға хәҙер үҙәккә үтерлек, сирҡаныс һүрәттәр төшөрөргә булғандар. 2012 йылдың 1 июленән тәмәке ҡаптарында төтөн менән ағыуланған үпкәләр, һарғайған тештәр, башҡа шундай фотоһүрәттәр сағылдырыласаҡ. Хатта үле килеш тыуған сабыйҙарҙың фотолары урын аласаҡ. Быңдай ниәт ҡапыл ғына килеп сыҡмаған. Ҡарар 2010 йылда уҡ ҡабул ителгән булған. Әммә ҡапыл ғына ҡурҡыныс һүрәттәр менән шаҡ ҡатырыуҙан тыйылып торғандар.

Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы эргәһендәге эксперт советы ошо көндәрҙә һүрәттәр исемлеген раҫланы. Тәмәке ҡаптарын бөтәһе 12 төрлө һүрәт "биҙәп" торасаҡ. Киң йәмәғәтселек был яңылыҡты төрлөсә ҡабул итә. Кемдер унан файҙа булмаясаҡ, тиһә, бәғзеләр бындай һүрәттәр балалар психикаһына зыян килтерә, ти. Баланың психикаһын боҙор өсөн тәмәке ҡабы уйынсыҡмы ни?! Быңдай һүҙҙәрҙе тәмәкесе булған ата-әсәләр әйтәләр, моғайын. Баланы улар үҙҙәре боҙоуы хаҡында уйланалармы икән?

Икенсе яҡтан, ҡурҡыныс һүрәттәр барыһын да тәмәкене ташларға мәжбүр итә алыуы бик икеле. Тәмәкеселәрҙең күбеһе үҙ һаулығына күҙ йомоп ҡарағас, һүрәттәргә иғтибар итеп торормо икән? Тәмәкене бөтөнләй һатыуға сығармау иң яҡшы юсылдарҙың береһе булыр ине. Тик беҙҙең көеҡ бер ҡатлы күңелләр генә шулай уйлай шул. Тәмәке бөтһә, унан килем алыусылар ни эшләһен? Уларға ла бит ашарға кәрәк. Кемдеңдер һаулығы иҫәбенә, әлбиттә.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ҺАЙЛАУ ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ

**Йыл бөтөүгә табан бара, булырҙай яңылыҡтарыбыҙ - булып, күреребеҙҙе күреп бөттөк шикелле быйыл, тиһәк, юҡ икән. Тағы берҙә ҡайнашып аласаҡ бар икән әле - Думаға һайлауҙар көтә беҙҙе.**



Яңы һайлауҙар - яңы өмөттәр... Кешенең һоҡланғыс бер сифаты бар: уны күпме генә алдаһалар ҙа, уның күңел төбөндә әҙ генә булһа ла киләһе һайлауға өмөт ҡуҙҙары баҙлай барыбер. Ана шул ҡуҙҙарҙы өҫтә ғына тоҡандыра алыусылар - беҙҙең һайланыусыларыбыҙ була ла инде. Нимә бирә һуң беҙгә һайлауҙар? Ошо мәлдә барған һайлау алды дебаттарын тыңлаһаң, хайран ҡалырлыҡ. Коррупцияға ла батҡанбыҙ, пенсияны ла етерлек алмайбыҙ икән, уҡытыусыларыбыҙҙы ла, табиптарыбыҙҙы ла талайҙар... Таныш телмәрҙәрме? Ә бит нисәмә саҡырылыш буйы Думаға һайланған депутаттар "һайрай" быны. Халыҡ уларға нисә тапҡыр ышаныс белдерҙе, ә уларға һаман низер етмәй...

Шуныһы аптырата: партияларҙың бөтәһен дә тиерлек инде нисә тиҫтә йыл инде шул бер үк лидерҙар, бер үк кешеләр етәкләй. Улар араһында йәштәргә урын да юҡ түгелме шул? Бөтә нәмә лә бит бер мәл иҫкерә, ҡартая. Шунан һуң уны сүплеккә ырғытырға ғына ҡала. Етмеш биш йәштә кеше революция яһамай. Бөтә партиялар менән бергәләп, теге йәки был эштәрҙе бергәләп башҡарайыҡ, тип һөйләнәләр, мин уларға ныҡыраҡ ышаныр инем. Юҡ бит, өйөпмә-өйәләр бер-береһенең өҫтөнә бысраҡты. "Һеҙ урлайығыҙ, һеҙ ашайығыҙ", тиҙәр. Ә үҙҙәре ҡул ҡаушырып ҡарап торғанмы? Әҙәп, бер-беренә хөрмәт, хеҙмәттәшлек тигән төшөнсәләр был әҙәмдәрҙе бик алыҫтан урап үтәләр, күрәһең. Бөтә халыҡ алдына сығып һүҙ көрәштермәгән, башҡаларға яла яҡмаған, башҡаларға түҙемле ҡараште булған партияға тауыш бирге килә. Минең әсәйҙең дә фекере шулай: "Илдә именлек бар бит, ниңә барыһын да ҡараға буярға тырышалар икән", - тип аптырай ул. Ул бит Бөйөк Ватан һуғышы дәүере кешеһе, башынан үткәргән ауырлыҡтар бихисап. Хәҙерге тормошто ул барыбер ҙә ожмахҡа тиңләй. Пенсияһы ваҡытында килә, күләменә дәғүәһе юҡ, булғанына шөкөр итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәштәр һайлауҙарға етдиерәк ҡараһын ине. Бер кемгә лә сер түгел: һайлауҙарҙа, йәштәргә ҡарағанда, аяҡтарын саҡ-саҡ күсереп йөрөгән ололар әүҙемерәк ҡатнаша. Ә илдең киләсәге, яңырыуҙар, үҙгәреүҙәр - йәштәр ҡулында бит. Ә агитаторҙарға һүҙем шул: ҡайһылыр партияға өгөтләү менән бер рәттән, бөтәһенең дә һайлауҙарға килеүен тәьмин итә алһағыҙ, һеҙ эшегеҙҙе тулыһынса урын-еренә еткереп башҡарҙығыҙ, тигән һүҙ.**

**Әхәт ИШБУЛАТОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Теләс ауылы.**

КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"

**Мөхтәрәм милләттәшебеҙ! Һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм ғәмен уята алырлыҡмы?**

Быңа шулай, **2012 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барғанда**, уҡыусыбыҙ һәм үҙебеҙ алдына ошо һорауҙарҙы ҡуйбыҙ. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарыбыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы енер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә булмай ҡалмаясаҡ**. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуйбыҙ. **Ә ноябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрәбеҙ.**

**Әйткәндәй**, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтәнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп**, 2012 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙҙең 50665 индекслыһына **348 һум 24 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **378 һум 24 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән 2013 йылға тиклем "Башҡортостан Республикаһында умартасылыҡты үҫтереү һәм бал етештереүҙе арттырыу" һәм "Башҡортостан Республикаһында ҡымыҙ йылҡысылығын үҫтереү һәм бейә һөтөн (ҡымыҙ) етештереүҙе арттырыу" программалары сиктәрендә республика бюджетынан субсидиялар биреү тәртибе раҫланды. 2011 йылда умартасылыҡҡа ярҙам бал ҡорттары күсен аҫрауға киткән сығымдарҙың бер өлөшөн компенсациялау рәүешендә буласаҡ. Ә ҡымыҙ йылҡысылығына дәүләт ярҙамы һауын бейәләрен аҫрау, бейә һөтө етештереү көеҡ ике йүнәлеш буйынса сығымдар өлөшөн ҡаплау өсөн субсидиялар биреү рәүешендә тормошҡа ашырыласаҡ.

✓Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән ике дөйөм белем биреү мәктәбенә республиканың арҙаҡлы шәхестәренең исемдәре бирелде. Өфөнөң Калинин районындағы 140-сы башҡорт гимназияһы хәҙер күренекле башҡорт прозаигы, драматург, БАССР-ҙың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның, Борай районының Кәшкәләү урта мәктәбе ошо мәктәпте тамамлаған күренекле педагог, профессор Мөсәлиә Ғәли ҡыҙы Хәйруллинаның исемен йөрөтәсәк.

✓Ауылда эшләргә ҡарар иткән медицина вуздарын тамамлаусылар 2012 йылдан башлап "аяҡҡа баҫыу өсөн" республика бюджетынан 100-әр мең һум аҡса аласаҡ. Был "Земство табибы" проекты сиктәрендә торлаҡ һатып алыуға бирелергә тейешле 1 млн һумдан тыш күрһәтеләсәк ярҙам. "Земство табибы" проектының асылы түбәндәгенән ғибәрәт: ауыл ерендә кәм тигәндә биш йыл эшләргә теләк белдергән һәр йәш табип үҙенең социаль-көнкүреш проблемаларын хәл итеү өсөн дәүләттән бер миллион һум аҡса алырға хаҡлы. "Земство табибы" программаһын тормошҡа ашырыу 2012 йылдың ғинуарынан башланырға тейеш.

✓Сөгөлдөрсөләр быйыл 1,4 млн тонна татлы тамырҙаҙыҡ ҡаҙып алды. Уның уңышы гектарынан уртаса алғанда 255 центнерҙы тәшкил итте. Йыйып алынған уңыштан Башҡортостан 150-160 мең тонна шәкәр ҡомо аласаҡ. Бөтә Рәсәйҙән һәм ҡайһы бер яҡын сит илдәрҙән Башҡортостан шәкәренә заявкалар килә. Шишмә шәкәр заводы үҙенең продукцияһын Ҡаҙағстанға һәм Ҡырғыҙстанға оҙата башланы ла инде.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# АЙЫУ УРМАНДЫ ҺАҠЛАЙ,

## урман айыуҙы һаҡлай…

**Был әйтем бер ҡарауға "Икегә өстө ҡушһаң да, өскә икене ҡушһаң да, биш була" тигән һымаҡ яп-ябай фекерҙе аңлатҡан кеүек. Әммә уға һалынған логика механизмын тотош кешелекте, илде, дәүләтте, милләтте һаҡларлыҡ йөкмәткегә лә ҡороп була.**



Айыуҙың илағанын күргәнегеҙ бармы? Мин уның ни рәүешле илағанын күрмәһәм дә, ишеткәнем булды. Беҙҙең яҡта, әллә менәр йылдар буйына ҡанға һеңешкән йәйләүҙе һағыныу юшҡынын баҫыр өсөнмө, әллә сабынлыҡтың ауылдан алыҫта урынлашыуын сәбәп итепме, бесән мәле етһә, күптәр ҡырҙа ҡыуыш ҡороп, ҡуна-ятып бесән эшләүҙе хуп күрә. Ҡайһы берәүҙәр хатта малдарын да урманға алып китеп, айҙар буйына урман төбөндә сәхрәлә ята. Беҙ ҙә бер нисә йыл рәттән яланға терәлеп ятҡан Мәхмүт йылғаһы буйын ҡыуышлап яттыҡ та, усаҡ яғырға ҡоро утын табыу проблемаһы барлыҡҡа килгәс, бер йылды ҡыуышты йылғанан алыҫ түгел урында урман эсенә ҡорҙоҡ. Ҡорҙоҡ та ул, беҙҙең өсөн тыныс көндәр юғалды. Тәүге төндә уҡ ер һелкенгән тауышҡа уянып киттек. Атайыбыҙ ҡул осондағы балтаһын ҡулына эләктерҙе лә, ҡыуыш янында төнгөләккә яҡҡан усаҡтан торомбаш алып, беҙгә ҡыуыш янынан китмәҫкә ҡушып, төнгө ҡараңғылыҡҡа инеп юғалды. Ул бер аҙҙан әйләнеп килде лә:

- Михай Потапыч (айыуҙы ул шулай атай торғайны) килгән. Ул үҙ биләмәһенә ҡыуыш ҡорғанды яратмай. Ергә күсәк менән һуғып, беҙҙе өркөтөп, был тирәнән ҡыуып ебәрергә итә. Әле ҡасып китте, иртәгә тағы киләсәк, беҙҙе тыныслыҡта ҡалдырмаясаҡ, -тине.

Атайҙың һүҙе раҫҡа сыҡты: иртәгәһенә, унан һуң да килде биләмә хужаһы. Килгән һайын асыуы арта ғына барҙы айыуҙың. Беҙ иһә, ул килеп үкерә-үкерә ер туҡмай башлауға, ҡыуыш янына көндәҙ үк әҙерләп ҡуйған ҡоро утынды усаҡҡа ырғытып, урман эсен гөлт иттереп яҡтыртабыҙ, ағастарға ҡоро ағас менән һуғып гөмбөрҙәтәбеҙ. Бер аҙҙан айыуҙың тауышы тынып ҡала. Нисек кенә булмаһын, өйрәнгән биләмәһенә беҙҙең килеүҙе тәүге көндәрҙән үк бик ауыр кисерҙе ул.

Айыу менән өнһөҙ көрәшебеҙ бер аҙна самаһы барғандан һуң, бер көн урман төпкөләндә мотобыҫкы, трактор, машина тауыштары ишетелде. Атайыбыҙ әйтеүенсә, урмансылар нәк айыуҙың өңө урынлашҡан ерҙә диләнкә билдәләп, ағас ҡырҡырға килгән икән. Шунан һуң урман хужаһының төнгө тауыштары хәтһеҙ ваҡытҡа тынып торҙо. Инде йәнебеҙ тынсып, төнгө йоҡоларыбыҙ туйып, ял итә башлаһыҡ ҡына тигәндә, бер нисә төндән һуң тағы ла килде Михай Потапыч. Атайыбыҙ әйтеүенсә, беҙҙең менән хушлашып, үпкә һүҙҙәрен әйтер өсөн килгән ул, етмәһә, балаһын да эйәрткән булған икән. Ни тиһәң дә, уның тыныслығын боҙоусыларҙың тәүгеләре беҙ инек бит. Кем белә, бәлки, урман ҡырҡыусылар йөҙөндә лә беҙҙе күргәндер айыу.

Был юлы беҙҙе ҡурҡытырға түгел, ә илар өсөн килде ул. Айыуҙарҙың кеше тауышы сығарып ҡысҡырыуы, бала булып илауы, һайыҫҡан булып шыҡрыҡлауы, ҡоштар булып һайрауы тураһында ишеткәнебеҙ бар ине бығаса. Был юлы инде был һүҙҙәрҙең дөрөҫ булғанына ышандыҡ беҙ. Атайыбыҙ һөйләне: айыу илаған сағында һаман да йөҙрөгө менән ерҙе туҡмай, ә балаһы әсәһенең илағанына ҡарап илай икән. Уларҙың үкһегәне йөрәккә һеңеп ҡалды. Әгәр ҙә уларҙың кем икәнлеген алдан белмәгән булһам, валлаһи, әҙәм баларының йөрәк өҙҙөргөс итеп үкһеүе итеп ҡабул итер инем. Хайуандарҙың кешеләрҙең рәхимһеҙлегенә ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереүе ауазынан да ауырыраҡ нимә бар икән был донъяла? Тәбиғәттең кешелеккә ризаһыҙлыҡ белдереү ауазы ла ишетелде айыуҙарҙың ошо илауында...

Шул ваҡиғанан һуң айыуҙар был урманлыҡты ташлап китергә мәжбүр ителде. Эшселәр урманлыҡты ҡола ялан итеп, ҡеүәтле тракторҙары менән ағастарҙы төбө-тамыры менән аҡтарып, һөрөп, бушап ҡалған арауыҡҡа ҡарағай үҫентеләре сәсте. Хәҙер ул ҡарағайҙар 3-4 метр бейеклеккә күтәрелде, әммә айыуҙар был урынды мәңгелеккә төйәкләмәҫ булды. Улар Уралдың эсенәрәк сигенде. Урал эсе лә төпһөҙ түгел...

Уйлаһаң, уйылып китерлек: нимә уйланы икән айыуҙар теге саҡта тыуған ерҙәре һаналған урмандан кешеләр тарафынан ҡыуылып киткән саҡта? Хайуандар уйлай, тойғо кисерә белмәй, улар менән тәбиғи инстинкт идара итә, әммә уларҙың ризаһыҙлыҡ белдереп илаған тауышы иҫкә төшһә, үҙ "урманынан" айырылыу мәле хатта уларҙы ла бер мәлгә хисле иткәндәй тойола. Тыуған ерҙәренән генә түгел, үҙҙәрен һаҡлаусы ышыҡтан, ҡалҡандан, саранан айырылған бит ул саҡта айыуҙар. Тимәк, айыуҙар ул саҡта, урман хужаһы булараҡ, үҙ асылын юғалтыу ҡайғыһынан ғәрләнеп илаған. Ошо күңелһеҙ ваҡиға шауҡымында йөрөй торғас, шундай шиғыр юлдары ла яҙылды:

*Ирмен тигән ирҙә генә донъя,*
*Ил хаҡында ирме уйламай?*
*Әгәр илһеҙ яңғыҙ тороп ҡалһа,*
*Нисек түҙһен ирҙәр иламай?*

"Айыу урманды һаҡлай, урман айыуҙы һаҡлай" тигән әйтем хаҡында һүҙ алып барғанда иҫемә төштө бала сағымдың ошо тетрәткес ваҡиғаһы. Һис һүҙһеҙ, милли идея булырлыҡ әйтем. Ә бит "айыу", "урман" һүҙҙәре урынына башҡа һүҙҙәрҙе ҡулланып, ошо әйтемдең тағы ла әллә нисәмә вариантын килтерергә була. **Әйтәйек:**

**-кеше ерҙе һаҡлай, ер кешене һаҡлай;**

**-кешелек иманды һаҡлай, иман кешелекте һаҡлай;**

**-ата-әсә балаһын һаҡлай, балаһы ата-әсәһен һаҡлай;**

**-милләт телен, динен һаҡлай, теле, дине милләтте һаҡлай;**

**-кеше милләтен һаҡлай, милләте кешене һаҡлай;**

**-милләт мәҙәниәтен, йола-традицияларын һаҡлай, мәҙәниәте, йола-традициялары милләтте һаҡлай;**

**-халыҡ үҙ рухын, тарихи хәтерен һаҡлай, рухы, тарихи хәтере халҡын һаҡлай;**

**-башҡорт Уралтауын, ватанын һаҡлаған, Уралтауы, ватаны башҡортто һаҡлаған…**

Был варианттарҙы тағы ла бик оҙон итеп теҙергә мөмкин булыр ине. Шулай ҙа башта килтерелгән әйтемдең төп фекерен шулай тип әйтергә лә була: һәр кемдең яҙмышы үҙ ҡулында һәм һәр кем үҙенең йәшәгән төйәгенә, мөхиткә, шарттарға һаҡсыл ҡараштa булһа, шул төйәк, ул мөхит һәм шарттар ул кешенең үҙен дә һаҡлаясаҡ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендәге ижади проекттарға ярҙам итеү өсөн Башҡортостан Президенты грантына дәғүә итеүгә конкурс иғлан ителде. Быйыл ул өсөнсө тапҡыр үткәрелә. БР Президентының күрһәтелгән гранттарына дәғүә итеүгә заявка документацияһын тултырыу һәм биреү тәртибе www.mknprb.ru рәсми сайтында баҫылған. Бөтә конкурс материалдарын "гранттар конкурсы" билдәһе менән 2012 йылдың 1 февраленә тиклем тапшырырға кәрәк. Үҙған өс йылда мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендәге 100 мең күләмендәге БР Президенты гранттары менән 75 кеше бүләкләнгән, 15 ижади коллектив 300-әр мең һум алған.

✓25 ноябрҙә Һаулыҡ һаҡлау өлкәһен үҫтереү мәсьәләләре буйынса республика советының күсмә ултырышы үтәсәк. Был юлы төньяҡ-көнсығыш төбәктәрҙең - Салауат, Балаҡатай, Дыуан, Мәсетле һәм Ҡыйғы районларының мәсьәләләре ҡаралаcаҡ. Медсоветтың пленар өлөшө Салауат районының Малаяҙ ауылында үтәсәк. 20 ноябргә барлыҡ объекттарҙа ла төҙөлөш эштәре тамамланып, бөтөн кәрәкле медицина ҡорамалдары һатып алынасаҡ.

✓Өфө сәнғәт училищеһының икенсе курс студенттары Альберт Шафиҡов һәм Юнир Әхмәтйәнов Францияның Рубэ ҡалаһында үткән Халыҡ-ара баянсылар конкурсында еңеү яуланы. Улар төрлө номинацияларҙа һәр береһе алтын һәм көмөш миҙалдарға лайыҡ булды, тип хәбәр иттеләр Өфө сәнғәт училищеһынан.

✓Өфөнөң ике юғары уҡыу йорто ректорына "Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең мәғариф өлкәһендәге премияһы лауреаты" тигән почетлы исем бирелде. Юғары наградаларға техник фәндәр докторы, профессор, Өфө дәүләт нефть техник университеты ректоры Айрат Шаммазов һәм техник фәндәр докторы, профессор, Өфө дәүләт авиация техник университеты ректоры Морат Ғөзәйеров лайыҡ булды.

✓Өфөлә "112-се (16-сы гвардия) Башҡорт кавалерия дивизияһы. Ҡаһарманлыҡ һәм данға 70 йыл" халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция булып үтте. Конференция сиктәрендә дивизияның "Ҡыҙыл атлылар" гәзитенә арналған "Ҡаһарманлыҡҡа илһамландырыусы" тигән күргәҙмә ойошторолдо.

✓ *Ғәҙәттә ҡараңғы төшкәс, халыҡ йөрөмәгән урындарҙа хәүеф арта. Шуға күрә тәртип һаҡлаусылар ундай урындарҙа йөрөргә кәңәш итмәй. Енәйәтселәр ҡорбаны, тәү сиратта, ҡатын-ҡыҙҙар, үсмерҙәр, йәш егеттәр.*



ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...

# АВТОМОБИЛЕҢДЕ...
## урламаһындар, тиһәң

**Енәйәтсе ҡорбаны булмайым, тиһәң, бөгөн һәр ерҙә үҙеңде бик һаҡ тоторға кәрәк. Был хаҡта бөтәһе лә белә кеүек, әммә күптәр үҙҙәренең иғтибарһыҙлығы арҡаһында ла зыян күрә.**

Баш ҡалала һуңғы ваҡытта автотранспорт менән бәйле енәйәттәр күбәйгән. Быйыл еңел автомобилдәрҙе урлау 40 процентҡа (347), транспорттан әйбер урлау 27 процентҡа (862) артҡан. Ошо хаҡта Өфө ҡала округы хакимиәтенең эске эштәр идаралығы начальнигы вазифаһын башҡарыусы Эдуард Матвеев белдерҙе. Бындай енәйәттәр көн һайын тиерлек ҡылына. Бурҙар тәү сиратта "Жигули" автомобилдәрен алып китә. Сөнки күп осраҡта был машиналарҙың хужалары автосигнализация ҡуймай. Октябрҙә генә 30 шундай машина урланған. Енәйәттәр төнгө ваҡытта, башлыса эшһеҙ, бер ниндәй шөғөлө булмаған йәштәр тарафынан ҡылына. Автомобилдәр аҙаҡтан ҡала ситендә һүтелгән килеш табыла. Аккумуляторҙар, тәгәрмәстәр, башҡа ҡоролмаларҙы бурҙар һата йәки металл һынығына тапшыра. Шуға күрә полиция хеҙмәткәрҙәре халыҡты уяуыраҡ булырға саҡыра.

Э. Матвеев билдәләүенсә, дөйөм алғанда, Өфөлә енәйәтселек осраҡтары быйыл былтырғыға ҡарағанда аҙыраҡ теркәлгән. Иҫкәртеү саралары үҙ һөҙөмтәһен бирә, ти ул. Әммә айырым енәйәт төрҙәренең йыш ҡылыныуы һаман да борсолоу тыуҙыра. Автомобилдәр урлауҙан тыш, кеше талау осраҡтары күп теркәлә. Быйыл баш ҡалала меңгә яҡын шундай енәйәт ҡылынған. Ғәҙәттә ҡараңғы төшкәс, халыҡ йөрөмәгән урындарҙа хәүеф арта. Шуға күрә тәртип һаҡлаусылар ундай урындарҙа йөрөргә кәңәш итмәй. Енәйәтселәр ҡорбаны, тәү сиратта, ҡатын- ҡыҙҙар, үсмерҙәр, йәш егеттәр. Башлыса кеҫә телефондары талап алына.

"Һуңғы йылдарҙа енәйәтселектең йәшәреүе күҙәтелә, - ти Э. Матвеев. - Элек хөкөм ителгән йәш кешеләр ҡабаттан яман юлға баҫа. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙә айырым енәйәт төрҙәрен ҡылыусыларға ҡарата яза йомшағыраҡ. Шул уҡ автомобиль урлаусыларҙы тейешле кимәлдә яуапҡа тарттыра алмайбыҙ. Әлбиттә, машина тәҙрәһен ватҡан һәр үсмерҙе бикләп ултыртып ҡуйырға тимәгән. Әммә был хәҡиҡәт - йылдан-йыл йәштәр енәйәтселек юлына йышыраҡ баҫа".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хоҡуҡ һаҡлау органдары нисек кенә эшләмәһен, үҙ хәүефһеҙлегебеҙ һәр саҡ үҙ ҡулыбыҙҙа. Ә енәйәтсегә тап булғанда, үҙеңде закон сиктәрендә генә яҡлау тураһында онотмаҫҡа кәрәк. Сөнки ҡорбандан енәйәтсегә әүерелеү ҙә оҙаҡ түгел. Бөгөн теләгән кешегә хәрби ҡорал алыу үтә ҡыйын түгел. Был йәһәттән дә закондың ҡаты булмауы хәлде ҡатмарлаштыра, ти полиция хеҙмәткәрҙәре. Шуның арҡаһында ябай бәхәстәрҙең дә күңелһеҙ тамамланыу осраҡтары бар. Бөгөн Өфөлә йәшәүсе өс меңгә яҡын кеше травматик ҡоралға эйә булған. Ә теркәлмәгәндәре күпме икән?**

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЛА ТӘРБИӘЛӘҮҘЕ...
## дәүләт елкәһенә генә һалмайыҡ

**Был аҙнала баш ҡалала V Бөтә Рәсәй әсәләр форумы үтте. Унда Рәсәйҙең 44 субъектының федераль округтары етәкселәре урынбаҫарҙары, министрлыҡтар һәм ведомстволар етәкселәре, Йәмәғәт палатаһы ағзалары, билдәле йәмәғәт һәм сәйәси эшмәкәрҙәр, илдең ғилми берләшмәләре вәкилдәре лә ҡатнашты. Төп маҡсаты ғаилә, әсәлек һәм балалыҡ проблемаларын хәл итеү өсөн берләшеү булған форум "Рәсәйҙең киләсәге - әсәйҙәр ҡулында" тигән акция сиктәрендә үткән сараларҙың иң аҙаҡҡыһы.**



-Бишенсе, юбилей форумы юҡҡа ғына Башҡортостанда үткәрелмәй. Республикала алты меңдән ашыу әсә "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнгән. Туғыҙ һәм унан да күберәк бала тәрбиәләүселәргә бәләкәй автобустар бүләк ителә. Рәсәйҙең бер субъектында ла бындай изге эш башҡарылмай. Башҡортостан кеүек, тағы ҡайһы төбәктең Әсә йылы иғлан итеп, әсәлек проблемаларына иғтибар йүнәлткәне бар? Шуға ла был форумдың тап ошо республикала үтеүе минең өсөн үтә ҡыуанысл ы, - тигәйне сараны асыу тантанаһында "Әсәй" хәйриә фондтары халыҡ-ара йәмәғәт ойошмалары ассоциацияһы президенты Рәис Аҙнағолов.

Унының һүҙҙәрен хуплап, Республика Президенты Рөстәм Хәмитов та, Башҡортостанда балалар халыҡтың дүрттән бер өлөшөн алып тороуы һәм бала тәрбиәләүсе ғаиләләрҙең даими рәүештә дәүләт яҡлауында булыуын белдерҙе. Күп балалы, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә ун төрҙән ашыу социаль ярҙам күрһәтеү, уларға торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн сертификаттар тапшырыу республика етәкселегенең оҙайлы йылдар дауамында алып барылған өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе булып тора. Яңыраҡ күп балалы һәм инвалид бала тәрбиәләүсе ғаиләләргә торлаҡ төҙөү өсөн бушлай ер биреү тураһында закон ҡабул ителде. "Әлегә был закон буйынса ер бүлеү механизмдарын яйларға кәрәк, сөнки был мәсьәләне хәл итеү өсөн ауыл ерендә бер, урта һәм ҙур ҡалаларҙа бөтөнләй икенсе төрлө алымдар кәрәк", - тине Рөстәм Зәки улы.

Сара сиктәрендә ойошторолған түңәрәк ҡорҙарҙа ғаилә-дәүләт бәйләнешенең ил кимәлендә закон тарафынан нығытылмауы, ғаилә сәйәсәте концепцияһының булмауы, бөгөнгө көн күҙлегенән Рәсәй Ғаилә кодексының ярайһы уҡ иҫкереүе, бала тәрбиәләү буйынса пособиеларҙы түләүгә аныҡлыҡтар индереү кәрәклеге лә, башҡа проблемалар ҙа әйтелде. Шулай уҡ бөтөн Рәсәй территорияһында ҡәтғи социаль стандарттар индереү ҙә өлгөрөп еткән мәсьәлә, тип билдәләнде, сөнки бөгөн Мәскәү төбәгендә йәшәгән церебраль фалиж менән сирле бала йыл һайын сит илдә реабилитация үтә алһа, төбәктәрҙә уны дауалау өсөн хәйриә ойошмалары аҡса эҙләргә мәжбүр була. Иң ҡыҙығы, ғаиләгә ҡағылған ғәмәлдәге закондарҙың күбеһе аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә генә ҡағыла, улар бөгөн дәүләт тарафынан яҡлаулыраҡ булып килеп сыға. Әммә күп бала тәрбиәләгән ғаилә, килеменә ҡарамайынса, дәүләт ярҙамы алырға тейеш. Был турала РФ эргәһендәге өҫтөнлөклө милли проекттарҙы тормошҡа ашырыу һәм демографик сәйәсәт буйынса комиссия, Рәсәй Президенты эргәһендәге гражданлыҡ йәмғиәттәре институтын үҫтереү һәм кеше хоҡуҡтары советы ағзаһы Елена Николаева ла белдерҙе.

Рәсәй буйынса яңғыҙ әсәләрҙең күбәйеүе, йәштәрҙең ғаилә ҡорорға ашыҡмауы ла бөгөнгө көндә илдә ғаилә статусының түбән булыуын күрһәтә. Шулай уҡ атай статусын, атай абруйын күтәреү өсөн атайҙар форумы үткәреү кәрәклеге лә әйтелде был сарала.

"Биш көнлөк ҡанлы һуғыш беҙҙең балаларыбыҙҙы, туғандарыбыҙҙы, егеттәребеҙҙе күпләп һәләк итте. Был юғалтыуҙы кире ҡайтарыу өсөн беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ үҙе, туғандары һәм ошо егеттәр өсөн бала табырға бурыслы. Мин һәр осрашыу һайын уларға ошо һүҙҙәрҙе әйтеп йөрөйөм", - тигәйне 2008 йылда ҡоралл ы конфликтты кисергән ҡатын, әсә, Көньяҡ Осетия президентының дәүләт советнигы Жанна Засеева Рөстәм Хәмитов менән осрашыуҙа. Беҙҙә әсәлек капиталдары, башҡа социаль ярҙамдар ҙа әсәләрҙе бала табыуға ҡеүәтләндерә алмаһа ла, Кавказ халҡы дәүләт ярҙамы ла көтөп тормай һәм үҙенең милләтенең һанын арттырыуға яуаплы ҡарай. Был йәһәттән беҙгә фәһем алыр урын бар уларҙан. Ғаилә институтын, әсәнең социаль статусын нығытыу, әсәлек һәм балалыҡты яҡлау, ғаилә проблемаларына йәмәғәт һәм граждандар йәмғиәте институттарын йәлеп итеү һәм уларҙы хәл итеүҙә аныҡ юлдар эҙләү өсөн форумдар ойоштороу бик изге эш. Тик шулай ҙа ғаиләләр үҙҙәре бала табыуға, уларға лайыҡлы тәрбиә биреүгә еңел ҡарай икән, дәүләт күрһәткән социаль ярҙам менән генә был проблемаларҙы хәл итеп булмаясаҡ, сөнки нимә генә тимә, яҡшы кешене лә, яманын да әсә тәрбиәләп үҫтерә.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө халҡының сәләмәтлегенә экологик хәлдәрҙең, аҙыҡ-түлек сифатының һәм медицина хеҙмәтләндереүенең йоғонтоһо ҙур. Ҡала атмосфераһына ташланған бысраҡ матдәләр күләме былтыр 345 мең тоннанан ашыуҙы тәшкил иткән. Шуларҙың 220 меңе - автотранспорт төтөнө. Йәнә уҙған йылда Өфө биләмәһендә алынған һыу пробаларын тикшереү барышында гигиена нормативтарынан тайпылыуҙың 28 осрағы теркәлгән. Санитар-химик күрһәткестәр буйынса тайпылыштар булмаған. Өфөлә профессиональ ауырыуҙар кимәле әлеге мәлдә республика кимәленән түбән булып ҡала - 10 мең хеҙмәткәргә иҫәптә 0,93 һәм 1,74 процент.

✓2011 йыл аҙағына тиклем төбәктең ауыл мәктәптәре өсөн дөйөм алғанда 66 млн 670 мең һумға 66 мәктәп автобусы һатып алынасаҡ. Яңы автотранспорт асҡыстары 47 район һәм ике ҡала вәкилдәренә тапшырыласаҡ. Был 155 тораҡ пункттан 2 меңдән ашыу баланы мәғариф учреждениеларына һәм йәшәгән урындарына алып барыуҙы ойошторорға мөмкинлек бирәсәк. Әлеге ваҡытта 1804 тораҡ пункттан 23665 уҡыусы мәктәп автобустарында уҡырға йөрөй. Ошо көндәрҙә генә 14 районға (Әбйәлил, Асҡын, Ауырғазы, Баймаҡ, Баҡалы, Бәләбәй, Балаҡатай, Белорет, Бишбүләк, Бүздәк, Борай, Дүртөйлө, Ейәнсура, Йылайыр) мәктәп автобустары бирелгән.

✓Өфөлә ер аҫты тоннелдәре төҙөү киләһе йылға күсерелгән. Бында, тәү сиратта, "Үсмерҙәр китапханаһы" туҡталышы районындағы Октябрь проспекты аша ер аҫты юлын төҙөү тураһында һүҙ бара. Өфө хакимиәтенең ҡала йәшәйешен тәьмин итеү идаралығы начальнигы Андрей Федосов аңлатыуынса, был тоннель төҙөлөшөнә аукцион үткәреү барышында уны төҙөргә теләгән ойошмалар табылмаған. Һөҙөмтәлә проект 2012 йылға ҡалдырылған. Киләһе йылда Өфөлә йәмғеһе алты ер аҫты тоннеле төҙөлөргә тейеш. Ә алыҫ киләсәктә уларҙың иҫәбе ҡалала 30-ға етәсәк.

✓25 ноябрҙә Өфөнөң "Йәштәр һарайы"нда төрки телле шиғриәт әҫәрҙәрен тәржемә итеүселәрҙең "Аҡ торна" Халыҡ-ара конкурсының лауреаттары менән осрашыу кисәһе үткәрелә. Республикабыҙҙа йәшәгән төрлө милләт вәкилдәренән торған киң билдәле эстрада йондоҙҙары сығыш яһаясаҡ, күргәҙмә ойошторолаcаҡ, еңеүсе лауреаттар үҙҙәре тәржемә иткән шиғырҙарын уҡып ишеттерәсәк. Кисә 19 сәғәттә башлана.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Геннадий СУМИН, Алтай республикаһының хеҙмәт һәм социаль үҫеш министры:** Мине республикала йәшәгән шул тиклем ихлас күңелле һәм ҡунаҡсыл халыҡ һоҡландырҙы. Был тиклем ҡунаҡсыллыҡты әлегә тиклем бер ерҙә лә күргән юҡ ине әле. Ваҡытыбыҙҙың бер минутын да бушҡа сарыф итмәнек, эшлекле һөйләшеүҙәр, ултырыштар юғары кимәлдә үтте. Әммә, ҡыҙғаныска күрә, ҡаланы ҡарап сығырға ваҡыт булманы. Ҡатын-ҡыҙҙарығыҙ әүҙем, матур, аҡыллы, әгәр ҙә бындай форумдар йыйып, унда күтәрелгән мәсьәләләр ил етәкселәренә барып етмәһә, уны үткәреүҙән файҙаһы юҡ. Сөнки бында һөйләшелгән һүҙҙәрҙең закон булып ҡабул ителеүе шарт. Ошо йәһәттән был форумда республиканың идара органдарында эшләгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың күпләп ҡатнашыуы, уларҙың ғаиләне яҡлау мәсьәләһен яҡшы аңлауы эшебеҙҙе һөҙөмтәле итте, тип уйлайым.

Һәр ғаилә өсөн торлаҡлы булыу - иң мөһим проблемаларҙың береһе. Алтай республикаһында бушлай ер участкалары бирелә, һәр кешегә йорт һалыу өсөн ағас бүленә. Әммә был эш бар ғаиләләрҙе торлаҡлы итергә мөмкинлек бирмәй. Шуға ла уларға, бигерәк тә күп балалы ғаиләләргә дәүләт тарафынан оҙайлы ваҡытҡа льготалы кредит бирелергә тейеш. Мин быны юҡҡа ғыны әйтмәйем, 1980 йылдарҙа махсус ҡарар менән 25 йылға ошондай кредит бирелә торғайны, хәҙер ҙә ошо программаны яңынан тергеҙергә кәрәк.

**Ирина КОТКИНА, Ненец автономлы округы губернаторы советнигы:** Форумдың башҡа делегаттары Өфөгә Мәскәү аша килһә, беҙ Нарьян-Мар - Өфө тура рейсы менән килдек, сөнки Ненец округын Башҡортостан менән бәйләп тороусы еп бар - беҙҙең округта "Башнефть" компанияһы нефть сығара. Шуға ла Башҡортостан тураһында ишетеп белһәм дә, килеп күргәнем юҡ ине. Беҙҙең уртаҡ яҡтарыбыҙ бар, мәҫәлән, территориябыҙҙың майҙаны бер үк. Беҙҙең айырмалы яҡтарыбыҙ ҙа бар, мәҫәлән, Башҡортостанда 4 миллиондан ашыу халыҡ йәшәһә, беҙҙә 42 мең кеше йәшәй. Ғөмүмән, республика ла, унның халҡы ла оҡшаны. Президенттың ғаилә проблемаларына ҡағылған доклады бик ентекле һәм ихлас булды, республика етәкселеге әсәлек, балалыҡ проблемаһының мөһимлеген аңлай. Был йәһәттән Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙары бик бәхетле. Ошо тәжрибәне башҡа төбәктәр ҙә мотлаҡ өйрәнергә һәм ҡайһы бер программаларҙы үҙҙәрендә ҡулланырға тейеш.

**Светлана ТАРАБУКИНА, Саха Республикаһы (Якутия), герой-әсә:** Сараның форматы беҙгә, илдең төрлө төбәктәренән килгән ҡатын-ҡыҙҙарға үҙ-ара аралашырға артыҡ мөмкинлек бирмәнә лә, ғаиләне социаль яҡлау буйынса трибунанан кәрәкле һүҙҙәрҙең әйтелеүе менән бик ҡәнәғәтмен. Мин үҙем 14 бала әсәһе, дәүләт тарафынан социаль яҡлауҙың ғаиләләр өсөн ни тиклем мөһимлеген яҡшы беләм. Беҙ дәүләт өсөн бала тапмайбыҙ, шуға ла бар бәләбеҙҙе һәм проблемаларыбыҙҙы дәүләт елкәһенә һалырға теләмәйбеҙ. Бары тик күп балалы ғаиләләр өсөн һаулыҡ һаҡлау, белем биреү системаларының бушлай булыуы кәрәк.

Өфө бик оҡшаны, республикала боронғо биналарға, архитектураға һаҡсыл ҡараш тойола, беҙҙең республикала уларҙың урына яңыларын төҙөйҙәр һәм ҡалаларыбыҙ элекке матурлығын юғалта. Хәҙер донъя буйынса ҡатын-ҡыҙҙың әүҙемләшә барыуы бик һиҙелә, Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙары ла бик эшлекле икән. Әсә кеше бер ҡасан да балаһына зыян килтерерҙәй эште башҡармай, шуға ла закондар сығарыу өлкәһендә әсәләр күберәк булһа, тормошобоҙға гуманизм кеүек изге төшөнсәләр кире ҡайтыр ине.

РӘХМӘТ ҺҮҘЕ

# ӨЛГӨЛӨ БАЛА...

## өлгөлө ғаиләлә тыуа

**Өлгөлө, татыу ғаиләләр - ил терәге. Шундай ғаиләләрҙең береһе - Баймаҡ районының Үрге Яйыҡбай ауылынан ошо көндәрҙә алтын юбилейын билдәләүсе Мәрғүбә һәм Мөхтәр Сафиуллиндар ғаиләһе тураһында һөйләргә булдым әле.**

Ир кешенең иң төп бурысы - йорт һалыу, ағас ултыртыу һәм балалар тәрбиәләп үҫтереү булһа, атайыбыҙ был йәһәттән һынатманы һәм бар бурыстарын да еренә еткереп үтәне. Бынан теп-теүәл ярты быуат элек әсәйебеҙ менән гөрләтеп ғаилә ҡороп ебәреп, дүрт ул менән өс ҡыҙға ғүмер бирә улар. Бар тормоштарын тыуған колхозына бағышлайҙар. Ҡырсылыҡта-малсылыҡта ҡара таңдан ҡара кискә тиклем тир түгеүҙәре тураһында китаптар яҙырлыҡ. "Ете класты тамамлар-тамамламаҫтан эшкә егелдек, - тип хәтерләй улар, - ситкә сығып китеү тураһында уйламайбыҙ ҙа. Тыуған ергә мөхәббәт көслө булғандыр инде..."

Атайыбыҙ күрше ауылда мәктәпте тамамлағандан һуң, механизаторҙар әҙерләү курсында уҡый. Колхозда төрлө маркалы тракторҙарҙы, комбайндарҙы йөрөтә. Әсәйебеҙ иһә оҙаҡ йылдар фермала һауыны булып эшләй. "Өйләнешкәс, йәш ғаилә бер ни тиклем ваҡыт ата-әсә йортонда йәшәй. Береһенән-береһе ваҕыраҡ балаларҙы олатай-өләсәй ҡарамағына ҡалдырып, иртә таңдан эшкә йүгереүҙәр, кис менән генә арманһыҙ булып ҡайтыуҙар, йортта көтөп тороусы көндәлек мәшәҡәттәр, ҡыҫҡаһы, йәш ғаилә өсөн һынауҙар етерлек була. "Колхоз алдынғылар рәтендә торғас, заманына күрә талаптар ҙа ҡәтғи булды, - тип хәтерләй атайыбыҙ, - таң һарыһында сығып китәһең, төн ҡараһында ҡайтаһың, балалар әүен баҙарында булып, беҙҙе күрмәй ҙә ҡала". "Ҡайным менән ҡәйнәмә әле булһа рәхмәттәр уҡыйым, - ти әсәйебеҙ, - ниндәй генә хәлдә лә беҙ уларҙан балаларыбыҙға ҡағылған зарланыу һүҙҙәрен бер тапҡыр ҙа ишетмәнек. Шул тиклем күндәм булдылар. Айырым йорт һалып сыҡҡас та әле балалар, үҙебеҙгә ҡайтабыҙ, тип, олатаһы-өләсәһе янына талпыныр, мәктәптән сығыу менән туп-тура шунда барып, бында ҡайтмай йөҙәтер булдылар..."

Беҙ, балалары, тыуған нигеҙебеҙгә эҙ һыуытмайбыҙ, әленән-әле атай йортона ҡунаҡҡа ҡайтып торабыҙ. Бөтәбеҙ бергә йыйылғанда хатта өйгә лә һыймай киткән саҡтар булғылай. Тик шулай ҙа атай-әсәй ҡосағы барыбыҙ өсөн дә иркен. Күмәгебеҙ бер бөтөн булып шатлыҡ-ҡайғыларҙы уртаҡлашабыҙ, оло эштәрҙе бергәләп башҡарабыҙ, төрлө һорауҙарҙы дөйөм хәл итәбеҙ. Ниндәй генә эш башҡармайыҡ, ниндәй генә ҡарарҙар ҡылмайыҡ - береһе лә атаәсәйебеҙ иғтибарынан ситтә ҡалмай, уларҙың аҡыллы кәңәштәренә, ихлас ярҙамына һәр саҡ мохтажбыҙ. Беҙҙе атай-әсәйебеҙҙең матур тәрбиәһе, изге фатихалары йөрөтә. Ҡайҙарҙа булып, кемдәр менән генә аралашмайыҡ, беҙҙе ата-әсәйебеҙгә оҡшатыуҙарын ишетеп күңел һөйөнә. Ҡәҙерләләребеҙ өлгөһөндә булыу үҙе бер ғорурлыҡ беҙгә.

**И. САФИУЛЛИН.**
**Баймаҡ районы.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЗАКОН ҮҘГӘРӘ ЛӘ УЛ...

## ә хәл үҙгәрерме?

**Яңыраҡ Дәүләт Думаһы депутаттары тарафынан Рәсәйҙә сәләмәтлекте һаҡлау тураһындағы закон проекты ҡабул ителде.**

Закон проектында билдәләнеүенсә, хәҙер дәүләт һирәк осрай торған ауырыуҙар (10 мең кешегә бер осраҡ) исемлеген төҙөп, уларҙы дауалау өсөн аҡса бүләсәк. Шулай уҡ паллиатив медицина ярҙамы (дауаланмай торған сирлеләргә ярҙам) бушлай күрһәтеләсәк. Тиҙ ярҙам бар граждандарға ла бушлай, шул иҫәптән паспорт һәм медицина полисы булмаһа ла, күрһәтеләсәк.

Яңы закон буйынса, суррогат әсәлек законлаштырыла. Хәҙер бындай ысул менән әсә булырға теләүселәргә никахта тороуы мотлаҡ түгел. Суррогат әсәлектең законлашыуы Рәсәйҙә ҡайһы бер илдәрҙәге кеүек тотош суррогат әсәләр "фермалары" барлыҡҡа килеүенә килтермәҫме, тигән икеләнеү ҙә бар.

Белгестәр әйтеүенсә, яңы закон халыҡҡа бушлай медицина ярҙамы күрһәтеүҙән баш тартмай, киреһенсә, яңы механизмдар һәр пациентҡа кәрәкле медицина ярҙамы күрһәтергә мөмкинлек бирә. Шулай ҙа бөгөн һаулыҡ һаҡлау өлкәһенең аҡса етмәүҙән яфаланыуы бер кемгә лә сер түгел. Шулай булғас, нимә үҙгәрәсәк һуң?

РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, яңы закон буйынса ауырыуҙы дауалауҙың мотлаҡ стандарттары индереләсәк, йәғни хәҙер һәр аныҡ ауырыу өсөн дарыуҙар һәм процедураларҙы үҙ эсенә алған медицина ярҙамы күләме документтарға тулыһынса яҙыласаҡ. Дәүләт был ауырыуҙы дауалау өсөн саралар бүлергә бурыслы. Шулай уҡ был закон проектында бушлай күрһәтелә торған медицина төрҙәре һәм гарантиялары аныҡ билдәләнгән. Уға беренсел медицина-санитар ярҙам, махсуслаштырылған, шул иҫәптән, юғары технологиялы медицина ярҙамы, тиҙ ярҙам, паллиатив медицина ярҙамы инә. Бынан тыш, ауырыуҙы дауалап бөтөү өсөн түләүһеҙ санаторийҙа дауаланыу ҙа ҡаралған. Тимәк, белгестәр әйтеүенсә, граждандарҙы дауалау һәм уларҙың сәләмәтлеген һаҡлау өсөн бөтә төр медицина ярҙамы ла түләүһеҙ буласаҡ.

Законға барыһы 70-кә яҡын төҙәтеү индерелгән. Әммә закондың төп нигеҙе үҙгәрмәгән. Закон проектының һуңғы вариантының берҙән-бер принципиаль яңылығы - аборт эшләү менән бәйле операцияларға ҡағылышлы махсус ҡағыҙәләр барлыҡҡа килеүе. Хәҙер ҡатын-ҡыҙ табипҡа мөрәжәғәт иткән көндән һуң операцияға тиклем ете көн ваҡыт үтергә тейеш.

Әйткәндәй, 2012 йылдың 1 ғинуарынан эшкә һәләтһеҙлек тураһындағы ҡағыҙҙарҙың формаһы яңыртыласаҡ. РФ Һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Юрий Воронин әйтеүенсә, яңы бланкта "табипҡа, эш биреүсегә һәм пациентҡа кәрәкле мәғлүмәт" кенә ҡаласаҡ.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

### Псориаз



Псориаздан ҡурҡырға ярамай, ул йоғошло түгел, ул аллергиянан була. Псориазды түбәндәгесә дауаларға мөмкин:

❖ 200 мл яңы ҡайнап сыҡҡан һыуға 10-ар грамм сөйәл үләне (чистотел) һәм ала миләүшә үләндәрен һалып төнәтергә, көн дауамында эсеп бөтөрөргә;

❖ ҡайын дегете (березовый деготь) шифалы, уның 10-30 процентлы майын көн һайын тән тиреһенә һөртергә кәрәк;

❖ псориаз менән зарарланған урынды спирт менән таҙартырға ла, бөҫөр үләне (грыжник) һутын һөртергә;

❖ 1 литр ҡайнаған һыуға 50-60 грамм кесерткән япрағы һалып төнәтергә һәм көнө буйы эсеп бөтөрөргә;

❖ 100 мл бүлмә температураһындағы һыуға 6,5 грамм киптерелгән бесәй борсағын (алтей лекарственный) һалырға һәм 1 сәғәт төнәтергә. Шуны ике сәғәт һайын бер ҡалаҡ эсергә.

### Ҡаты һалҡын аяҡтан яҙҙырһа

Ваҡланып кәбәккә әйләнеп бөткән бесәнде ағас һауытта ҡайнар һыу менән бешерергә һәм аяҡтарҙы тығып (түҙерлек эҫелектә) ултырырға. Төнәтмә һыуына башлаһа, аяҡтарҙы урап алырға һәм 1 ҡалаҡ әсе торма (редька) һуты һәм 1 ҡалаҡ таҙа кәрәсин ҡатнашмаһын һөртергә. Аҙаҡ йөн ойоҡ кейергә, ятып торорға ла, йөрөргә лә була. Аяҡҡа баҫҡансы шулай дауаланырға. Кемгәләр 2-3 процедура ла етә.

### Таблетка урынына - алоэ гөлө

Дарыу итеп ҡулланыр алдынан гөлгә 20 көн һыу һипмәй торабыҙ, микробтар бөтә. Тамаҡ ауыртҡанда алоэ һуты ҡушылған йылы һыу менән тамаҡ төбөн сайҡатырға. Танауға 3-5 сәғәт һайын 5-6 тамсы алоэ һутын тамыҙһаң, төрлө танау сиренән ҡотолаһың. Өтөт булғанда көнөнә бер нисә тапҡыр алоэ һутына манылған марля киҫәген ҡолаҡҡа ҡуйырға кәрәк.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**




## ТИҢДӘШЛЕК... иң әүәл тәрбиәләлер

**Ир менән ҡатын араһындағы берҙәмлек һәм мөхәббәт һәр икеһенең бер-береһенә тиңдәш булыуына бәйлелер. Шулай булмаһа, өҫтөн булған яҡтың түбән яҡты кәмһетеп ҡарауына сәбәп булыр. Ир менән ҡатын бер-береһен ололамаһа, икеһе лә бәхетһеҙ булыр.**

Күптәр аласаҡ ҡатынының һәм бараса ҡ иренең байлығынан, ата-әсәһенең халыҡ алдындағы абруйынан башҡа бер нәмә лә күрмәҫ. Былай итеү ғаилә ҡороу мәсьәләһендә булған яңылыштарҙың иң ололарынан булып, әсе емеше бик тиҙ күренер.

Тиңдәшлек нисек билдәләнә? Тиңдәшлек ул нәҫел, мал, юғары дәрәжә кеүек нәмәләргә ҡарағанда, тәрбиәлә бер-береһенә тигеҙ булыуҙыр.

Эшләпә кейеп, йөҙгә кершән һөртөү, театрҙарға йөрөү, бик аҙ белгән хәлдә лә күп белеүсе булып күренеү тәрбиәлелек тиғән һүҙ түгел әле. Тәрбиәле кеше, иң тәүҙә, ғаилә хөрмәтен һайлаусы кеше.

Шуға күрә, ғаилә хөрмәтенә зарар килтереүҙән пак булған зат, ни ҡәҙәр йәмһеҙ булһа ла, никахлашыу өсөн һайлап алыныуға лайыҡ булыр.

Ҡайһы берәүҙәр, байлығына ҡыҙығып, үҙенә тормош иптәше итеп тәрбиәһеҙҙәрҙе һайлап ала. Ләкин был кешеләргә ҡарата, ғаилә ҡороу өсөн иптәш һайлап алды, тип әйтеүгә ҡарағанда, аҡса бәрәбәренә байлығын һатты, тип әйтеү дөрөҫ булыр.

Рәхәт биреп аҡса алыуҙа йәки рәхәтһеҙ байлыҡта ниндәй файҙа булыр? Донъяла тән сәләмәтлеге менән күңел рәхәтлегенән артыҡ байлыҡ юҡ икәнлеген барлыҡ аҡыл эйәләре лә таный.

Ғаилә хөрмәтен һаҡлаған ҡатын, донъяның ниндәй ауырлыҡтарына осраһа ла, иренә хыянат итмәҫ. Балаларының һәм нәҫел-нәсәптәренең бер ваҡытта ла йөҙөн ҡыҙартмаҫ. Шулай уҡ ғаиләгә атай һәм ҡул аҫтындағыларға яҡлаусы булыу дәрәжәһен белгән ир ғәзиз ғүмерен файҙаһыҙға үткәрмәҫ. Шул сәбәпле, никах ваҡытында һәр ике яҡ та тоғролоҡҡа диҡҡәт итәлер. Йәш ир һәм йәш ҡыҙҙар, теләктәре солтан һәм күңелдәре хаким булғанлыҡтан, был турала яҡшылап уйларға, бәлки, ваҡыт еткерә алмаҫтыр. Шуның өсөн был мәсьәләләргә һәр ике тарафтың ата-әсәләре камил дәрәжәлә иғтибар итергә тейештер.

Ғаилә хөрмәтен һаҡлай белмәгән йәки иренән ҡалғандан һуң балаларын аҫырарға көсө етмәгән, бешереү, кейем тегеү һәм ямау кеүек нәмәләр ҡулынан килмәгән ҡатындың матурлығынан ир һәм, ғөмүмән, ғаилә өсөн ниндәй файҙа? Шулай уҡ, ҡатыны һәм балалары булып та, мәжлестәрҙән бушамаған, байлығын аҡыл һәм шәриғәт тыйған ерҙәргә сарыф иткән ирҙең бай булыуында ниндәй мәғәнә? Бөтөн йыһан халҡы аҡса биреп рәхәт алғанда, быңдай ирҙе һайлап алған ҡатын рәхәт һатып аҡса алған булыр.

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БӨГӨНГӨ БАШҠОРТТАРҘЫ КҮРЕП,

## немецтар илаған, ти...



**Ҡурғаш пулялар, йәҙрәләр осоп торған яу яланына аттарын һайһайлап ҡыуа-ҡыуа, әсе һыҙғырып, дошман өҫтөнә уҡ ямғыры яуҙыраяуҙыра башҡорт кавалерияһы полкы егеттәре сабып сыға ла, ауыр кавалерияның бер өлөшөн ҡыйратып, бер өлөшөн әсиргә ала. Дошман һалдаттары "Төньяҡ амурҙары"н күреү менән ҡаушап төшә... Яу сығымдарын тулыһынса үҙе ҡапларға тейеш булған, үҙ ҡоралы, үҙ аты менән һуғышҡан башҡорт кавалерия полктарының яуҙа күрһәткән батырлыҡтары тураһында ошоға оҡшаш легендаларҙы күп осратырға була. Легендар полководецтарҙы хайран ҡалдырған беҙҙең ата-бабаларҙы Көнбайыш илдәрендә бөгөн дә онотмағандар икән! Түбәндә Өфөләге "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи реконструкция клубы етәксеһе, рәссам, Рәсәйҙең Геральдика союзы ағзаһы Илдар Ғиндулла улы ШӘЙӘХМӘТОВ Германияның Лейпциг ҡалаһында үткән хәрби-тарихи реконструкция фестиваленән алып ҡайтҡан тәьҫораттары менән уртаҡлаша.**

Тарихҡа күҙ һалһаң, йөҙ ҡыҙарырлыҡ түгел: 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт атлы полктары хәрби операциялар ваҡытында үҙҙәрен заманына күрә ҡыйыу, йылдам хәрби көс итеп таныта. Үҙенең етеҙлеге, маневрҙар өсөн уңайлы булыуы менән союздаштарҙы ғына түгел, хатта дошманды ла таң ҡалдырған башҡорт яугирҙары. Яуҙан тынып торған арала ҡурай исемле ғәжәйеп уйын ҡоралы менән дә күптәрҙе әсир иткән. Ул тағы бер минут эсендә тиҫтәләгән уҡ яуҙыра алыу һәләте менән дә дошмандың ҡотон алған. Башҡорт яугиры бер ҡасан да әсиргә эләкмәгән - аҙаҡҡаса алышҡан. Шуға күрә уны дошмандары ихтирам иткән, ә союздаштары тураһында әйтеп торорға ла кәрәкмәй.

Башҡорттоң ҡурҡыу белмәҫ булыуының төп сере нимәлә? Күп кенә тарихсылар был күренеште ғәскәри бүленештең ырыу бүленеше менән тап килеүенә бәйләй. Йәғни ағай-энеләрҙән тора башҡорт ғәскәри берәмеге. Шуға ла берәмек тарҡалмаған, сөнки туғандар бер-береһе өсөн йәнен бирергә әҙер торған.

Ошо ғәскәр данын ҡабаттан тергеҙеү, башҡорт кавалерия полктары исемен донъяға танытыу маҡсатында Башҡортостандан ун кеше Германиялағы хәрби-тарихи клубтарҙың саҡырыуы буйынса сәйәхәткә юлландыҡ.

Берлинда беҙҙе - Башҡортостан Хөкүмәте вәкиле Руслан Ғиззәтуллин етәкселендәге "Төньяҡ амурҙары" һәм "Өфө пехота полкы" клубтары ағзаларынан торған делегацияны Германияла йәшәүсе ике милләттәшебеҙ, әле шул илдең граждандары Нәсүр һәм Ирек атлы егеттәр ҡаршы алды. Фестиваль буласаҡ Лейпциг ҡалаһына килеп еткәс, боронғо бер ҡәлгә янында союздаш дәүләттәр лагерында беҙгә иркен палатка ҡороп бирҙеләр. Баҡһаң, бында бер-нисә көн туҡтамай ямғырҙар яуған, ул беҙ килгән көндә генә туҡтаған икән. Немецтар, австриялылар: "Һеҙ изге кешеләрҙер, моғайын, беҙгә ҡояш алып килдегеҙ бит", - тип, ике һүҙҙең береһендә беҙгә рәхмәт әйтте. Усаҡ яҡҡайныҡ, йылынырға килделәр, ҡурай тарта башлағас, бөтөнләй әргәбеҙҙән китмәҫ булдылар. Наполеонды ҡәүҙәләндереүсе француз егетенә Марс Мофазалов эшләгән ҡурайҙы, ҡумыҙҙы, Мәрйәм Бураҡаева етештергән талҡанды, ҡоротто бүләк иткәс, иртәгәһенә "маршалдарын" эйәртеп, йәнә килгән: "Мине ҡурай тигән уйын ҡоралығыҙҙа уйнарға өйрәтегеҙ әле", - ти. Ҡурайҙа уйнауыбыҙҙы видеоға төшөрөп алдылар. Әйткәндәй, "Наполеон" ҡумыҙҙың варганға оҡшашлығын танып, беҙгә үҙҙәренең бер-нисә көйөн уйнап ишеттерҙе. Шулай итеп, ул үҙен бай мәҙәниәтле, музыкаль яҡтан һәләтле кеше итеп танытты. Шотландтар ҡыуыҡлы һорнайҙарында (волынка) уйнаны, беҙ уларға ҡурайҙа һәм ҡумыҙҙа уйнап ҡушылдыҡ, төнгә ләгәрыбыҙҙы шулай йыр-моңға күмдек.

Килеп урынлашыуыбыҙҙың иртәгәһендә төшкә ҡарай "Халыҡтар һуғышы" башланды. Тарихтан билдәле булыуынса, 1813 йылдың 16-19 октябрендә була был һуғыш. Беренсе донъя һуғышына тиклемге иң ҙур һуғыштарҙың береһе була ул. Император Наполеон I Бонапарт Рәсәй, Австрия, Пруссия һәм Швеция илдәренең берләшкән ғәскәренән еңелә. Һуғыштың тәүге көнөндә Наполеон уңышлы ғына һөжүм итә, шулай ҙа, союздаштарҙың ҡаты ҡаршылығына осрап, 18 октябрь - Лейпцигҡа, ә иртәгәһенә Франция яғына сигенергә мәжбүр ителә. Был яу 1813 йылғы кампанияны уңышлы йомғаҡлай һәм союздаштар ғәскәренең 1814 йылда Францияға үтеп инеүенә булышлыҡ итеүсе уңышлы аҙым була. Билдәле булыуынса, был һуғышта артиллерия ҙур роль уйнай. Шулай итеп, 198 йыл үткәс, дәһшәтле ҡанлы һуғыш уйын рәүешендә ҡабат күрһәтелде. Тамашасыларҙы һиҫкәндереп, тертләтеп, билдәләнгән ваҡытта ике яҡтан да артиллерия шартлауы ҡолаҡ тондорғос "үлем музыка"һын уйнай башланы бер мәл: ысын һуғыш башланғанмы, тип уйларһың! Оҙаҡ ваҡыт гөрһөлдәүҙән һуң ғәрәсәт тамамланды, уйындар уйналып бөттө һәм беҙ, "актерҙар", арып-талып, палаткабыҙға таралыштыҡ.

Өсөнсө көн беҙ яуҙа һәләк булған рус ғәскәрҙәре рухына бағышлап эшләнгән ғибәҙәтханаға килдек һәм яугирлыҡ традициялары буйынса әруахтар рухына бағышлап доғалар уҡыныҡ, теләктәр теләнек, тәсбих әйттек, ҡурай тарттыҡ. Христиан ғибәҙәтханаһы янында яуҙа һәләк булған башҡорт егеттәренә ҡуйылған һәйкәл янында ла доға ҡылдыҡ. Был һәйкәлде беҙҙең Германиялағы милләттәштәр, беҙгә тәржемәлә ярҙам күрһәтеүсе Нәсүр Йөрөшбаев һәм Ирек Байышевтар үҙҙәре һалдырған. Тағы ла Ирек Байышев Лейпцигтағы торлаҡ йорттарҙың береһенең фасадын башҡорт яугирҙары гравюраһы менән биҙәгән.

Сәфәр барышында мин бер нәмәгә айырыуса ныҡ иғтибар иттем: милләтең, халҡың исеменән ниндәйҙер сарала ҡатнашыу ғына ла түгел, сит ҡәүем кешеләре менән аралашыу ҙа ингә ҙур яуаплылыҡ һала. Һинең ниндәй буйлы булыуыңа ҡарап түгел, күңелең ниндәй булыуынан сығып халыҡ тураһында фекер йөрөтәләр. Был ысынбарлыҡ бер немец ғаиләһе менән аралашҡан ваҡытта айырыуса ныҡ һиҙелде. Барып урынлашыуыбыҙҙың өсөнсө көнөнә Халыҡтар һуғышына бағышлап эшләнгән, бейеклеге буйынса донъяла тиңе булмаған 96 метрлыҡ монументҡа алып барҙылар. Тирә-яғында халыҡтарҙың күҙ йәштәренән йыйылған күл хасил булған. Монумент янындағы майҙанда халыҡ менән аралашҡан саҡта беҙ килеүҙе ишетеп, ҙур бер ғаилә беҙгә ҡаршы йүгереп килеп етте: "Һеҙ башҡорттармы? Беҙгә башҡорттарҙың ошо ҙур һуғышта әүҙем ҡатнашыуы, уларҙың уҡ-һаҙаҡтар менән генә ҡоралланған булыуы тураһында мәғлүмәттәр килеп етте. Беҙ, башҡорттар был һуғышта башҡаларҙан күберәк ҡырылған булырға тейеш, шуға ла бөгөнгө көндә уларҙың вариҫтары һаҡланып ҡалмағандыр, тип уйлай инек", - тип, илай-илай һүҙ башланылар. Уларға яуап итеп беҙ: "Эйе, беҙ башҡорттар, Уралда йәшәйбеҙ, үҙ республикабыҙ бар..." - тип, халҡыбыҙҙың бөгөнгөһө менән ҡыҫҡаса таныштырҙыҡ. Немец ғаиләһе ағзалары, тарихта ҡалған яугир ата-бабаларыбыҙ тураһындағы һорауҙарын беҙгә биреүе, беҙҙән яуап ишетә алыуы менән бәхетле ине шикелле. Шул ваҡыт күктә торналар пәйҙә булды ла, "Торойоҡ! Торойоҡ", тип, ары осто. Беҙ уларҙы ата-бабалар рухының сәләме, тип ҡабул иттек. Патриотик тойғоларыбыҙ сиктән ашҡан, йөрәктәр алҡымдан ташырға әҙер торған сакта был күренешкә тыныс ҡына ҡарай алмай инек беҙ.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

## ХӘТЕРКИТАП

**...Кистәрҙең береһендә Ишембайҙың 2-се мәктәп-интернатында директорҙың балаларға ҡарата тупаҫ мөғәмәләһен күреп, һигеҙенсе синыф уҡыусыһы тота ла иптәштәре алдында: "Нисек итеп ул башҡорт мәктәбендә, башҡорт балалары менән татарса һөйләшә ала? Беҙҙенсә һөйләшергә теләмәй икән, русса ғына һөйләшһен!" - тип үҙенең ҡәнәғәтһеҙлеген белдерә. Был һүҙҙәр "хужа"ға барып еткәс, ул малайҙы интернатта йәшәүселәр исемлегенән һыҙып ташлай, әммә уны уҡыуҙан бөтөнләй ҡыуып сығарырға ҡыймай. Ни тиһәң дә, атаһы Бөйөк Ватан һуғышының беренсе төркөм инвалиды, ике ағаһы Совет Армияһы сафтарында хеҙмәт итә. Етмәһә, ана, малайҙы синыфташтары ҡалай яҡлаша. Артабан был малай мәктәп-интернатты алтын миҙалға тамамлай. Кем инде ул, тиһегеҙме? Бөтә ғүмерен башҡорт халҡының этногенезын, уның үҫеш юлын өйрәнеүгә бағышлаған ғалим Рим Йәнғужин була ул.**



**Стәрлетамаҡ районының Айыусы ауылында тыуа Рим Зәйниғәбетдин улы. 28 йәшендә тарих фәндәре кандидаты, бер нисә йылдан тарих фәндәре докторы исемен алған тарихсы-этнограф, профессор, РАСН академигы, БАССР-ҙың һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Рим Йәнғужиндың ғүмер юлы Башҡорт дәүләт университеты менән ныҡлы бәйләнгән. Тап ул туған уҡыу йортоноң нигеҙләнеү датаһын раҫлауға ҙур көс һала. Уның төп эштәре: "Башҡорт халҡының килеп сығышы", "Башҡорттарҙың этногенезы (өйрәнеү тарихы)", "XVIII - XIX быуаттарҙа башҡорт халҡының хужалығы һәм социаль структураһы", "Башҡортостан халҡының этник составы", "Башҡорт ҡәбиләләре", "XVIII быуаттың беренсе яртыһында башҡорттарҙа ер эшкәртеү һәм ер мөнәсәбәттәре" китаптары. БДУ-ның ғорурлығы булған үҙенсәлекле этнографик музей ҙа уның тереләргә ҡалдырған мираҫы булып тора. Түбәндә ғалим тураһында иҫтәлектәр тәҡдим итәбеҙ.**

# ӘГӘР КЕШЕ ИКӘНҺЕҢ...

## магнит бул

**Борис ӘХМӘТШИН, филология фәндәре докторы, профессор:** Рим Зәйниғәбетдин улы бөтөн нәмәлә бары тик изгелек һәм яҡшылыҡ күрҙе, барлыҡ кешеләр менән уртаҡ тел таба белде. Доклад менән сығыш яһаһа, башҡалар кеүек әҙер текст уҡымаһа, ә импровизациялап һөйләнә, шуға ла аудитория тарафынан ихлас тыңланды һәм төрлө һорауҙар яуыуына сәбәп булды. Ул теләһә ниндәй һорауға рәхәтләнеп, йәҙәп китеп яуап бирә ине. Был уның башҡөлләй сумып, күнел ҡушыуы буйынса фән донъяһында йәшәүен, тарих серҙәрен бар камиллығында белеүен, шунан башҡа тормошто күҙ алдына ла килтермәүен күрһәтә ине. Унан һәр саҡ тәрән, аҡыллы фекерҙәр ишетелде, ылыҡтырғыс аура һәм ынғай энергетика урғылды, уға коллегалары, студенттары ғына түгел, һәр кеше тартылды. Ҡыҫҡаһы, ул бер аҡыл эйәһе әйткән: "Әгәр һин сәскә икән, мимоза бул; әгәр кеше икәнһең, магнит бул", - тигән һүҙҙәрҙе тулыһынса раҫланы.

**Юлдаш ЙОСОПОВ, Башҡортостан Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеү институтының этнология бүлеге мөдире:** Фән юлынан китеүемдә Рим Йәнғужин бик ҙур роль уйнаны. Этнография йүнәлешен уның йоғонтоһонда һайланым, тип тә әйтергә була. Уҡытыусы булараҡ, ул студенттарҙың мөмкинлеген, һәләтен дөрөҫ күрә, баһалай белде. Ғөмүмән, уҡыусылары менән Рим ағай бик тығыҙ аралаша торғайны. Шул сифаты менән дә ул үҙенсәлекле шәхес ине. Ғалим булараҡ та ул беҙгә өлгө булып торҙо. Башҡорт ҡәбиләләренә ҡағылышлы фәнни хеҙмәттәре, тарихи очерктары, шул иҫәптән Фирҙәүес Хисаметдинова менән берлектә яҙылған "Башҡорттар" тарихи-этногрфик очерҡы әһәмиәтле. Уларҙы тәү сиратта студенттар өсөн дәреслек тип ҡарар инем. Сөнки Рим Йәнғужиндың күпселек хеҙмәттәре нәҡ студенттарға ярайлы, аңлайышлы тел менән яҙылған. Этнография менән башлап шөғөлләнеүселәр ҙә тәү сиратта Рим Йәнғужин сығанаҡтарына мөрәжәғәт итә. Оло ғалимыбыҙ ырыуҙар тарихы менән бик ныҡ ҡыҙыҡһынды. Ғөмүмән, 90-сы йылдарҙа тергеҙелеп киткән ырыуҙар хәрәкәтенең башында торҙо. Ошо йүнәлештә уға артабан да эшләргә насип булһа, дөйөмләштерелгән ҙур фәнни хеҙмәте донъя күреүенә шаһит булыр инек, бәлки. Башҡорт дәүләт университетында Рим Йәнғужиндың үҙ мәктәбе барлыҡҡа килде, тип әйтергә була. Йәш ғалимдар - Тимур Ильясов, Рәсил Аҫылғужин, Шамил Иҫәнғолов, башҡа фән эшмәкәрҙәре остазының эшен лайыҡлы дауам итә.

**Әнүәр ӘСФӘНДИӘРОВ, тарих фәндәре докторы, профессор:** Рим Йәнғужин барыһына ла иғтибарлы мөнәсәбәттә булды. Эҙләнеүсән, тыныс ҡына, һәр эшен еренә еткереп эшләр ине. Ул башҡорт тарихи этнографияһына нигеҙ һалыусыларҙың береһе. Уның шулай уҡ 18-19 быуаттарҙағы хужалыҡ тармаҡтары торошона ҡағылышлы эҙләнеүҙәре әһәмиәтле. Демография мәсьәләләрен тикшереүсе, халыҡ иҫәбен алыуҙы сағылдырған документтарҙы анализлаусы ғалимдарҙың береһе лә Рим Йәнғужин булды. Ул булдырған этнография музейы ла фәнни сығанаҡтарға бик бай. Архив, баҫылып сыҡҡан материалдарҙы ҡулланыу менән бергә фәнни экспедицияларға ҙур әһәмиәт бирҙе. Студенттар менән ауылдан ауылға йөрөп, халыҡтың тормош-көнкүрешен сағылдырған әйберҙәр, әйтәйек, хеҙмәт ҡоралдарын, кейем-һалым йыйыуға ныҡ иғтибар бүлде. Бер ваҡыт экспедициянан ҙур, оҙон ағастан яһалған кәмә алып ҡайтты. Тарихи ҡомартҡыбыҙ булып торған Каруанһарайҙы өйрәнеүгә, уның әһәмиәтен күтәреүгә лә Рим Йәнғужин үҙ өлөшөн индерҙе. Ырыуҙар тарихын сағылдырған хеҙмәттәре иһә айырым баһаға лайыҡ. Һәр ырыуҙың килеп сығышын, биләмәһен, атрибуттарын ул асыҡлап бирҙе. Шуға күрә Рим Йәнғужиндың хеҙмәттәре башҡорт тарихын артабан, тәрәнерәк өйрәнеүгә бер таяныс булып тора.

**Зәйтүнә ЙӘНҒУЖИНА, Рим Йәнғужиндың ҡатыны:** Ирем кешеләргә бик ярҙамсыл була торғайны. Элек беҙ бер бүлмәле фатирҙа йәшәнек. Шуға ҡарамаҫтан, кеше хәленә инеп, ярҙамға мохтаждарҙы үҙебеҙгә һыйындырыр булды. Аралашыусан булыуының бер күренешелер инде. Уның донъяға фәнни күҙлектән ҡарауы көндәлек тормошта ла үҙен белдертә ине. Мәҫәлән, урамда китеп барғанда кешенең йөҙөнә ҡарап, уның ҡайҙан килгәнен, милләтен билдәләр булды. Кешенең янына килеп һораша башлаһаҡ, Римдең һүҙҙәре ысынлап та дөрөҫкә тап килә торғайны. Бер мәл Германиялағы музейға барҙыҡ. Беҙҙе экскурсовод оҙатып йөрөнө. Ә Рим, немец телен яҡшы белгәс, экспонаттар хаҡында минә әкрен генә үҙе һөйләй. Аҙаҡ музей хеҙмәткәре, һеҙ минән күберәк беләһегеҙ икән, тип әйтеп ҡуйҙы.

Билдәләнгән эш режимы булманы уның. Фекер килһә, ултыра ла яҙа торғайны. Ул ваҡытта инде уны борсорға тырышманым. Сөнки, уйымды бүлдермә, тип алдан әйтеп ҡуя ине. Ҡайҙа ғына бармаһын, үҙенә күрә эш урыны булдырып, яҙышырға ултырыр ине. Хатта дауаханала ятҡанда ла эшенән айырылманы. Ғүмеренең аҙағында ул этнофилософик йүнәлештәге китап баҫтырып сығарырға хыялланды. Бик ябай, баҫалҡы булды ирем. Әммә үҙ ҡарашын, фекерен эштә лә, ғаиләлә лә яҡлай белде. Һүҙҙәрен һәр ваҡыт дәлилләп әйтте. Беҙҙең өсөн һәр мәсьәлә уртаҡ булды. Бер йән кеүек инек. Был ғаилә тормошонда ла, эштә лә сағылды. Фәнни хеҙмәттәренең тәүге уҡыусыһы мин булдым, сөнки ҡульяҙмаларын машинкала баҫа торғайным. Ә эшенде аңлаған, уға ынғай ғына түгел, хатта йыйы мөнәсәбәт белдереп торған кешең булыуы бик мөһим. Үҙ сиратында Рим донъяға үҙ ҡарашымды булдырыуға, һөнәри үҫешемә бик ҙур йоғонто яһаны.

**Мөнир ИҠСАНОВ яҙып алды.**

---

## БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# ЯЛСЫҒОЛ ТӨҘӨГӘН ШӘЖӘРӘ

**Әйле ырыуы - иң боронғо һәм ҡөҙрәтле, данлыҡлы ырыуҙарҙың береһе. Уның тураһында мәғлүмәттәр халҡыбыҙҙың тарихи хәтерен мәңгеләштергән риүәйәттәрҙә, шәжәрәләрҙә һаҡланып ҡалған.**

Әҙәмдән алып Баһаутдингә тиклемге шәжәрәне сығышы менән Әйле башҡорто булған яҙыусы, ғалим, хәҙрәт Тажетдин Ялсығол улы (Ялсығол-Әл-Башҡорди) XIX быуат башында төҙөгән, 1912 йылдың апрелендә Миңлеғол Ейәнбирҙе улы Ғәбделнасиров күсереп яҙған һәм тамамлаған.

Тажетдин Ялсығол яҙған тарихнамә иҫ киткес бай һәм йөкмәткеле, ғәжәп ҡылырлыҡ мәғлүмәтле һәм ҡыҙыҡлы. Бында Әҙәм атанан башлап ҡанбабаларыбыҙҙың нәҫел-нәсәптәре, уларҙан таралған ҡәүемдәр, ырыуҙар күрһәтелә. Был хаҡта айырым ҙур хеҙмәт яҙыу зарур. Беҙ иһә киң даирәле шәжәрәнең, йылъяҙманың бәғзе бер мәлдәренә, өлөштәренә генә күҙ бағлайыҡ.

Әҙәм нәҫелен дауам итеүселәрҙән Төрөкмән улы Кинйәнең улдары: Татар, Мишәр, Иштәк, Нуғай. Йорто Гуд йылғаһы буйында булған, ғилемә тине юҡ Иштәктең улдарының өлкәне - Тамъян, икенсеһе - Үҫәргән, өсөнсөһө - Күбәләк, дүртенсеһе - Бәкәтүн, бишенсеһе - Һарт, алтынсыһы - Тырнаҡлы, етенсеһе - Түбәләҫ, һигеҙенсеһе - Дыуан. Үпкәсел Бәкәтүн тыуған илен ҡалдырып, төньяҡ тарафҡа юл ала һәм Мейәс йылғаһы буйында туҡтап төпләнә һәм туҡһан йылда тормош менән хушлаша. Улдарының өлкәне - Әйле, икенсеһе - Юрмый, өсөнсөһө - Байлар, дүртенсеһе - Байҡы, бишенсеһе - Ирәкте, һәр ҡайһыһы шаһ булып, донъяның төрлө яҡтарына тарала.

Әйле атай йортонда ҡала, илле йыл шаһ була. Улы Нариман бөтә донъя буйлап сәйәхәт ҡыла, Юнан илендә (Греция) ғилем эстәй, аҡыл фәне буйынса егерме дүрт китап яҙа, бөйөк хаким булып, Сәмәрҡандҡа нигеҙ һала. Улы Ҡасура шаһтан аҡыл эйәһе Сократ тыуа. Ул атаһы һымаҡ Юнанға бара һәм Искәндәр Ромейский (Александр Македонский) һарайында аҡыллы кәңәшсе була, тере һыу сыҡҡан урынға юл күрһәтә. Искәндәр менән төньяҡҡа барып, улар Булғарға нигеҙ һала. Шул саҡта Сократ булғар ҡыҙына өйләнә. Бында туғыҙ ай тороп, ҡараңғылыҡ иленә китәләр... Сократтың булғар ҡыҙынан Кефтар исемле улы тыуа һәм Булғарҙа шаһ була. Уның улы Айҙар шаһ дингеҙ буйында Ташкүпер ҡалаһын һалдыра. Айҙарҙан - Ормуз шаһ, унан Алмас хан, унан Мирғашим солтан тыуа. Ул Урта дингеҙ ярында ҡала төҙөтә, шунан Иерусалимға китә. Улы Бабеш солтан Салъянда идара ҡыла, улы Ҡарнаҡ тыуа. Уның улдарының кемелер Ҡырымда, кемелер Хатайҙа (Ҡытайҙа), кемелер - Ираҡта, кемелер башҡа урында солтан була. Таймас иһә төньяҡтағы илдә Авнум, йәнә улдары Владимир, Мәскәү хөрмәтенә Владимир, Мәскәү ҡаларына нигеҙ һала.

Булғар төбәгендә Ҡышан ҡалаһында имам һәм мөҙәрис булған Ғәләмбәктән - Мирхаджи мөҙәрис, унан Ҡолғәли тыуа. Ун һигеҙ йәшендә Ҡолғәли хәҙрәт ниндәйҙер аңлатмалы китап яҙа һәм "ғалим" тигән ҡушамат ала. Хорезмда ҡырҡ биш йыл мөҙәрис хеҙмәтен үтәй. Ул боронғо башҡорт һәм булғар шағиры булараҡ та таныулы. Уның "Киссаи Йософ" поэмаһы Урал һәм Иҙел буйында ҡульяҙма килеш киң тарала, хәҙерге башҡорттарҙың, татарҙарҙың, ҡаҙаҡтарҙың, үзбәктәрҙең, төркмәндәрҙең һәм ҡарағалпаҡтарҙың рухи хазинаһы булып тора.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**

✓ *Агентлыҡҡа беренсе килгән ағайҙы бер ҡасан да онотмаясаҡмын. Ул ишекте асты ла: "Бәхетте ошонда тараталармы?"- тип һораны. Күңелгә шундай рәхәт булып китте, эштәремдең уңышлы буласағына ышанысым артты.*



**Донъяға һәр кем ишле итеп яратылған һәм ошо ҡанундан ситләшеү, уны боҙоу һәм юҡҡа сығарырға тырышыу йәшәйеште бөтөрөүгә алып барыусы сәбәптәрҙең береһе булып тороуы ла ихтимал. Тик быуаттар буйы ҡалыплашҡан хәҡиҡәткә тормош үҙ төҙәтмәләрен индереп, кемделер үҙ йәрен, үҙ ишен таба алмайынса ғүмер кисерергә мәжбүр итеүе лә бар. Бөгөнгө көндөң үҙәк проблемаларының береһе булған ғаилә ҡороу мәсьәләһен һәр кем үҙенсә хәл итергә тырыша: кемдер танышыу кисәләренә йөрөй, кемделер дуҫтары таныштыра һәм башҡалар. Ә кемдер иһә үҙ ишен табыу өсөн димләү агентлыҡтарына мөрәжәғәт итеүҙе хуп күрә. Баймаҡ ҡалаһында асылған "Бәхетле" димселек агентлығына ла мөрәжәғәт итеүселәр аяғы өҙөлмәй икән. Агентлыҡ директоры Зөлфиә ӘФЛӘТҮНОВА беҙгә түбәндәгеләрҙе һөйләне:**

# БЫНДА БӘХЕТ ТАРАТАЛАР...

## йәки Димселәр ғаилә институтын нығыта

### Агентлыҡҡа мөрәжәғәт итеүселәр кемдәр?

Бала саҡтан кеше менән аралашырға, ваҡиғалар уртаһында ҡайнарға яратам һәм олоһо-кесеһе менән тиҙ уртаҡ тел табам. Мәктәптән һуң медицина училищеһын тамамлап, санаторийҙа эшләнем. Эшем бик оҡшаһа ла, баш ҡаланан кире тыуған яҡтарға, Баймаҡ ҡалаһына ҡайтырға тура килде. Янда атай-әсәйҙең, туғандарҙың булыуы, үҙеңдең йортоңда йәшәү тормошто еңеләйтһә лә, алдыма эшһеҙлек мәсьәләһе килеп баҫты. Ирем башҡа ҡалаға йөрөп эшләй башланы, ә мин ғаиләм менән кәңәшләшеп, ҡалала димләү агентлығы асырға ҡарар иттем. Элегерәк бергә уҡыған егет-ҡыҙҙарҙы таныштырып, бер-нисә ғаиләнең барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итеүем һәм бөгөнгө көндә уларҙың матур итеп йәшәп китеүҙәре был уйымды нығытты ғына. Башланғыс капитал өсөн бер-нисә йыл йыйған аҡсабыҙҙы тотондом да быйыл май айында Баймаҡ ҡалаһында "Бәхетле" исемен биреп, димләү агентлығы астым.

Агентлыҡҡа беренсе килгән ағайҙы бер ҡасан да онотмаясаҡмын. Ул ишекте асты ла: "Бәхетте ошонда тараталармы?"- тип һораны. Күңелгә шундай рәхәт булып китте, эштәремдең уңышлы буласағына ышанысым артты һәм, ысынлап та, аҙаҡ ошондай эш башларға ниәт итеүемә бер тапҡыр ҙа үкенмәнем, сөнки агентлыҡҡа мөрәжәғәт итеүселәр һаны көндән-көн арта бара. Бөгөнгө көндә агентлыҡ базаһында республиканың бөтә район һәм ҡалаларынан да тиерлек үҙ мөхәббәтен, һөйгән йәрен эҙләүселәрҙең анкета-белешмәләре бар. Шуны билдәләп үтергә була: ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда ир-егеттәр әүҙемерәк. Айырыуса беҙҙең Көньяк Урал райондары, Күгәрсен, Мәләүез яҡтарынан үҙ ишен эҙләүселәр бихисап. Йәш категорияһын алғанда иһә, беҙҙең клиенттарыбыҙ - оло тормош юлына яңы аяҡ баҫҡан йәштәрҙән алып сәсенә сал төшкән ағай-апайҙар. Агентлыҡҡа килеүселәр араһында төрлө урында эшләүселәр, эшҡыуарҙар, хаҡлы ялда булғандар, толдар һәм әлегә бөтөнләй тормош юлдашын тапмағандар бар. Дин юлында булған егеттәр күп, тик әлегә дин тотҡан ҡыҙҙарҙың мөрәжәғәт иткәне юҡ. Тормош аяуһыҙлығын күпләп татыған, ләкин күңелдәре ҡатмаған ғәрип ҡыҙҙар һәм егеттәр тормош юлдашы эҙләй. Етди ниәтлеләр менән бер рәттән, еңел-елпе холоҡлолар ҙа йыш мөрәжәғәт итә. Шулай уҡ агентлыҡты һөйәркә эҙләүселәр ҙә ситләп үтмәй. Тик ундайҙар менән эште ҡыҫҡа тотам һәм ниәттәрен аңлағас та, мәсьәләне төбө-тамыры менән юҡ итәм.

"Бәхетле" агентлығына мөрәжәғәт итеүселәрҙең тағы бер категорияһын билдәләп үтеү кәрәктер тип һанайым - улар әлеге ваҡытта торор ере булмаған ир-егеттәр. Тик уларҙы беҙ күҙ алдына килтергән берәҙәктәр тип ҡабул итергә ярамай, сөнки барыһы ла уңған, эшлекле һәм аҡыллылар. Тормош юлдары ла бер төрлөрәк, йәғни 40-50 йәшкә тиклем әсәләре менән донъя көтөп, әсәләре мәрхүм булғас ҡына ғаиләле булған ағайҙар. Тик ишле тормош хаҡындағы матур хыялдарын өйҙөң яңы хужабикәләре тиҙ юҡҡа сығарған һәм уларға ышанған ир-аттың бөтә мөлкәтен һатып, булған аҡсаларын үҙләштереп, үҙен урамда ҡалдырып, юҡ булғандар. Бөгөнгө көндә ул ир-егеттәрҙең береһе туғандарында, икенсеһе ҡуртымға алған фатирында, өсөнсөһө мәсеттә йәшәй.

### Ишен эҙләүсе ирҙәр

Үткән айҙарҙағы күҙәтеүҙәр ниндәйҙер кимәлдә бөгөнгө көн буйҙаҡтарын күҙ алдына баҫтырырға, уларҙы аңларға, кемде эҙләүен, буласаҡ тормош иптәшенә ниндәй талаптар ҡуйыуын аңларға мөмкинлек бирҙе. Тәү сиратта, ир-егеттәребеҙҙе күҙҙән үткәрәйек. Бөгөнгө көндә агентлыҡҡа килеп, үҙҙәре хаҡында мәғлүмәт ҡалдырыусы ир-егеттәрҙе ышаныслы тормош юлдашы булырҙай кешеләр, тип әйтергә була, минеңсә. Ундайҙар кәләш таба алмай йөрөмәҫ инде, тиер берәү. Эйе, уңған, аҡыллы, эшһөйәр, күбеһенең бынамын тигән донъяһы булған ир-аттарҙың кәләшһеҙ йөрөүен күҙ алдына баҫтырыуы ҡыйын. Тик проблема, тәү ҡарашҡа, күҙгә ташланып бармай. Бөгөн бөтә донъя тик ир-егеттәрҙе генә ышаныcһыҙ булыуҙа ғәйепләргә күнеккән. Үҙебеҙҙе ошоға ышандырғанбыҙ ҙа, унан арына алмай, барыһын да бер ҡалыпҡа һалып үлсәйбеҙ. Баҡтиһәң, ир-егеттәрҙең дә ҡатын-ҡыҙға ышанысы бөтөнләй юғалып бара икән! Кешенең бер-береһенә ышанысы юғалыуы, үҙ сиратында, ғаилә ҡорорға ҡамасаулаусы ҙур кәртә булып тора. Тағы ла бер үҙенсәлек хаҡында әйтеп үтеү кәрәктер - элек ирҙәрҙең ғаиләһен ташлап сығып китеп, яңғыҙ ҡалыуынан ҡатын-ҡыҙ ҡурҡһа, бөгөн хәл тап киреһенсә, йәғни ваҡиғаның ошондай боролош алыуынан ирҙәр ҡурҡа.

Йәш егеттәр алсаҡ, матур буй-һынлы, тормошҡа позитив ҡараштағы булған ҡыҙҙарҙы эҙләһә, 25-45 йәшлектәрҙең күңеленә ышанысды, донъя көтөрҙәй, конфликтһыҙ, эскеһеҙ, тотороҡло холоҡло ҡатын-ҡыҙҙар яҡын. Ә олораҡ ағайҙарға иһә булған донъяны ипле генә алып барырҙай, тәртипле, иманлы, тыныс холоҡло ҡатын кәрәк. Шулай уҡ 40-ты үткән ир-егеттәр бер балаһы булған йәш ҡатын-ҡыҙҙы эҙләй, сөнки уларҙың донъяһы йайланған, эштәре бар, тик ҡыҫып һөйөр бала ғына юҡ. Балаһы булған ҡатын-ҡыҙҙың миңә лә бала табып, атай булыу бәхетен бүләк итер мөмкинлеге бар, ә йәш ҡыҙҙың түлһеҙ булыуы ла ихтимал, тип фекер йөрөтә улар.

Ир-егеттәрҙең өйләнмәй йөрөүенең йәки күңеленә ятҡан ҡатын тапмауының да сәбәптәре төрлө. Мәҫәлән, урта йәштәге егеттәрҙең буйҙаҡлығының бер сәбәбе - ҡасандыр ҡатын-ҡыҙ тарафынан алданыу, хыянат кеүек күңелһеҙ ваҡиғаларҙан арына алмау. Тыштан күрһәтмәҫкә тырышһалар ҙа, уларҙың эске донъяларында ниндәйҙер боролош, түңкәрелеш булған һәм улар барлыҡҡа килгән депрессив хәлдән оҙаҡ ҡотола алмай яфалана.

### Ишен эҙләүсе ҡатын-ҡыҙҙар

Хәҙер һүҙебеҙҙе гүзәл ҡатын-ҡыҙҙарға күсерәйек. Уларға ҡарап, ниндәй һығымта яһап була? Бөгөнгө заман ҡатын-ҡыҙҙары, ҡыҙғаныcҡа күрә, үҙҙәренә ирҙәр һыҙатын алып бөтөп бара. Был уларҙың үҙҙәрен тотошонда ла, һөйләшеүҙәрендә лә асыҡ сағыла. Элекке заман ҡатын-ҡыҙҙарыныҡы кеүек һығылмалылыҡ, аңлаусанлыҡ, килешле генә ҡыланыусанлыҡ юҡ тиерлек. Ҡайһы берәүҙәрҙән бүлмәгә килеп ингәс тә ниндәйҙер һалҡынлыҡ, тупаҫлыҡ һибелгән кеүек. Тирә-йүн хәүефенән, насар һүҙҙәрҙән һаҡланып, үҙ ояһына йәшеренгән һәм әҙ генә ҡурҡыныс тойғанда ла һәр кемгә ташланырға әҙер торған йыртҡысты хәтерләтә улар. Асыҡ сырайлы, күҙҙәрендә осҡондар уйнаусы, йөҙөндә йылмайыу балҡыған гүзәл заттар һирәк. Уларҙың: "Мин үҙем!", "Ир-егеттәр ярҙамы кәрәкмәй, барыһын да үҙем эшләйем!" тигән йәшәү принцибы ир-аттарға үҙҙәренең булмышын, һәләтен күрһәтергә, тулыһынса асылырға мөмкинлек бирмәй.



*Тәү сиратта, ир-егеттәребеҙҙе күҙҙән үткәрәйек. Бөгөнгө көндә агентлыҡҡа килеп, үҙҙәре хаҡында мәғлүмәт ҡалдырыусы ир-егеттәрҙе ышаныслы тормош юлдашы булырҙай кешеләр, тип әйтергә була, минеңсә. Ундайҙар кәләш таба алмай йөрөмәҫ инде, тиер берәү. Эйе, уңған, аҡыллы, эшһөйәр, күбеһенең бынамын тигән донъяһы булған ир-аттарҙың кәләшһеҙ йөрөүен күҙ алдына баҫтырыуы ҡыйын. Тик проблема, тәү ҡарашҡа, күҙгә ташланып бармай. Бөгөн бөтә донъя тик ир-егеттәрҙе генә ышаныcһыҙ булыуҙа ғәйепләргә күнеккән. Үҙебеҙҙе ошоға ышандырғанбыҙ ҙа, унан арына алмай, барыһын да бер ҡалыпҡа һалып үлсәйбеҙ. Баҡтиһәң, ир-егеттәрҙең дә ҡатын-ҡыҙға ышанысы бөтөнләй юғалып бара икән! Кешенең бер-береһенә ышанысы юғалыуы, үҙ сиратында, ғаилә ҡорорға ҡамасаулаусы ҙур кәртә булып тора. Тағы ла бер үҙенсәлек хаҡында әйтеп үтеү кәрәктер - элек ирҙәрҙең ғаиләһен ташлап сығып китеп, яңғыҙ ҡалыуынан ҡатын-ҡыҙ ҡурҡһа, бөгөн хәл тап киреһенсә, йәғни ваҡиғаның ошондай боролош алыуынан ирҙәр ҡурҡа.*

Шулай уҡ үҙенә иш эҙләүсе күп ҡатын-ҡыҙҙарҙан: "Ауылда йәшәргә риза түгелмен", - тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетәм. Ауылда тыуып, әле лә шунда ғүмер кисереүсе ҡыҙҙарҙы буласаҡ тормош иптәше, ни өсөндөр, нәҡ ҡала кешеһенә әйләндерергә тейеш. Бөгөнгө көндә йәшәй белгән кеше ауылда ла ҡалалағынан кәм йәшәмәй, ә белмәгәндең ҡалала ла матур тормош ҡороуы икеле. Йәшәгән урыны ғына түгел, ә кешенең үҙ-үҙенә булған талапсанлығы, уңғанлығы, тормошҡа яҡшы ҡарашы булдыра матур донъяны. Шуны оноторға ярамай, минеңсә.

Ҡатын-ҡыҙҙар араһында тағы бер төркөмдө билдәләргә була. Уларҙы ишле булып донъя көтөү, бергә матур тормош ҡороу мәсьәләһе борсомай, ә әлеге көндә ир ҡулы етмәгәнлектән, ҡыйрап барған кәртә-ҡураһын төҙәттереү, бәрәңгеһен алдырыу, бесәнгә йәки башҡа төрлө эше өсөн "ваҡытлыса" ир кәрәк. Ундайҙарҙың эшләнәһе эштәре тамамланғас, бәлки, үҙ йәремде, тормош юлдашымды таптым тип ышанып, ең һыҙғанып донъя көтөргә тотонған ир, дөрөҫөн генә әйткәндә, урамға ҡыуып сығарыла. Тап ошондай юлды ҡыуыусы бер-нисә ҡатын-ҡыҙ мөрәжәғәт итте, ә ир-егеттәргә килгәндә, былай "һунарсылар" булғаны юҡ. Ҡатын-ҡыҙҙы ла аңларға була кеүек, һәр кемдең яҡшы, төҙөк донъяла йәшәгеһе килә, ләкин быға ошондай юл менән өлгәшеүселәрҙе, кәмендә, әхлаҡһыҙ тип атарға булалыр ул. Ул эштәрҙе кемгәлер аҡса түләп тә эшләтеп була, ә кемдеңдер өмөтөн һүндереп, ышанысын ҡыйратып түгел.

Агентлыҡ асылғандан алып ете айлыҡ эш тәжрибәһе күрһәтеүенсә, 50-не үткән ҡатын-ҡыҙға ишен табыуы ауыр, сөнки, беренсенән, улар йәшендәге ир-егеттәр әҙерәк, икенсенән, уларҙың тормоштары ҡалыплашҡан, бер яйға һалынған, шуға күрә ҡайҙалыр күсеп барыу, өр-яңынан донъя көтә башлау кеүек мәсьәләләр уларҙы бер аҙ ҡурҡыуға һала. Шул уҡ ваҡытта, киреһенсә, кемдеңдер уларға күсеп килеп йәшәй башлауы ла күңелдәренә ятып бөтмәй. Алтын урталыҡты таба алмай йөҙәйҙәр, уйлайҙар, ә ваҡыт уҙа. Ир-егеттәрҙә лә был күренеш күҙәтелә һәм тәүҙә тормоштарын үҙгәртергә, яңғыҙлыҡтан ҡотолорға теләп килеп ингән ағай-апайҙар бер аҙҙан һуң "һүнә", был уйынан кире ҡайта.

## "Бәхетле"нең эшләү алымы

Агентлыҡҡа мөрәжәғәт итеүселәргә тура килерҙәй иште эҙләү күп ваҡыт талап итә. Шөғөлдәре, тормошҡа ҡараштары бер төрлөрәк булған, холоҡ-фиғелдәре тап килерҙәй кешеләрҙе таныштырырға тырышам. Ә бының өсөн килгән кешенән анкета һорауҙарына ғына яуаптар алыу әҙ, сөнки ул яуаптар аша бөтә нәмәне лә аңлап-белеп бөтөп булмай. Шуға күрә һәр кеше менән әңгәмә үткәреп, уларҙың эске донъяһын аңларға, уйниәттәренә төшөнөргә, шулай уҡ мөмкинлек булғанда донъяларын да барып күрергә тырышам. Кемдеңдер телен сисеүгә, әңгәмәне үҙемә кәрәкле юсыҡҡа төшөрөүгә күп ваҡыт талап ителһә, кемдер, киреһенсә, үҙе хаҡында әүәҫләнеп бәйән итә. Былай эш ниндәйҙер кимәлдә психолог булыуҙы талап итә. Һәр кешенең үҙ яйы, үҙ көйө, уй-хисе. Ғөмүмән, һәр кем үҙенең донъяһында йәшәй һәм улар менән уртаҡ тел табыу өсөн ҙур көс талап ителә. Кешенең тәртибенә, үҙ-үҙен тотошона, ғаилә ҡорғас, унын ниндәй булырына үҙе тәрбиәләнгән ғаиләнең йоғонтоһо ҙур. Әгәр ҙә ул бәләкәйҙән ғаиләләге тыныс һәм мөхәббәтле мөхитте күреп, наҙға һәм һөйөүгә төрөнөп үҫһә, үҙе ғаилә ҡорғас та өйөндә нәҡ ошондай мөхит булдырырға тырышасаҡ. Ә талаш-тартыш, тыныслыҡ булмаған ғаиләлә буй еткергән, атаһы әсәһен ҡыйырһытыуын күреп үҫкән, йәки әсәһенең тиран булыуын белеп үҫкән кешенең ҡорған ғаиләһендә лә ҡот һәм йәмдең булыуы икеле. Шуға күрә, һәр килгән кешенән ата-әсәһе, туғандары, уларҙың холоҡтары, эш урындары хаҡында мәғлүмәт алырға тырышам, сөнки кешене уратып алған мөхит формалаштыра, әүәләй. Егеттәр менән һөйләшкәндә күберәген уның ғаиләһендә атаһының әсәһенә булған мөнәсәбәтен, ә ҡыҙҙарҙа әсәһенең атаһына булған ҡарашын иғтибар үҙәгенә алам.

Бөгөнгө көндә эшем ҙур килем килтерә тип әйтә алмайым, ул күберәген рухи ҡәнәғәтләнеүгә ҡайтып ҡала. Әгәр ҙә һин бары тик аҡса табыуҙы ғына алғы планға ҡуйып, әхлаҡи-этик яғы хаҡында онотаһың икән, эштең алға китеүе икеле, тип уйлайым. Шулай ҙа тормоштоң үҙ ҡануны: һәр кемгә донъя көтөргә, балалар үҫтерергә кәрәк. Шулай уҡ агентлыҡтың минең төп эшем икәнлеген күҙ уңынан ысҡындырырға ла ярамай һәм киләсәктә эш башлау өсөн һалынған барлыҡ финанс сығымдар ҙа тулһыныса ҡапланыр һәм агентлыҡ килем килтерә башлар, тип ышанам. Шулай ҙа, тәү сиратта, бында килгән һәр кешегә ышан866 ысла, күңеленә яткан, гөрләтеп донъя көтөрҙәй ишен табыу һәм уларҙың бәхетле йәшәүен күреү минең эшемдең иң ҙур баһаһы һәм уңышы буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Димләп кәләш әйттереү йәки кейәүгә биреү элек-электән килгән матур йола. Әлбиттә, бөгөнгө көн күҙлегенән ҡарағанда, был хеҙмәт кәрәкмәгән ваҡыт үткәргес булып күренергә лә мөмкин, сөнки барыһы ла үҙ тормошон ҡулына алып, аныҡ маҡсаттар ҡуйырға ҡурҡмаған ваҡытта йәшәйбеҙ кеүек һәм шәхси тормошон ҡороуға ғына һәр кемдең дә көсө лә, хәле лә етерлек һымаҡ. Тик бының улай түгел икәнлеген аңлар өсөн төпкә төшөп эҙләнергә түгел, ә янығыҙҙағы дуҫтар һәм таныштарығыҙға күҙ һалыу ҙа етә. Шуға күрә ҡайһы берәүҙәр күҙ алдына баҫтырырға тырышҡанса, димләү агентлыҡтары эшен ниндәйҙер әҙәпһеҙлек тип түгел, ә ғаилә институтын барлыҡҡа килтереүгә һәм нығытыуға ҡоролған эшмәкәрлек тип һанау дөрөҫөрәк булыр.**

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА яҙып алды.**

*МАТУР ХӘТИРӘ*

# КӨСЛӨЛӘР НӘҪЕЛЕНӘНМЕН



**Ҡайһы бер шиғри юлдар бер уҡыуҙа уҡ хәтергә һеңеп ҡалыусан бит. Бына Рәми Ғариповтың "Ҡомдағы эҙҙәр" шиғырының һуңғы өлөшө олоғайғас та йыш иҫкә төшә:**
**Ҡомдағы эҙ генә мәллә**
**Был һантый йәшлек үҙе?**
**Хәҙер уны юясаҡ бит**
**Тулҡындары диңгеҙҙең!..**
**Йәшлекте ҡомдағы эҙҙәргә тиңләһә лә шағир, ҡайһы бер эҙҙәр шундай тәрән, диңгеҙҙәй ғүмерҙең тулҡындары ла юя алмай уны. Хатта бала саҡ эҙҙәре лә һаҡлана...**

Мәктәпкәсә балалар йортонда бик оло йәштәге Шәрифә исемле тәрбиәсе апай бар ине. Шаян балаларҙы ҡысҡырып тыйырға ла, әрләргә лә хәле булмағандыр уның. Шуға, тыңламаған баланы семетә, йә ҡолағын бора. Ауыртыуҙан сәрелдәгән баланың тауышы сит яҡҡа ишетелмәһен өсөн: "Әлиләү генәйем, бәлиләү генәйем..."- тип йырлай ине үҙе. Апайҙың ул холҡон белгәнгә күрә, ул килгән көндә бик шым, баҫалҡы ғына йөрөйбөҙ. Бына бер саҡ киске ашҡа ултырҙыҡ. Йәй. Бер бәйләнсек себен минең тәрилкәмә килә лә ҡуна, килә лә ҡуна. Мин шым ғына: "Эй, себенкәй, һин дә асыҡтыңмы? Минең буҡкама теймә. Мин һиңә өлөш сығарам, аша", - тип ҡалағымдың осо менән кескәй генә өлөш сығарып, өҫтәлгә һалып та өлгөрмәнем, Шәрифә апай ҡолағымдан эләктереп алып, йырлай-йырлай мине мөйөшкә алып барып баҫтырып та ҡуйҙы. Себен рәхәтләнеп ашағандыр инде буҡкамды, тик мин ас ҡалдым. Сабыйлыҡ инде.

Ул сабыйлыҡты Башҡорт иле лә дауам итә. Бында, тегендә өлөш сығара- сығара ярым ас ҡалабыҙ, ә "тәрбиәселәр" ҡолағыбыҙҙы борғолап ҡына тора: "Әлиләү генәйем, бәлиләү генәйем... Әсмәбикә тыпырлатып бейеп килә генәйем... "

* * *

Рәмир Ғарипов шиғырындағы ҡомда ҡалған эҙҙәр тураһындағы юлдарҙы иҫләп, тағы ла бер иҫтәлекте хәтергә төшөрҙөм. 5-се синыфты тамамлап, йәйге дачаға ял итергә барҙыҡ. Һәр саҡтағыса, дачаны асыу һәм ябыу байрамдары бик күңелле үтә. Тантаналы йыйылыштан һуң төрлө уйындар уйнайбыҙ. Йә скакалкала һикереү, йә яулыҡ менән күҙҙәрҙе ҡаплап, епкә эленгән кәнфиттәрҙең береһен ҡайсы менән ҡырҡып алыу, йә бау тартышыу һ.б. Ул уйындарҙы мин дә уйнап ҡараным, тик бер талон да ота алманым. Ул талондарҙы отҡандар инде печенье, кәнфит ашап йөрөйҙәр (ашханаға барып талондарын тапшырып алалар ул ризыҡтарҙы балалар). Эй, күҙем ҡыҙа минең. Йүгерек тә, оҫта һикереүсе лә түгелмен. Бер өҫтәл янына барһам, унда "ҡул көрәше" уйнайҙар. Мин дә көсөмдө һынап ҡарарға булдым. Тәүҙә Әлфиәне һәм Әнүзәне еңдем, аҙаҡ Маһинурҙы, хатта минән күпкә оҙон буйлы Факиһаны ла еңдем. Дүрт талон отоп, ашханаға йүгерҙем. Ике кәнфит, ике печенье алып һыйланып, көс йыйып, тағы шул уйынға йүнәлдем, тик "Байрам тамам" тинеләр. Бер ҡыҙҙан да еңелмәүемә аптыраным, әлбиттә. Бына уҡыу йылы алдынан йыйылыш үткәрҙеләр. Мин завуч апай янында ултырам. Еңһеҙ күлдәк кейгәнмен. Шул саҡ завуч апай минең ҡулдарыма ҡарап аптыраулы һорау бирҙе: "Ҡулдарың ҡалай көслө. Ниңә? Ни өсөн?" "Әлләсе..." тип, мин дә аптыраным. Ҡулдарымдың мускулдары ҡалҡып тора. Йәйге уйындан, завучтың һорауынан ҡул көсөм һәйбәт икәнен аңланым. Тик ниңә, ни өсөн ҡаҡса ғына һынлы, кескәй генә буйлы ҡыҙыҡайға көслө ҡулдар бирелеүен аңлай алманым ул саҡта.

Быны мәктәпте тамамлағас, тыуған ауылымды эҙләп районға сығып киттем. Кем мин, туғандарым бармы? Директор юлға аҡса бирҙе. Ике көн эҙләнем, һораша-һораша йөрөп таптым. Мине иң ғәжәпләндергәне атайымдың атаһы булды. Шәмсетдин олатайым 90 йәшкә еткән, оҙон буйлы, көслө ҡуллы. Тимәк, мин көслө ҡуллылар нәҫеленән булып сығам, тип уйланым ул саҡта һәм шәжәрәмә рәхмәт уҡыным. Һуғыш ваҡытында, аслыҡта тыуып үҫһәм дә, ана шул көслөләр ҡаны мине бар бәләләрҙән йолоп ҡалған. Һуңынан скульптор һөнәрен һайлап, таштарҙан, ағастарҙан, балсыҡтан бәләкәй һындар яһаным. Ҡул көсө генә түгел, рух көсө лә кәрәк булды ул саҡта. Нәҫелемә, тамырҙарыма рәхмәт уҡыным тағы ла...

* * *

Хатымды тамамлайым тигәйнем дә, "рух" көсө тип яҙғас, миҫал кәрәк бит. Ул миҫалдарҙы бик күп яҙырға булыр ине. Бер бәләкәйен генә яҙып үтәйем. Мәктәпте тамамлап, Мәскәүҙә уҡып йөрөйөм. Рәссамдарға кәрәкмәһә лә, "Политэкономия" фәнен өйрәтәләр. Бына имтихан көнө лә етте. Ҡурҡышымдан бик яҡшы әҙерләнеп барҙым. Мейем саф, хәтерем һәйбәт, ниңә ҡурҡҡанмындыр? Билет алып әҙерләндем дә оло йәштәрҙәге уҡытыусы ҡаршыһына ултырып яуап бирәм. Һәйбәт белеүемә шатмын, йылмайып һөйләп бөткәйнем, уҡытыусының: "Ярай, өс ҡуям", - тип әйтеүенә һушым китте. Яуап биргән мәлдә уның иғтибар менән тыңламауын һиҙеңкерәгәйнем, әлбиттә. Ҡап-ҡара мосолман балаһы "Политэкономия" тигән ҡатмарлы фәнде өслө билдәһенә белһә лә хуп, тигәндер ул. Ныҡыш кешемен мин. Тыныс, әммә ҡаты тауыш менән: "Мин бөтә һорауҙарға ла дөрөҫ яуап бирҙем. Ышанмаһағыҙ, тағы өҫтәлмә һорау бирегеҙ!" - тинем. Оло ағай уянып киткәндәй миңә аптырап ҡараны ла, яңы һорау бирҙе. Быныһында йылмайып түгел, шатырҙатып яуап бирҙем. Уҡытыусы: "Ысынлап та һәйбәт әҙерләнеп килгәнһең, дүртле ҡуям",- тине лә, "Ризаһыңмы?" тигәндәй, миңә тағы ҡарап ҡуйҙы. Имтихандан һуң коридорға сыҡҡас: "Үәт, башҡорт балаһы!" - тип үҙемде маҡтап ҡуйҙым. "Бер ҡайҙа ла бирешеп торма!" тип өҫтәнем аҙаҡ. Беренсе курста минең турала курсташтарым: "Пришла маленькая, худенькая, нерусская и самый большой планшет взяла", тип көршеләргә көлөп һөйләгәндәр. Курсташтарымдың да, уҡытыусыларымдың да һәйбәт мөнәсәбәтен тойоп уҡыным. Һүрәт буйынса уҡытыусының: "Тәүҙә һине күреп борсолғайным да, тырышлығыңды күреп тынысландым",- тип тә маҡтап ҡуйыуы иҫемдә. Көслөләләр нәҫеленән булыуым бына шулай һәр аҙымда ярҙам иткәндер, тип уйлайым хәҙер бала саҡ, йәшлектең "ҡомда ҡалған эҙҙәрен" хәтерләп.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

✓ *...Ә шулай ҙа ҡатындан үсте алдым. Хәбәр һөйләй башлаһа, атайым һымаҡ, өндәшмәй генә тыңлап тик ултырам. Үлтереп һөйләшке килһә лә, блокнотты асып, ҡатынға теге мәҡәлдәрҙе генә күрһәтәм дә ҡуям...*



СӘҒИТ АГИШ исемендәге хикәйәләр конкурсы



**Әғләм ШӘРИПОВ**

# ӨНДӘШМӘҮЕҢ МЕҢ АЛТЫН...

**Хикәйә**



Дүшәмбе - ауыр көн, тигән булалар. Бер ҙә улай түгел. Бына минең менән бер кабинетта ултырыусы хеҙмәттәшем Мәргән дүшәмбе эшкә иртәрәк килеп, ең һыҙғанып эшкә лә тотонған: тырышып-тырышып нимәлер яҙа, хатта минең һаулыҡты ла баш ҡағып ҡына алды. Яйлап ҡына күҙ һалғылап алам тегегә. Баҡтиһәң, эш ваҡытында блокнотына халыҡ мәҡәлдәре күсереп яҙып ултыра икән. Халыҡ ижадынан яҡлаутаяныс эҙләрлек көнгә төшкәс, хәлдәре ысынлап та мөшкөлдөр егеттең. Күңеленә ятышлы мәҡәлдәрҙе оҙаҡ итеп эҙләгәндән һуң, уларҙы матур итеп блокнотына яҙып ҡуйҙы ла "Йә, нисек?" тип миңә күрһәтә. Шалт тәүге бит - "Уйламай һөйләгән - ауырымай үлгән". Шалт икенсеһе - "Өндәшмәүең мең алтын". Мәйтәм, шәп-шәпшәәәәп, ләкин былар һиңә нимәгә? Әллә, мәйтәм, яҙыусы булырға йыйынаһыңмы? Хеҙмәттәшемдең һаран ғына йылмайыуы, мыҫҡыл итмә, тигәнде аңлатты булһа кәрәк. Ә мин ныҡышыуымды беләм: "Йома көн һин дә мин ҡайтып киткәйнең, бигерәк үҙгәргәнһең, әллә ике көн эсендә алыштырып ҡуйғандар инде үҙеңде". Ул миңә бер килке ҡарап торғандан һуң, ауыр көрһөнөп ҡуйҙы. Ғаиләһендә ниҙер булған, күрәһең. Әммә әлегә был турала һорашыуҙан фәтеүә юҡ, уҙа барһа, ике-өс көндән көлә-көлә үҙе һөйләп бирәсәк. Шулай килеп сыҡты ла. Артабан Мәргәндең исеменән һөйләйем.

...Эштән ҡайтып, мал-тыуарҙарҙы ҡарап бикләп, киске сәй эскәндән һуң яйлап ҡына гәзит-журналдар уҡырға тотондом. Ҡатын балаларға, үҙебеҙгә урын һалып бирҙе лә, түрбаш яғына сығып китте. Мин "Йәшлек"те тотоп ятып ҡалдым. Тәүге биттәргә күҙ генә һирпеп үттем дә һуңғы битендәге "Мәҙәк хәлдәр" рубрикаһын тәмләп кенә уҡый башланым. Ымһыныу бушҡа булмаған икән, көләмәс бик оҡшап ҡалды. Ирекһеҙҙән көлөп ебәрҙем. Шул саҡ түрбаш яғынан ҡатындың: "Ни...ә кө...лә...ең", - тигән тауышы ишетелде. Тешен таҙартып торған саҡҡа тура килгән икән минең көлөү, ҡәһәрең, шуға тауышы өҙөк-йыртыҡ сыға. Ә ҡатынға әбизәтелнә минең көлөүҙең сәбәбен белергә кәрәк, шунһыҙ булмай. Һуйылдай булып ир һаһылдап көлөп ятһын, ә һин тыныс ҡына үҙ эшең менән бул, имеш. Был минең ҡатын өсөн бөтөнләй мөмкин булмаған хәл. Ярай, мәйтәм, теләгең булғас, уҡыйым, тыңла. "Яңы ғына килен булып төшкән ҡыҙ балаға ҡәйнәһе бот сабып аптырап: "Уй, килен, бигерәк ябыҡ икәнһең", - тип әйткән. Әсәһен тағы ла нығыраҡ аптыратмаҡ булып, улы: "Әсәй, һин уны мунсала күрһәң...", - тип өҫтәп ҡуйған, имеш". Уҡыным да, рәхәтләнеп тағы көлә башланым. Әммә ҡатындың көлгән тауышы ишетелмәне. Был нишләп көлмәй икән, тип, түрбаш яғына күҙ һалһам, ҡатын эргәлә тора. Ҡайһы арала йоҡо бүлмәһенә килеп ингән, хатта шуны ла һиҙмәй ҡалғанмын. Теш таҙартҡысын да һалмаған, исмаһам, битен йыуһа икән. Аптырағас, гәзиттә бигерәк көлкөлө хәл яҙғандар, ибет, тигән булам. Йөҙөнә ҡарап, ҡатынға көләмәс арыу ғына төрткән, икәнен аңлап алдым. Шундай итеп ышнап-мышнап ҡарап тора, нәҫел үгеҙең ары торһон. Әммә көләмәстең ҡайһы ере ҡатындың ҡайһы еренә төрткән, шуны аңлап булмай.

Бына ҡатын бик оҫта ғына итеп һорау алыуҙы башлап ебәрҙе.

- Ниңә мине шул хәтлем алйотҡа һанайһың? - Ғәрлегенә сыҙамайынса ярһый был, хатта тауыштары ҡалтырап китә. Иҫәп әлегә ҡатын файҙаһына, сөнки минең әйтер һүҙ юҡ. Ә бына көлкө килә инде, йә тыйылып булмай, йә туҡтап булмай - көлөп тик ятам, ә ҡулда гәзит, уны һелкеп-һелкеп алам, йәнәһе, һинән көлмәйем, бына гәзиттәге көләмәстән көләм. Әммә минең "эскерһеҙ" көлөү уны ярһыта ғына бара.

- Минән мыҫҡыл итеп көлөп ятҡаныңды әллә һиҙмәй тип уйлайһыңмы?

Ҡатын файҙаһына иҫәп тағы бер мәрәйгә арта, минең һаман әйтер һүҙ юҡ, шулай ҙа көлкө бер аҙ баҫылды, сөнки иҫәпте тигеҙләргә тырышыр кәрәк. Башта төрлө уйҙар ҡайнай - нисегерәк мин уны алйотҡа һанайым да һәм нисегерәк мыҫҡыл итәм икән?

- Күҙеңде бәзерәйтеп, мине мыҫҡыл итеп ятҡансы, ана, исмаһам, апайыңа ҡара. Көләр кешеһе генә юҡ. Мин ғүмерҙә лә уға был турала әйтмәйәсәкмен, сөнки мин һинең мыһаҡ аҫтыртын түгел.

- Исмаһам, һымаҡ, тип әйт.

Һүҙ булмағанда һүҙ булһын, тип кенә әйтелә инде быныһы. Быйндай яуап ярты мәрәйгә лә тормайҙыр әле. Ә шулай ҙа мейелә тегеләй-былай һуғылып, ҡаңғырып йөрөгән уйҙар ниндәйҙер йүнәлеш алды, хәл бер аҙ төҫмөрләнә төштө, ә инде бер аҙҙан бөтөнләй асылып китте. Эш шунда икән - "гәзиттәге" килен ябыҡ, ә ҡатын менән минең апай, йомшағыраҡ итеп әйткәндә, ябыҡ түгел. Йәнәһе лә мин уны алйотҡа һанап, "күҙемде бәзерәйтеп", уның тулы кәүҙәһенән көлөп, "аҫтан ҡырҡып" ятам икән. Ә минең хәләл ефетем бер ҙә алйот булып сыҡмаған, минең һымаҡ аҫтыртынды шунда уҡ һиҙгән. Белмәй йөрөгәнмен, бына шундай һиҙгер икән минең ҡатын. Быйндай һиҙгерлеккә, билләһи, Штирлиц үҙе көнләшер ине.

Ошо мәлдән мәрәйҙәрҙе һанап та өлгөрөп булмай.

- Нимә, хәҙер минең һөйләшеү ҙә оҡшамай башланымы һиңә?

- Оҡшай, ғәләмәт оҡшай. Һандуғас мыһаҡ (уңайы сыҡҡанда төрттөрөп ҡалаһың инде ул) һайрап тораһың бит. Тик артыҡ тауышыңды күтәрмә, балаларҙы уятырһың.

- Уянһындар, балалар минеке. Йыуан булһам да, нәҙек булһам да, мин тапҡанмын. Уянһындар, аталарының кем икәнен белеп үҫһендәр.

- Уларҙы уятып ҡурҡытмаҡсы булаһыңмы?

Күҙ алдына килтерегеҙ әле - ҡулда теш таҙартҡыс, ауыҙ-бит ап-аҡ, сәс-баш туҙған, үҙе эске күлдәктән генә. Исмаһам, ябыҡ та түгел бит әле - балалар түгел, үҙем ҡурҡыштан саҡ-саҡ тын алып ятам.

- Йә, Хоҙай, хәҙер шундай хәлгә барып еттемме икән? Минән бынау ир аҡтығы ғына түгел, хатта үҙ балаларым да ҡурҡа башлаған!

- Ҡуй, кәләш, буштан талаш сығармайыҡ әле. Йоҡлайыҡ.

- Һиңә ана шул йоҡо ғына булһын. Иҫем китә, шул хәтлем ҡайһы ереңә генә йоҡлайһыңдыр инде. Ана, башҡаларға ҡара - бөтәһе лә эш тип сабып йөрөй. Ә бының бар эше бисә тикшереү ҙә йоҡлау. Ғаиләгеҙҙә бер һин генә шулай...

- Китсәле, буш хәбәр һөйләмә. Өйҙәге ир эштәренең бөтәһен дә үҙем эшләйем.

- Эшләйһең, телең менән. Хоҙай Тәғәлә тел генә биргән бит һиңә. Бер һүҙгә мең яуап. Бер эш эшләйем тиһә, мең сәбәп...

Быйндай "маҡтауға", әлбиттә, мин дә түҙә алманым, тегене апаруҡ ҡына "маҡтап" алдым. Ярай, был яғын ул хәтлем үк тәрәнгә төшөп, тәфсирләп һөйләп тормайым. Ҡыҫҡаһы, әйтмәгән һүҙ ҡалманы. Иң аҙаҡтан ошондай ҡарарға килдек - ҡатын тормошон заяға уҙғара икән, ер йөҙөндә бер ир ҡалмаһа ла, ул минең яҡҡа боролоп та ҡарамаясаҡ, ә мин (тьфү, тьфү, бүтән саҡта башҡа ла килә торған уй түгел бит инде) ҡара йылан менән йәшәп ятҡанмын икән. Ҡыҫҡаһы, ҡояш үҙенең тәүге нурҙарын һибеү менән айырылышабыҙ. Бары тик таң атҡанын көтөргә ҡалды.

Ләкин уйламағанда-көтмәгәндә өйөбөҙгә атай менән әсәй килеп инде. Кемгәләр ҡунаҡҡа барғандар ҙа, беҙҙең өйҙә һаман ут яныып торғанын күреп, юл ыңғайы беҙгә һуғылып сығырға булғандар, имеш. Тапҡандар ваҡыт! Уларҙы күреү менән ҡатын ялт итеп төпкө яҡҡа инеп тә тайҙы, ялт итеп килеп тә сыҡты. Ай-һай, ҡайһы арала йыуынып, битен һөртөп, сәс-башын рәтләп, кейенеп өлгөргән - этем белһен. Яңы ғына мине һыу эскеһеҙ итеп "маҡтап" йөрөгән ҡатын тип кем әйтһен. Ошо урында мин, бер килке аптырап ҡарап торғандан һуң, күҙҙәрҙе селт-селт йомоп: "Бына хәҙер кешегә оҡшап ҡалдың", - тип кенә әйтә алдым. Ҡатын эстән генә мине "маҡтап" алды, күрәһең, осҡонло ҡарашын миңә бер генә һирпеп алды ла, ҡайны менән ҡәйнәһен ай-вайына ҡуймай, сәй эсергә ултыртты. "Нимә ситтә тораһың (билләһи, эстән йә күҙле бүкән, йә ас бет, тип өҫтәне), кил сәй эсергә", - тип мине лә саҡырҙы. Килеп ултырҙым, сәй шөрөлдәтәм, ә үҙем, был нимәнән башлар икән, тип уйлап ултырам. Төптән башланы ҡатын.

- Ҡайным, ҡәйнәм, килеп һәйбәт иттегеҙ әле. Беҙ ҙур һынау алдында торабыҙ. Беҙгә һеҙҙең кәңәш кәрәк.

- Килен, әллә тағы бер бәпес алырға уйығыҙ бармы? Алығыҙ, балалар, алығыҙ. Әле һеҙ йәш, күмәк балалар бер-береһен ҡарашып үҫә бит ул...- тип эләктереп алды әсәйем.

- Эй, ҡәйнәм, мин риза ла ул, ләкин бына улығыҙ мине айырырға йөрөй.

- Нисек айырырға йөрөй? - Әсәй осар ҡаҙҙай талпынып, саҡ ултырғысы менән ҡуша ҡолап китмәне. Йәнәһе лә, шул хәтле аптыраны. Икеһе лә шундай килештереп ебәрәләр, әллә бер театрҙа уйнайҙар инде. Әртистәрең ары торһон.

- Бына шулай, ҡәйнәм. Нисәмә йылдар буйы минең менән ыҙалап йәшәгән икән. Баҡһаң, уға ябыҡ ҡатындар оҡшай икән. Һөйләшә белмәйем икән. Шундай ҡурҡыныс икәнмен, минән ул ғына түгел, хатта балалар ҙа ҡурҡа башлаған икән...

- Ярай, килен, ҡайғырма, арт һабағын уҡытырбыҙ беҙ уның күмәкләп. Берәү рәхәт тормошҡа сыҙамай башлаған, имеш. Ҡайтһа - әҙер, китһә - әҙер. Балалар ҡараулы, өй йылы. Ыстырам, киленде шулай тип мыҫҡыл итеүеңә. Оят түгелме һиңә киленгә шулай тип әйтергә? Тапҡанмын, үҫтергәнмен, бына хәҙер ултырһын әле балаң, киленегеҙ оҡшамай, тип...

Ҡыҫҡаһы, һүҙ ошо йүнәлештә барҙы. Әсәй бот сабып аптыраған була, ә килене мине бәхетле итер өсөн хатта айырылышыуға риза икән. Ә итәк тултырып балалар үҫтереү бары тик уның тормошҡа ашмаясаҡ хыялында ғына ҡала инде. Хәҙер уға ныҡ булырға кәрәк, сөнки уға атайһыҙ ҡаласаҡ ике баланы аяҡҡа баҫтырырға кәрәк...

Улар, һөйләшеп туйғас, миңә һүҙ бирҙеләр. Ә мин күп һөйләп торманым. "Йәшлек" гәзитен ҡысҡырып уҡып, хәлде ҡыҫҡаса һөйләп бирҙем. Ошоноң менән эш бөттө, тип уйлайһығыҙмы? Бөтмәй торһон әле. Хәҙер әсәй башланы.

- Улым, минең улайтып әйткәнем юҡ та инде.

- Әсәй, нимә тип әйткәнең юҡ?

- Килен ябыҡ, тип әйткәнем юҡ та инде.

- Әсәй, һинең улайтып әйткәнең юҡ, ә бына гәзиттә шулай тип яҙғандар.

- Ә әйтмәгән нәмәне нишләп улайтып яҙғандар?

- Әсәй, уны һин әйтмәгәнһең, уны бөтөнләй икенсе әсәй әйткән.

- Беҙҙең килен тураһында шулай тип әйткәнме?

- Кем?

- Мин бөтөнләй белмәгән әсәй. Туҡта әле, тамам башты ҡатырҙың, ә улай булғас, мин һиңә кем булам?

Минең әйтер һүҙ юҡ. Шул саҡ ҡатын йылмайғандай итте, шунан көләмһерәй биреп ҡуйҙы, тора-бара ауыҙын баҫып ипләп кенә көлә башланы, ә аҙаҡ тыйыла алмай көләргә тотонидо. Әсәй китте аптырап.

- Балам, киленгә ни булды? Нимәгә көлә ул?

- Әсәй, гәзиттәге көләмәстән көлә ул.

- Ә унда нимә яҙғандар? Килен көлгәс, ҡыҙыҡ нәмә яҙғандарҙыр инде.

Минең тағы әйтер һүҙ юҡ. Аптырап, атайыма ҡарайым, йәнәһе, ярҙам ит, исмаһам, һин аңлатып ҡара. Ә атай мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып, рәхәтләнеп сәй эсеп тик ултыра. Уның килеп ингәне бирле: "Һай, килен, сәйең бигерәк тәмле, яһа әле тағы берҙе, ҡунаҡтан сарсап ҡайтып бара инем, иллә йәтеш булды", - тигән һүҙенән башҡа тауышы сыҡманы, уныһы ла ара-тирә генә ишетелеп ҡалды. Аҙаҡ үҙенән һораштым - үрҙә яҙылған халыҡ мәҡәлдәрен яҡшы белә икән ул. Ә шулай ҙа был сетерекле хәлдән атай ҡотҡарҙы.

- Әсәһе, гәзиттәге көләмәс бер сәғәт элек үк уҡылған. Күреп тораһың, мәғәнәһе йәштәргә яңы барып етте. Әйҙә, беҙ ҙә ҡайтайыҡ. Һөйләшә-һөйләшә ҡайтһаҡ, бер аҙҙан беҙ ҙә ул мәҙәктең мәғәнәһенә төшөнөп, көләшербеҙ әле...

...Ә шулай ҙа ҡатындан үсте алдым. Хәбәр һөйләй башлаһа, атайым һымаҡ, өндәшмәй генә тыңлап тик ултырам. Үлтереп һөйләшке килһә лә, блокнотты асып, ҡатынға теге мәҡәлдәрҙе генә күрһәтәм дә ҡуям...

**"Театр һине йә үҙенә ғашиҡ итә, йә битараф ҡалдыра. Йәштәр театрының үҙ тамашаһы, үҙ йөҙө һәм ижади ҡеүәте бар", - тигәйне ҡасандыр Милли йәштәр театры тураһында Мостай Кәрим. Башҡаларҙан айырмалы рәүештә, балалар һәм йәштәр өсөн ижад итеүсе театрҙың был донъялағы төп тәғәйенләнеше лә бөтәнсәрәктер ул, моғайын. Кешелектең иң мөһим һәм иң бөйөк бурысын - киләсәк быуынды тәрбиәләү менән шөғөлләнеүсе сәнғәт усағы бөгөн нисек йәшәй, киләсәккә ниндәй пландар ҡора - ошолар һәм сәнғәт донъяһының ҡайһы бер үҙенсәлектәре, унда булған проблемалар тураһында быйыл XXII ижад миҙгелен асыусы Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры директоры Ринат Исҡужа улы ИШМУЛЛИН менән әңгәмәләштек.**



# ЙӘШ ТАМАШАСЫҒА ЛА...

## өлкәненә лә ярарға тырыша улар

➔ **Бөгөн республикалағы башҡорт театр сәнғәтен, уның үҫеш кимәлен нисек баһалайһығыҙ?**

- Башҡортостанды театраль республика, тип тулы ышаныс менән әйтергә була, сөнки беҙҙә әлеге көндә 12 профессиональ театр эшләп килә. Уларҙың һәр береһенең бинаһы бар, ныҡлы матди база менән дә тәьмин ителгән, Хөкүмәт финанс яғынан да ярҙам итә. Һуңғы ваҡыттарҙа ғына Милли йәштәр театры Пермь, Һамар, Мәскәү, Саранск, Йошкар-Ола һәм башҡа ҡалаларҙа үткәрелгән фестивалдәрҙә ҡатнашты, шуға ла илдәге театр сәнғәте торошон күрәбеҙ һәм сағыштыра алабыҙ, бөгөн хатта Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларындағы театрҙарҙың хәле мөшкөл, сөнки уларҙа матди база насар.

Ғөмүмән, башҡорт театр сәнғәтен, уның үҫеш кимәлен баһалау өсөн башҡалар менән сағыштырырға кәрәк. Ә сағыштырыу мөмкинлеге төрлө фестивалдәр аша бирелә. Төрлө кимәлдәге фестивалдәрҙә ҡатнашыуҙан артистар ҙа, етәкселек тә үҙе өсөн ниндәйҙер фәһем ала, ойоштороу йәһәтенән дә нимәләрҙер өйрәнәһен. Әгәр ул башҡалар менән аралашып эшләй, нимәләр өйрәнә икән - шул саҡта ғына театрҙың киләсәге бар. Фестивалдә ҡатнашыу ул шулай уҡ донъя кимәленә сығыу ҙа. Эшләү- бер, үҙеңде күрһәтә белергә лә кәрәк.

Һуңғы ике йыл рәттән Төркиәлә үткәрелгән фестивалгә барып ҡайтырға яҙҙы. Тәүге йылда Туфан Миңнуллиндың "Диләфрүзгә дүрт кейәү" комедияһы Стамбул ҡалаһында үткәрелгән фестивалдә ҡатнашһа, быйыл Анкарала балалар өсөн спектаклдәр фестивалендә Сәрүәр Суринандың "Алтын балта" әкиәте менән йөрөп ҡайттыҡ. Әйтергә кәрәк, беҙҙең коллективты унда бик яраттылар, хатта урындағы мәҙәниәт министрлығында ҡабул иттеләр һәм киләһе йылға Конья ҡалаһында үткәреләсәк халыҡ-ара фестивалгә саҡырҙылар.

➔ **Тамашасы комедия жанрын яҡшыраҡ ҡабул итә, тимәк? Икенсе яҡтан, жанрҙар йәһәтенән ҡарағанда, комедияны уйнауы күпкә ауырыраҡ, тиҙәр. Сәхнәгә халыҡтың көнләнә яткан комедия сығарыу шулай уҡ актерҙың һәм режиссерҙың оло уңышы, тип аңларға буламы был күренеште?**

- Ысынлап та, комедияға еңел-елпе жанр тип ҡарарға ярамай, үҙ-үҙеңдән көлөргә өйрәнеү, һәр проблеманың көлкөлө яғын табыу еңел эш түгел. Кешене көлдөрөүе лә еңел булмауын иҫәпкә алғанда, был, ысынлап та, Милли йәштәр театры актерҙарының һәм режиссерҙарының һәләтен генә күрһәтә. Беҙҙең илдә ябай халыҡтың тормошо иҫ киткес яҡшы, көнкүреше алға киткән, тип әйтеп булмай, шуға ла фатир, аҡса мәсьәләһен, урамда булған проблемаларҙы сәхнәгә сығарып булмай, кеше былай ҙа уларҙан арыған. Театрға килгән тамашасы, киреһенсә, бер аҙға ғына булһа ла проблемаларынан ял итергә тейеш. Шуның өсөн театрҙа комедиялар күберәк булыуын насар күренеш, тип иҫәпләмәйем. Шулай ҙа тамашасыға комедия оҡшай, тип, уларҙың теләгенә генә эйәреү ҙә ярамай, театрҙың тәрбиәүи роле лә бар бит әле.

Әйткәндәй, 2006 йылдан театрҙа камера сәхнәһе эшләп килә. Уны эксперименталь сәхнә тип тә атарға була һәм унда йәш режиссерҙар үҙҙәрен төрлө яҡтан һынап ҡарай.

➔ **Милли йәштәр театрының тағы ла мөһим бурысын билдәләп үтмәйенсә ярамай - театрҙар өсөн буласаҡ тамашасыны тәрбиәләү ҙә уның иңенә йөкмәтелгән. Был бурысты нисек атҡараһығыҙ?**

- Бөгөнгө көндә ике труппаның да репертуарында бәләкәй синыф уҡыусылары һәм балалар баҡсалары тәрбиәләнеүселәре өсөн биш-алты әкиәт бара. Бөгөн ата-әсәнең балаһын театрға йөрөтөргә ваҡыты юҡ, сөнки улар башҡолләй эшкә сумған. Шуға ла бөгөн беҙ мәктәптәр, балалар баҡсалары менән һөйләшеп, килешеп, улар өсөн спектаклдәр уйнайбыҙ. Әгәр ҙә бала бәләкәй саҡтан театр менән ҡыҙыҡһынмаһа, әкиәт, мәғжизә күреп өйрәнмәһә, ҙурайғас ул театрға аяғын да баҫмаясаҡ, үҙенең балаларын да йөрөтмәйәсәк. Бөгөн театрҙар үҙҙәренә тамашасыны шул рәүешле әҙерләмәһә, киләсәктә бөтөнләй тамашасыһыҙ ҡалыуы ихтимал.

Милли йәштәр театры, Ҡурсаҡ театрынан тыш, республиканың башҡа театрҙарының һәр береһендә бәләкәй тамашасылар өсөн спектаклдәр уйнала. Бәләкәстәр өсөн мауыҡтырғыс тамашаларға ҡытлыҡ юҡ бөгөнгө көндә, быны "Колонсаҡ"республика фестивале лә раҫлай. Йәштәр өсөн тәғәйенләнгән спектаклдәрҙе лә күп уйнайбыҙ, мәҫәлән, әкиәттәрҙе алмаһаҡ, киске спектаклдәрҙең һаны 50-гә етә икән, шуларҙың 80 проценты йәштәргә тәғәйенләнгән.

Шуныһы үкенеслерәк, өлкән быуын кешеләре Милли йәштәр театрына һирәгерәк йөрөй. Бәлки, исеменән ҡурҡаларҙыр, әммә оло кеше лә йәштәрҙең нимә менән йәшәүен күрергә, уларға нимә оҡшауын белергә тейеш. Әйтергә кәрәк, йәштәр яңыса ҡуйылған спектаклдәрҙе бик яҡшы ҡабул итә. Шекспирҙың "Ромео һәм Джульетта"һы, М. Кәримдең "Ташлама утты, Прометей"ы, ике труппала барған тағы бер нисә спектаклде мин шундайҙар рәтенә индерәм. Яңы миҙгелдең яңы премьераһы - "Ҡыҙ урлау" тураһында төрлө хәбәрҙәр ишетелеп торһа ла, йәштәр уны яратып ҡараны кеүек. Шуны ла әйткем килә, классикаға әүерелгән әҫәрҙең классик вариантын академик театрҙар ҙа ҡуя. Әммә был классиканы йәштәр классик вариантында ғына ҡарарға тейеш, тигәнде аңлатмай. Йәштәр спектаклгә йөрөһөн өсөн, ул үҙ оҡшарға тейеш, шуға ла йәштәр театрында ниндәйҙер тәжрибәләр үткәреү ҙә кәрәк.

➔ **Халыҡ театрға үҙенең яраткан актерын күрергә, уның уйнаған геройҙарын ҡарарға ла йөрөй ала бит әле, бигерәк тә гүзәл зат актерҙарға ғашиҡ булып, уны идеаль герой дәрәжәһенә күтәреп табыныусан була. Бөгөн Милли йәштәр театрында ошондай герой булырлыҡ актерҙар бармы? Ғөмүмән, бөгөнгө идеаль герой ниндәй булырға тейеш?**

- Мин үҙем башҡорт театры күгендә Нурия Ирсаева, Гөлли Мөбәрәкова, Таңсулпан Бабичева, Фидан Ғафаровтар йондоҙ булып балҡыған, тамашасыларҙың уларҙы күреү өсөн генә ҡабат-ҡабат спектаклдәргә йөрөгән заманында уҡыным. Беҙ уларҙың уйнауын ҡарап, шундай яҡты хистәр кисереп йөрөй торғайныҡ. Шуға ла мин йөҙ процент гарантия менән, эйе, тегарға теге йәки был актерҙы күреү өсөн йөрөйҙәр, тип әйтә алам. Беҙҙең театрҙа ла тамашасы ғашиҡ булырҙай һәләтле егет һәм ҡыҙҙар эшләй. Уларҙың һәр береһенең үҙенең тамашасыһы булыуына иманым камил. Яңыраҡ тотош бер курс актерҙар килде, бик өмөтлө һәм һәләтле йәштәрҙең әле үк үҙҙәренең тиңдәштәренә өлгө булып тороуына шикләнмәйем. Уларҙың иҫеме бер нисә йылдан яңғыраясаҡ әле. Режиссерҙарыбыҙ ҙа театр сәнғәтендә оло ихтирамға лайыҡлы шәхестәр, уларҙың, иң мөһиме, тамашасыһына әйтер һүҙе бар. Шул уҡ ваҡытта ситтән режиссерҙар саҡырыу тәжрибәһен дә ҡулланабыҙ, сөнки актерҙың яҙмышы, уның актер булараҡ үҫеше режиссер ҡулында. Актер мотлаҡ рәүештә икенсе режиссерҙарҙың да "ҡулын" тойорға тейеш.

Әлбиттә, заман менән бергә рухи ҡиммәттәр ҙә үҙгәрә, шуға ла геройҙар ҙа үҙгәрергә тейеш. Шулай ҙа халҡыбыҙҙа борондан һәр яҡтан көслө булған кешеләрҙе алға ҡуйыу, уларҙы өлгө итеү бар икән, бөгөнгө герой ҙа шундай булырға тейештер.

➔ **Һуңғы осорҙа йыш ҡына рус, сит ил әҙәбиәтенә, бигерәк тә классик әҫәрҙәргә, әйтәйек, Шекспирға мөрәжәғәт итеү заманға ярашлы башҡорт драматургияһы булмауы менән бәйлеме, әллә быны икенсе төрлө сәбәптәре бармы?**

-Бөгөн милли театрҙар сәхнәһендә башлыса Мостай Кәрим, Нәжиб Асанбаев, Флорид Бүләков, Туфан Миңнуллин, Наил Ғәйетбайҙың әҫәрҙәре ҡуйыла. Ысынлап та, был авторҙарыбыҙ олоғайып та китте һәм һуңғы берике тиҫтә йыл инде башҡорт әҙәбиәте һәләтле йәш драматургтарға ҡытлыҡ кисерә. Был бер кемгә лә сер түгел, ул турала күп һөйләйбеҙ, әммә әлегә был өлкәлә ниндәйҙер үҙгәрештәр һиҙелмәй. Драматургия әҙәбиәттең бик ҡатмарлы жанры, шуға ла унда яңы исем, моғайын да, һирәгерәк тыуалыр. Яңы ҡарашлы, яңы йүнәлештә эшләргә әҙер актерҙар, режиссерҙар бар, драматургтар юҡ, сөнки көн ҡаҙағындағы темаларға әҫәр, бигерәк тә, драма әҫәре яҙыуы күпкә ауырыраҡ, күрәһең. Икенсенән, драматург кешеләргә әйтер һүҙе булған өсөн яҙырға тейеш, ә исемен театр афишаларында күрергә теләгәне өсөн түгел. Ошо маҡсаттың икенсеһен эҙәрлекләгән авторҙың әҫәре тамашасыны уйландырмаясаҡ, ул унан бер ниндәй ҙә фәһем алмаясаҡ. Шулай ҙа мине әҫәрҙәре республика театрҙарында ҡуйылыу бәхетенә ирешкән Салауат Әбүзәр, Әминә Яхина, Таңсулпан Ғарипованың драматургияһы ныҡ ҡыуандыра. Бик матур башлап ебәрҙеләр, уларға ҙур өмөттәр бағлап торам.

Әлбиттә, милли драматургияла булған ҡытлыҡ театрҙы сит ил авторҙарына йышыраҡ мөрәжәғәт итергә этәрә, тик шул уҡ ваҡытта беҙ йәш быуынды донъя әҙәбиәте менән дә таныштырырға тейешбеҙ.Бары тик сит телдә яҙылған әҫәрҙәрҙе дөрөҫ, туған тел нормаларына ярашлы тәржемәләүҙе талап итергә һәм быға ҙур әһәмиәт бирергә кәрәк. Ғөмүмән, милли театрҙың йәҙөн, иң тәү сиратта, туған тел билдәләй тип уйлайым.

➔ **Театр эшен кәрәкле йүнәлештә көйләп ебәреү өсөн ҡуйылған әҫәрҙәргә тамашасы ғына түгел, профессиональ тәнҡитсе тарафынан да баһа бирелергә һәм ниндәйҙер һүҙ әйтелергә тейеш. Бөгөнгө көндә театр сәнғәте драматургтарға ғына түгел, тәнҡитселәргә лә ҡытлыҡ кисерә түгелме?**

-Бик дөрөҫ әйтәһегеҙ, режиссер-актер-драматург һәм спектакль өсөн яуаплы башҡа белгестәр түңәрәгендә профессиональ тәнҡитсе лә мотлаҡ булырға тейеш. Бөгөнгө көндә республика театрҙарындағы спектаклдәрҙе баһалаусы берҙән-бер тәнҡитсебеҙ Һөйөндөк Сәхи улы Сәйетов бер үҙе был эште башҡарып өлгөрмәй. Ҡыҙыҡһынған яҡ булараҡ, үҙебеҙ ҙә был эшкә әһәмиәт бирер еткермәйбеҙ икән. Өфө дәүләт сәнғәт академияһы тәнҡитселәр әҙерләп сығара, театрҙар уларҙы үҙҙәре йәлеп итергә тейеш. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, төрлө фестивалдәрҙә ҡатнашырға ынтылыуыбыҙ ана шул үҙебеҙҙең эшкә ниндәйҙер баһа алырға тырышыу менән дә бәйле. Әгәр ҙә фестиваль халыҡ-ара кимәлдә үткәрелә икән, унда ҡатнашыусы спектаклдәрҙе мотлаҡ рәүештә Мәскәүҙән, Санкт-Петербургтан килгән белгестәр анализлай. Театрға ситтән тәнҡитсе саҡырыу тәжрибәһе лә бар беҙҙең, үткән миҙгелдә бик шәп режиссер һәм тәнҡитсе Олег Лаевский башҡорт һәм рус труппаларының икешәр спектаклен ҡарап, баһалап ҡайтты.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө дөйөм компьютерлаштырыу, интернет һәм күңел асыу шоуҙары быуатында республиканың Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры һаман да режиссура, драматургия, актер оҫталығы өлкәһендә эҙләнеүҙәр юлында. Театр бөтөнләй икенсе ҡиммәттәр менән йәшәүсе йәш тамашасы талаптарына ла ҡолаҡ һала, тик шул ваҡытта юғары тойғолар һәм романтик мөнәсәбәттәр хөкөм һөргән сәнғәткә тоғро ҡала белә.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КҮҢЕЛГӘ ЯТМАҒАН ЭШ...
## мейегә зыян килтерә

■ Стресс һөҙөмтәһендә организмдан бүленеп сыҡҡан химик берләшмәләр мейе туҡымалары өсөн зарарлы. Шуға ла стресс тәьҫирендә мейе кибеүе һәм хатта кешенең аҡылына зыян килеүе ихтимал, ти табиптар. Мейе өсөн ҡурҡыныс тыуҙырыусылар исемлегенә яратмаған кеше менән ғаилә ҡороп йәшәү, йәрәхәт алғандан һуң килеп тыуған ситуациялар, шулай уҡ перспективаһыҙ эш тә инә. Тап улар мейе күҙәнәктәрен үлтереүсе кортикостероидтар барлыҡҡа килтерә. Кортикостероидтар киҫкен хәлдәрҙә иммун системаһын баҫа һәм ҡан әйләнешендә шәкәр тупланыуын арттыра. Бигерәк тә кортикостероидтарҙың тәьҫиренә мейенең хәтерләүҙәр формалаштырыу менән бәйле өлөшө - гиппокамп тиҙ бирешә.

■ АҠШ-та үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡарбуз атеросклероз үҫеше хәүефен кәметә. Кентукки университеты сысҡандарҙа һынау үткәреү өсөн уларға юғары холестеринлы аҙыҡ ашатҡан. Шул уҡ ваҡытта бер төркөм сысҡандарға ҡарбуз һуты эсергәндәр, икенселәре ябай һыу эскән. Һигеҙ аҙна үткәндән һуң ғалимдар сысҡандарҙың ауырлығын үлсәгән һәм килеп сыҡҡан һөҙөмтәләрҙе сағыштырған. Ҡарбуз һуты эскән сысҡандарҙың ауырлығы кәмерәк, уларҙың ҡан плазмаһындағы холестерин күләме лә әҙерәк булған.

■ Мичиган университеты ғалимы Джэйсон Моузер кешеләр үҙҙәре яһаған хатаны төрлөсә ҡабул итеүен асыҡлаған. Эксперттар раҫлауынса, үҙенең хатаһында нимәгәлер өйрәнәм, тип уйлаусы кешеләрҙең аҡыл ҡеүәһе күпкә үҫешкән була, улар яңылышыуҙарҙы һәм хаталарҙы ла еңелерәк ҡабул итә. Тормоштағы һәр осраҡтан ниндәйҙер һабаҡ алырға ынтылыусыусылар, әгәр ҙә хәл ҡатмарлашып китһә, мин уны мотлаҡ хәл итәсәкмен, әммә бер нәмә лә килеп сыҡмаһа, был проблеманы аңларға тырышасаҡмын, тип уйлай. Ә бына тағы ла аҡыллыраҡ була алыуҙарына ышанмағандар бер ҡасан да үҙҙәренең шәхси тәжрибәһе менән ҡуллана һәм үҙ хатаһында өйрәнә алмаясаҡ.

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре энергетик эсемлектәрҙең хәүефле булыуы тураһында күптән белдергәйне. Беренсенән, был эсемлектәрҙең составында шәкәр күп күләмдә була. Шәкәрҙең тәүлегенә тәҡдим ителгән нормаһы 22 грамм булһа, энергетик эсемлектәрҙә уның күләме 102 грамға етә. Икенсенән, уларҙың составындағы кофеин, таурин, женьшень ҡан баҫымын күтәрә һәм йоҡоһоҙлоҡҡа килтерә. Әммә бының менән генә энергетик эсемлектәрҙең зыяны бөтмәй: уларҙы ҡулланыу тахикардия, тын алыу менән бәйле проблемаларға, эпилептик өйәнәк, аритмия, аллергия, хатта үлемгә килтереүе ихтимал. Мәҫәлән, Францияла энергетик эсемлектең дүрт банкаһы 18 йәшлек спортсыны үлтерә.

■ Калифорнияның Stroma Medical ойошмаһы докторы 20 минутта күҙҙәрҙең төҫөн үҙгәртеү ысулын уйлап тапҡан. Был технология Lumineyes тигән атама алған. Уның нигеҙендә һоро күҙҙәрҙе зәңгәргә әйләндереүсе лазер ята. Лазерҙың энергияһы күҙҙәрҙең өҫкө төҫлө ҡатламынан һоро пигментты алып ташлай, һөҙөмтәлә, 2-3 аҙна эсендә унда зәңгәр төҫ тула. Процедураның бер кире яғы бар: күҙҙәрҙең элекке төҫөн ҡабат ҡайтарып булмаясаҡ.

ҒАИЛӘ ҠОРО

**Гәзитебеҙҙең 2011 йыл өсөн сығарылған стена календарендәге бәләкәс кенә мөләйем ҡыҙсыҡты юллап килгәйнек беҙ был ғаиләгә. Әбйәлил районында үткән һабантуйҙа осраҡлы ғына төшөрөп алынған фотолағы был сабый һуҡҡан балаҫтары, ағастан һырлап эшләнгән һандыҡтары, йорт йыһаздары һәм башҡа ҡул эштәре менән хатта Мәскәүҙең үҙендә ойошторолған күргәҙмәләргә барып еткән Рәсимә апай менән Ҡотдос ағай ҺИБӘТОВтарҙың ейәнсәре Наҙгөл булып сыҡты. Әбйәлил районының Яңауыл ауылында йәшәүсе Һибәтовтарҙы район халҡы хеҙмәт яратыусы ғаилә булараҡ белә. Һабантуй булһынмы, башҡа берәй байраммы, тирмә ҡора һалып, үҙҙәренең ҡуҙ нурҙары түгеп эшләнгән ҡаралты-йыһаздарын теҙеп, балаҫ-юргандарын өйөп тә ҡуя улар. Оло булыуҙарына ҡарамаҫтан, дәрттәре ташып торған хеҙмәт ветерандары Рәсимә апай менән Ҡотдос ағайҙың тормош юлын яйлап ҡына һүтеп, уларҙың ғаилә йолалары, бала тәрбиәләү серҙәре тураһында һөйләшеп алдыҡ.**

# УҢҒАН ҠАТЫН...
## бала таба, ирен баға

**➔ Ҡотдос ағай, Рәсимә апай, һеҙҙе районда ишле балалар үҫтергән ғаилә итеп беләләр, нисәү инде улар? Ейән-ейәнсәрҙәрҙе һынарға ҡул бармаҡтары ла етмәй торғандыр…**

**Ҡотдос ағай:** Туғыҙ балаға атай-әсәй булырға насип итте Хоҙай, бөгөнгө көндә уларҙың етәүһе иҫән-аман. Дүрт ҡыҙыбыҙ, өс улыбыҙҙың һәр береһе йорт төҙөп, айырым йәшәйҙәр. Йорт һалырға бер ҡасан да аптырап торманыҡ, малайҙар кәләш алмаҫ борон уҡ йорт һалып ҡуя инек тә, килен төшөргәс тә, йәштәрҙе әҙер өйгә айырым сығара ла ебәрә инек. Атай менән әсәй балаларын өйлө итергә тейеш, тигән яҙылмаған ҡанун халҡыбыҙҙа электән бар. Кейәүҙәргә лә йортто бергәләшеп эшләштек.

**Рәсимә апай:** Шуға ла, килен йомошап, рәхәтләнеп ултырманым мин, тип шаяртып алам ҡайһы саҡта. Үҙем ҡәйнә менән дүрт йыл бергә йәшәнем. Колхоз эшендә күп йөрөгәс, ҡәйнәм мине лә әллә ни йомошай алмағандыр инде ул.

Балаларыбыҙҙың барыһы ла үҙебеҙҙең районда, берәүһе лә ситкә сығып китмәне, бер күрергә зар-интизар булып ултырмайбыҙ - шуныһы менән беҙ бигерәк бәхетле. Яйы сыҡҡан һайын үҙҙәре лә тиҙ генә килеп, хәл белешеп, ярҙамлашып өлгөрә. Иң өлкән улымдың балалары дүртәү. Сәғиҙәнеке - өсәү, кейәү менән хәҙер үҙҙәре олатай-өләсәй булып, ейәнсәр һөйөп ултыралар. Юлай улымдың ике улы бар, уларҙың ҡайҙа һәм ниндәй һөнәр алыуын белмәйем дә, иҫләп тә бөтә алмайым. Файза ҡыҙым Таштуй ауылы мәктәбендә уҡыта, ике малай тәрбиәләй. Илүзәлә - өс малай, бер ҡыҙ. Ысынлап та, ейән-ейәнсәрҙәрҙе һанай башлаһаң, хатта ҡулдарыңдағы бармаҡтарың да етмәй! Азамат улым да үҙебеҙҙең ауылда йәшәй, уларҙың балалары биш бөртөк кенә. Киленем йәш булһа ла, бик уңған, Президент ҡулынан "Әсәлек даны" миҙалын да алып ҡайтты. Наҙгөл уларҙың ҡыҙы. Ҡатындың ниндәй булыуы бала тапҡанда һәм тәрбиәләгәндә күренә инде ул. Иң кесе ҡыҙыбыҙ Айгөл ике малай үҫтерә. Балаларыбыҙ бер-береһе менән аралашып, татыу йәшәйҙәр.

**➔ Күп балалы ғаиләлә, ғәҙәттә, балалар татыу була, бер-береһен ҡарап үҫтерешә. Шулай ҙа бындай матур, күркәм холоҡло балалар тәрбиәләүгә нисек өлгәшә алдығыҙ? Төп тәрбиә ҡанунығыҙ ниндәй булды?**

**Рәсимә апай:** Икебеҙҙең дә белемебеҙ юҡ, шуға балаларҙы уҡытырға тырыштыҡ. Көн һайын мәктәптән ҡайтһалар, көндәлектәрендәге билдәләрен ҡарап сығам һәм үҙемсә уларға билдә ҡуям: кемдең "бишле"ләре, "дүртле"ләре күберәк, уларҙы тәмлекәстәр менән һыйлайым. Бөгөн кәнфит кеүек татлы нәмә ашай алмаған балам иртәгеһенә яҡшы билдә алып ҡайта. Хәҙер ғилем көслө, йәштәр тәрбиә ысулдарын китаптарҙан уҡып өйрәнә. Шуға ла, бәлки, минең был тәрбиә ысулым дөрөҫ тә булмағандыр, тип уйлайым, шулай ҙа үҙемсә тырыштым инде. Балаларҙы теҙеп ултыртып ҡуям да, дәрестәрен эшләтәм, ҡысҡырып китаптар уҡытам. Йорттағы ҡырылмаһа ҡыҙ эшем көтөп ятһа ятты, әммә балаларҙы дәресенән айырып, эшкә ҡушманым.

**Ҡотдос ағай:** Мин балаларҙың үҫкәнен күрмәнем, тип әйтһәм дә хата булмаҫ. Балалар үҫтергән саҡта колхоздың гөрләп торған сағы ине бит. Ул заманда иген баҫыуҙары диңгеҙ булып сайҡалып, елгә шаулап ултырыр ине. Механизатор булғас, эштән балалар йоҡлап бөткәс ҡайтам, иртәнсәк улар уянып өлгөрмәҫ элек эшкә китә инем.

**Рәсимә апай:** Аталары гел эштә булып, балалар уны һирәк күрһә лә, ғаиләлә гел атай абруйы булды. Балалар эш һөйөп үҫте. Элек ни, бала-саға мәктәптә уҡыған сағынан уҡ колхоз эшенә йөрөй торғайны. Ҡыҙҙар колхоз һыйырҙарын һауҙы. Малайҙар гел генә яҙғы сәсеү, көҙгө урыу



✓ *Эштәрегеҙ ауыр барғанда, рухи "тиҙ ярҙам"ға мөрәжәғәт итеү ҙә етә. Быный өсөн телефонға түгел, ә һүҙҙәргә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ул - "ом" тигән өн (ул һуҙып, о-о-о-м-м-м тип әйтелә).*



ваҡытында комбайнда аталарына ярҙам итә торғайны, йәйге каникул мәлендә лә аталары менән бергә эшләп, баҫыуҙан ҡайтып инмәнеләр.

**Ҡотдос ағай:** Ул ваҡытта кешелә ярыш сәме көслө була торғайны. Кем күберәк иген ура, уның комбайнына йондоҙ баҫып баралар һәм аҙаҡтан һанайҙар ҙа, еңеүсене билдәләйҙәр. Шуға балаларҙы ла эштең ана шул ярыш сәме тыуҙырыуы ҡыҙыҡтыра торғайны.

**Рәсимә апай:** Мин үҙем дә балалар ишәйгәнсе эшләнем тракторҙа, сиҙәм күтәреүҙә ҡатнаштым. Балаларҙың ике өләсәһе булғас, ҡалдыра ла китә инем. Тәүҙә тәгәрмәсле тракторҙа йөрөнөм, уның тәгәрмәсе тимерҙән була торғайны, ярылмай ҙа, боҙолмай ҙа, бер нәмәгә лә бирешмәй. Аҙаҡ махсус курста уҡып ҡайтҡас, ДТ-50 тракторы биреп ҡуйҙылар. Ул ваҡытта беҙҙең колхозда ҡатын-ҡыҙҙар араһында тракторсылар булманы, прицепщиктар була торғайны.

**➔ Ҡотдос ағай менән ҡауышыу тарихығыҙ нисек булды?**

**Рәсимә апай:** Икебеҙ бер эштә эшләйбеҙ, бер ауылданбыҙ, әммә аралашып бармай торғайныҡ. Уның әсәһе йомош табып, беҙгә гел ингеләп йөрөнө, минән күлдәк, камзулдар тектергән була - йәштән бик тегергә яраттым мин. Шул рәүешле мине һынап, ҡарап йөрөгәндер инде. Ҡул эшен күңел һалып эшләй торғайным, әле кейәүгә сыҡмаҫ элек үк кешеләргә шәл дә, балаҫ та һуғып биргеләй инем, уның араһында ауыл ҡатын-ҡыҙҙарына кейем дә тегәм. Эштән кеше үлмәй, тик быларҙың барыһына ла нисек өлгөргәнмен, хәҙер шуныһына аптырайым. Ә миңә яусы килгәндә Ҡотдос үҙе хатта өйҙә лә булмай ҡалған. Яусылар мине әйттереп, никах уҡытып ҡайтҡанда, ул Сибай яғында урманда эштә йөрөгән.

**➔ Яусылар һеҙҙән ризалыҡ һорanылармы һуң, Рәсимә апай? Әллә ололар үҙҙәре генә хәл итте лә ҡуйҙымы?**

**Рәсимә апай:** Ҡайҙан ризалыҡ һораһындар инде! Ул ваҡытта шулай башлы-күҙле итә лә ҡуялар ине. Ағайығыҙ менән бергә йәшәгәнебеҙгә 56 йыл тулды. Бик татыу йәшәнек, һәйбәт балалар үҫтерҙек. Алдан вәғәҙәләр бирешеп йөрөмәһәк тә, үҙебеҙсә бер-беребеҙҙе яратҡанбыҙҙыр инде. Ул саҡта газ юҡ, үҙем эшләмәгән сағымда төнө буйы самауырҙы һыуытмай, иремде эштән көтөп ултыра торғайным. Йәйге төн ҡыҫҡа, таң тиҙ ата. Һәр механизаторҙың комбайны ла, тракторы ла өйө эргәһендә тора торғайны. Таң һыҙыла башлау менән яғыулыҡ ташыусы механизаторҙарҙың өйө һайын йөрөп, уларға яғыулыҡ тарата. Төнө буйы эшләп, таң алдынан ғына ҡайтып ятҡан иремде уятырға йәлләп, үҙем тороп, комбайнға яғыулыҡ ҡоям, май-фәлән алып ҡалам. Үҙем тракторсы булғас, беләм бит инде, ҡайһы саҡта комбайнын йәки тракторын майлап та ҡуям. Бына шулай, ул тороуға "ат" егелгән була!

**Ҡотдос ағай:** Таңғы өстәргә, дүрттәргә тиклем эшләй торғайныҡ баҫыуҙа. Хәҙер кеше, эш юҡ, тип тик ултыра. Ул ваҡыттарҙа ҡатын-ҡыҙҙар бесәнен дә сапты, колхоздың башҡа эшен дә эшләне. Йыл һайын сөгөлдөр бүлеп бирә торғайнылар, балалар менән Рәсимә шуны утап, көҙөн тапшыра торғайнылар. Өйҙә лә баҡса үҫтерҙек. Кишер, помидор, картуф, ҡыяр ултырта инек, уларҙы ҡарау, һыу һибеү, сүбен утау балалар иңендә булды.

**Рәсимә апай:** Йәштән йыл буйына ғаиләбеҙҙе туйындырырлыҡ йәшелсә үҫтерергә ғәҙәтләнгәнбеҙ, әле һаман баҡса үҫтерәбеҙ. Магазинға тоҙ йәки сәй алырға ғына йөрөйөм мин, ҡалғаны барыһы ла баҡсала үҫә. Күпләп мал да тотабыҙ, ауылда йәшәп тә һөтөң-ҡаймағың, һуғымға итең булмаһа, кешенән оят таһа! Быға тиклем һыйырым алтау ине, хәҙер - дүртәү. Ваҡ малыбыҙ байтаҡ. Балалар килһә, ҡаҙанға ярты һарыҡ түшкәһе төшөп китә. Ҡыҙҙар ҙа, килендәр ҙә уңған, тиҙ генә бишбармағын әҙерләй һала. Шулай, балаларҙы ҡунаҡҡа саҡырабыҙ ҙа, үҙебеҙ бабай менән түргә менеп ултырып, ҡунаҡ булып ҡалабыҙ, сөнки балалар ҡулға эш тә тейҙермәй. Йыйыштырып, һауыт-һабаны урынына ҡуйып ҡайтып китәләр. Бер ваҡытта ла кешенән ризыҡ ҡыҙғанырға ярамай, ни тиклем башҡаларҙың күңелен күреп торһаң, Аллаһы Тәғәлә үҙеңә шул тиклемен биреп тора. Минең атайымдың атаһы менән әсәһе динле кешеләр ине. Бына был һабаҡты минең күңелемә улар һеңдергән. Әсәйемдең ата-әсәһе коммунист булһа ла, дини йолаларҙы үтәп, ураҙа ваҡытында ауыҙ астырырға кеше саҡыра инеләр. Балалар бәләкәй саҡта урындыҡҡа табаҡ менән бишбармаҡ ултыртам да, күңелле итеп ашай торғайныҡ. Быйндай табындар үҙе үк балалар араһында туғанлыҡ хисен нығытҡандыр. Хәҙер үҙем дә ураҙа ла тотам, намаҙ ҙа уҡыйым, ҡот та ҡоям, имләйем дә.

**➔ Һеҙ хеҙмәт иткән, балалар үҫтергән йылдарҙа бөтөнләй икенсе ижтимағи ҡоролош ине, ә хәҙер бына бер нисә тиҫтә йыл үҙгәрештәр осоронда, баҙар иҡтисады хөкөм һөргән заманда йәшәйбеҙ, тәрбиә ҡанундары ла үҙгәрә төштө. Ошо үҙгәрештәргә бәйле бөгөн тормошобоҙҙа һеҙҙең эсегеҙҙе бошорған күренештәр бармы?**

**Ҡотдос ағай:** Беҙҙең быуын кешеләренең күбеһе совет ҡоролошон һағына инде ул, элек яҡшыраҡ та йәшәгән кеүекбеҙ. Хәҙер кеше шул тиклем әҙергә өйрәнгән, үҙе ҡыл ҡыбырлатырға ла йыбана. Эшләгән кеше менән эшләмәгән кеше араһында айырма күрә белмәйҙәр. Элек беҙҙең йәшәүебеҙҙең төп мәғәнәһе хеҙмәт булһа, хәҙер иң мөһим урынға матди етешлекте, аҡсаны ҡуялар. Әүәле эшләгән кешегә хөрмәт була торғайны. Мәҫәлән, тырыш хеҙмәтем өсөн районда тәүгеләрҙән булып мин машиналы булдым. Уныһы ла бәләкәй генә "Запорожец" ине, шуны бар ауыл халҡы күрергә килде. Хәҙер ана ниндәй шәп сит ил машиналарында йөрөйҙәр, тик машинаһының баһаһы ла, ҡәҙере лә юҡ һымаҡ.

**Рәсимә апай:** Ял итергә санаторийҙарға, ял йорттарына йөрөй ала инек, ҡайҙарҙа ғына булманыҡ. Хәҙер ауыл кешеһе үҙенең районында урынлашҡан санаторийға ла бара алмай, сөнки аҡсаһы юҡ. Ленин, "Хеҙмәт даны" ордендары ла алды бабай. Машина тигәндән, ул машиналарҙа күберәк мин йөрөнөм. Хәҙер ҡатын-ҡыҙҙың машина йөрөтөүенә берәү ҙә аптырамай, күҙ өйрәнеп бөткән, ул саҡта инәйегеҙ районға берәү булғандыр әле! Бабай баҫыуҙа башҡа механизаторҙар менән ярышып ер һөрә. Ашарға бешереп алам да, "Жигули"ға ултырып, баҫыуға китәм. Иремдең тракторы баҫыуҙан килеп сыҡҡас та, ашты ергә ултыртам һәм ул ашап алғансы, мин трактор менән ер һөрә торам. Ул машинаның файҙаһы ана шунда булды.

**Ҡотдос ағай:** Тормошто тотоп торған ҡиммәттәр, баһалар үҙгәргәс, борондан килгән ғаилә ҡоролошо ла үҙгәрҙе. Беҙҙең ауылда өйләнмәгән буйҙаҡ егеттәр байтаҡ. Бер ҡайҙа ла эшләмәйҙәр, эшләмәгәс, аҡсалары ла юҡ. Шуға ла аталарынан ҡалған йорт-ҡуралары ла һүтелеп-ҡыйралып бөтөп бара. Үҙеңдең шәхси хужалығыңдан ғына әллә күпме файҙа күрергә була ла бит! Эштең ояты юҡ, Магнитогорск ҡалаһы эргәлә генә, бар ҙа сауҙа ит. Бына беҙҙең ҡыҙҙар үҙҙәре эшкәрткән май-ҡаймағын шунда алып барып һатып аҡса эшләй.

**➔ Халҡыбыҙҙа "Атаһы өй һалған - улы йылынған, әсәһе киндер һуҡҡан - ҡыҙы кейенгән", тигән мәҡәл бар. Һеҙҙең ҡул йылыһын һеңдереп үҫкән балаларығыҙ ҙа ҡул эшенә оҫталыр, моғайын?**

**Рәсимә апай:** Балаларҙың һәр береһе ҡул эшенә оҫта. Бер нәмәне лә кеше ҡушып эшләтмәйбеҙ, үҙебеҙ эшләйбеҙ, кеше, кирәкһенсә, беҙгә йомош менән килә. Улдарыбыҙ тимерҙән, ағастан төрлө әйберҙәр яһай. Заказ буйынса мебель дә, һандыҡ та яһап бирәләр. Бәйләнгән, сигелгән кейем-һалым, шәл, йорт ҡаралтыларын һораусылар күп. Үҙ ғүмеремдә балаҫты күп һуҡтым. Ул ваҡытта балаҫ өсөн аҡ йөн табып булмай торғайны, кеше малды әҙ тота торғайны. Балаҫ һат, тип килеүселәр бар, уны һатып, аҡсалы булып китәмме ни, һатмайым. Ана, уларҙы һандыҡҡа тәҫләп һалып ҡуйғанмын, кем булһа ла тотонор әле. Хәҙер күбеһенсә селтәрҙәр эшләйем. Ҡыҙҙар менән камзулдар тегәбеҙ, шәлдәр бәйләйбеҙ, һуғабыҙ ҙа.

**Ҡотдос ағай:** Ауыл ерендә хөкүмәт түләгән аҡсаға ҡарап ятып булмай. Малайҙарҙың да, ҡыҙҙарҙың да ҡулы өҫтәмә килем алырлыҡ һөнәр белә. Ағас эше менән дә булышалар, һандыҡ, йорт йыһаздары, тәҙрә рамы, ишектәр эшләйҙәр.

**Рәсимә апай:** Балаҫ һуға торған станокты ағайығыҙ күсереп йөрөтөргә ҡулайлыраҡ итеп тимерҙән эшләп бирҙе. Юғиһә, күргәҙмәләргә күп йөрөйбөҙ бит. Саҡырған ерҙән баш тартып тормайбыҙ.

**Ҡотдос ағай:** Яңыраҡ ҡына яңы йорт һалып сыҡтыҡ. Күмәк көс менән ике айҙа эш иттек. Элеккеһе лә һәйбәт ине, әле кирбестән һалдыҡ, үлеп китһәк, туҙып ултырмаһын.

**Рәсимә апай:** Ейәндәргә лә йорт һалырға ярҙам итербеҙ әле. Пай ерҙәре лә алдыҡ, шуға алдағы көнгә пландарыбыҙ ҙа елле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йорт-ҡуралары ла төҙөк, күңелдәре лә бөтөн булған Һибәтовтарға ҡарап, бала тәрбиәләгәндә ата-әсә өлгөһөнән дә олораҡ мәктәп юҡ икәненә төшөнһәң, тәрбиә нигеҙендә хеҙмәт ятҡанда ғына тормошта уңыш ҡаҙанырға мөмкин икәнлегенә тағы бер тапҡыр инанаһың. "Дандың төбө - хөрмәт, хөрмәт төбө - хеҙмәт", ти халыҡ. Уңған булыуҙары һөҙөмтәһендә эшле лә, ашлы ла, ауылдаштары һәм райондаштары араһында хөрмәтле булған балаларына ҡарап, Рәсимә апай менән Ҡотдос ағайҙың да тормошо түңәрәк. Олоғайған көнөндә ата-әсә өсөн ошонан да ҙурыраҡ бәхет был донъяла юҡтыр ул.**

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Еңел булмағанда ла, нисек маҡсатҡа өлгәшергә?

Эштәр ауыр барғанда, кеше үҙе лә ауырға әйләнә, тиҙәр. Шуға ла ҡатылыҡтан, рәхимһеҙлектән арынырға тырышығыҙ.

Һеҙгә үҙегеҙҙе ҡаты кеше тип иҫәпләргә кәрәкмәй. Рәхимһеҙлек саманан артыҡ бешелекте, һәлмәкләнеүҙе аңлата. Ошоға тиклем һеҙ ыңғай өндәге-төштәр күрҙегеҙ, башҡаларға ярҙам иттегеҙ, Илаһтың теләге - рәхимһеҙлегегеҙ кәмене, аң-зиһенегеҙ яҡтырҙы.

Эштәрегеҙ ауыр барғанда, рухи "тиҙ ярҙам"ға мөрәжәғәт итеү ҙә етә. Быный өсөн телефонға түгел, ә һүҙҙәргә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ул - "ом" тигән өн (ул һуҙып, о-о-о-м-м-м тип әйтелә). Уның көсө нимәлә? Әгәр беҙ йыһан шауын тыңлай алһаҡ, ул тап шулай ишетелер ине. Был һүҙҙе ҡабатлау йыһан тауышына яҡынайыуҙың иң яҡшыһы. Был тауышҡа бөтөн нәмә яуап бирә. Үҙегеҙ ҙә тикшереп ҡарай алаһығыҙ: кемдер "ом" тип ҡабатлағанда ҡулдарығыҙҙы ус яғы менән аҫҡа ҡаратып ҡуйығыҙ. Устарығыҙҙа тирбәлеш һиҙәһегеҙ - тән шулай итеп был тауышҡа яуап бирә.

Түбәндәге күнекмәне үтәп, үҙенсәлекле тауышты буйһондорорһоғоҙ һәм күҙгә күренмәҫ терәк табырһығыҙ:

**Нисек "ом" хакимлығына эйә булырға?**

- Проблемаларығыҙҙы хәл итеүгә бағышланған өндәге-төш сеансы алдынан күҙегеҙҙе йомоп, өс тапҡыр һуҙып "ом" тип ҡабатлағыҙ.
- Проблемаларҙы хәл итеү буйынса өндәге-төш ваҡытындағы аҙымдарығыҙҙы баһалағанда, ғәҙәттә, уйҙағы өс образ ҡулланыла.
- Ваҡиғаларҙың һеҙ теләмәгәнсә хәл ителеүен ситтән күҙәтегеҙ. Тап проблема шунда икәненә баҫым яһау өсөн картинаны ҡараңғылатығыҙ йәки уйығыҙҙа ғына уға ҡара тәре ҡуйығыҙ.
- Проблеманы хәл итеүгә йәки билдәләнгән маҡсатҡа өлгәшеүгә йүнәлтелгән ниндәй аныҡ эштәр башҡарыуығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Башығыҙға нимә килә, шуны эшләүсе итеп күҙаллағыҙ. Әгәр нимә эшләргә белмәһәгеҙ, түбәндә яҙылған йүнәлеште үҙгәртеү техникаһын ҡулланығыҙ.
- Уйығыҙҙа ғына проблема хәл ителгән, маҡсатҡа өлгәшелгән тип күҙаллағыҙ.

Йүнәлеште үҙгәртеү техникаһы проблеманы хәл итеү йәки маҡсатҡа өлгәшеү өсөн нимә эшләргә кәрәклегенә тиҙ яуап алыу өсөн файҙаланыла. Үҙегеҙҙе илһам сығанағы булып бер стакан һыу, бер сынаяҡ кофе йәки көнөнә бер нисә тапҡыр ҡулланған шыйыҡлыҡ тора икәнлегенә программалағыҙ. Мәҫәлән, үҙегеҙгә: "Һәр стакан һыуҙы эскән һайын мин нимә эшләргә икәнлеген асығыраҡ аңлайым", - тиегеҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 21 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Предел желаний", 1-я серия
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фурцева", 5-я серия
22.25 "Судьба на выбор"
23.30 "Познер"
00.35 Ночные новости
00.45 "Форс-мажоры", 9-я серия
01.40, 03.05 "Ушедшие". Драма
03.00 Новости
04.10 "Участковый детектив"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 185-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 215-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 31-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-10". Сериал
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Дежурный по стране"
00.40 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Излечить Гориллу". Детектив
04.10 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное произшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
21.30 "Пятницкий". Криминальный сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "В зоне особого риска"
02.20 "Один день. Новая версия"
03.00 "Ставка на жизнь". Остросюжетный сериал
04.50 "Сыщики". "Король джунглей". Детективный сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 00.00 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 00.15 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Новости недели"**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Бахетнама"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Он не был только антропологом…" К 60-летию со Дню рождения Р. М. Юсупова**
**17.15 "Надо знать!"**
**18.05 "Еду я в деревню"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Следопыт"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.15 "Пора разобраться"**
**00.30 Песни на стихи Зухры Алтынбаевой**

## 22 НОЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
07.05 "Выборы-2011" (по окончании - телеканал "Доброе утро")
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Предел желаний", 2-я серия
18.00 Вечерние новости
18.25 "Выборы-2011"
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фурцева", 6-я серия. Биографическая драма
22.30 "Среда обитания"
23.30 Ночные новости
00.00 "terra nova", 9-я серия
00.55 "Пятое измерение"
03.00 Новости
03.05 "Пикник"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Выборы-2011"
12.55 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 186-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 216-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 32-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-10". Сериал
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Ликвидация", 9-я серия
00.40 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Глаза незнакомца"
03.55 "Комната смеха"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
20.30 "Настоятель". Драма
22.25 "Сегодня. Итоги"
22.45 "Футбол. Лига чемпионов УЕФА. ЦСКА (Россия) - "ЛИЛЛЬ" (Франция). Прямая трансляция
00.55 "Формат А4". "Разбитая чашка". Сериал
02.00 "ГРУ. Тайны военной разведки"
02.55 "Кулинарный поединок"
03.55 "Спасатели"
04.25 "Сыщики". "Шерше ля бабу"
05.25 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Пора разобраться"**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Башкорт йыры"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Борсак"**
**16.00 "Байтус"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**17.00 "Взгляд без слов"**
**18.30 Новости "(на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**18.45, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Действующие лица"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 С торжественного заседания, посвященного Дню работников сельского хозяйства и перерабатывающей промышленности**
**23.00 Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
00.15 "Песнь моя неспетая"

## 23 НОЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
07.05 "Выборы-2011" (По окончании - телеканал "Доброе утро")
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Предел желаний", 3-я серия
18.00 Вечерние новости
18.25 "Выборы-2011"
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фурцева", 7-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Ночные новости"
00.00 "Убийство", 9-я серия
01.05 "Суперпес"
02.35, 03.05 "Дикие штучки-2"
03.00 "Новости"
04.25 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Выборы-2011"
12.55 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 187-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 33-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-10". "Кто старое помянет". Сериал
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Ликвидация", 10-я серия
00.40 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Горячая десятка"
03.15 "Вмешательство". Драма

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей"
21.30 "Пятницкий". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Формат А4". "Один пишем, два в уме"
00.35 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
01.15 "Квартирный вопрос"
02.20 "Один день. Новая версия"
03.00 "Ставка на жизнь"
04.55 "Сыщики". "Знание умножает скорбь"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Борсак"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Действующие лица"**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45, 17.15 "Дело мастера"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Байык"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семер"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 "Загадка Альбанова"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Пора разобраться"**
**00.15 "Песнь моя неспетая". З. Исмагилова. II часть**

## 24 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Предел желаний", 4-я серия
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фурцева", 8-я серия
22.30 "Александр Масляков. 70 - не шутка, 50 - шутя"
23.30 Ночные новости
23.55 "Подпольная империя"
01.00, 03.05 "Крадущийся тигр, затаившийся дракон". Боевик
03.00 Новости
03.20 "В паутине закона"
04.10 "Участковый детектив"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Выборы-2011"
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 188-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 34-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-10". Сериал
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Ликвидация", 11-я серия
00.40 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Револьверы"
04.00 "Комната смеха"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей"
21.30 "Пятницкий". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Формат А4". "Вопреки правилам"
00.35 "Женский взгляд"
01.20 "Дачный ответ"
02.25 "Один день. Новая версия"
03.05 "Ставка на жизнь"
04.55 "Сыщики". "По трамвайному билету"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Тамле" (на русск. яз.)**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Пора разобраться"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Книга сказок"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Глас закона"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Пятый угол"**
**00.15 Концерт, посвященный 95-летию З. Исмагилова и открытию II Международного конкурса музыкантов-исполнителей им. З. Исмагилова. I часть**

## 25 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Поле чудес"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Достояние Республики"
00.00 "Провинциалка". Комедия
01.50 "Преследование"
03.45 "Давай сделаем это легально"
05.15 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.00 "Мусульмане"
09.10 "С новым домом!"
10.05 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Выборы-2011"
13.00 "Мой серебряный шар"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 189-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 35-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала-2011"
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Одинокий ангел". Мелодрама
01.40 "Полтергейст". Триллер
04.00 "Мой серебряный шар"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт"
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей"
21.30 "Необыкновенный концерт" с Максимом Авериным
22.40 "Казнокрады"
23.35 "Ультиматум Борна". Триллер
01.50 "Еще раз про любовь..."
02.40 "Ставка на жизнь"
04.30 "Сыщики". "Как хорошо быть генералом"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Царь горы"**
**16.45 "Автограф"**
**18.05 "Йома"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 Концерт, посвященный 95-летию З. Исмагилова и открытию II Международного конкурса музыкантов-исполнителей им. З. Исмагилова. II часть**

## 26 НОЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.45, 06.10 "Черные береты"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Высоцкий. "Где-то в чужой незнакомой ночи..." Док. фильм
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Среда обитания"
13.25 "Новый "Ералаш"
14.10 "Титаник". Мелодрама
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.20 "Большие гонки"
21.00 "Время"
21.15 "Болеро"
22.45 "Прожекторперисхилтон"
23.20 "Я, робот". Фантастика
01.30 "451 градус по Фаренгейту". Фантастика
03.40 "Кома"
05.00 "В паутине закона"

### РОССИЯ 1
04.50 "Сумка инкассатора"
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Вести-Башкортостан"
08.20 "Выборы-2011. Дебаты"
09.15 "Военная программа"
09.35 "Городок. Дайджест"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив"
12.25 "Подари себе жизнь"
12.55 "Сваты-3". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Сваты-3". Комедийный сериал
16.30 "Субботний вечер"
18.25 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
19.25 "Бабушка на сносях". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Бабушка на сносях". Мелодрама. Продолжение
00.10 "Девчата"
00.45 "Как малые дети". Драма
03.30 "Каникулы в Вегасе"

### НТВ
05.30 "Аэропорт". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.20 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Дорожный патруль-4". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Таинственная Россия"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа Максимум. Расследования, которые касаются каждого"
20.55 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Последнее слово"
00.00 "Вопрос чести". Криминальная драма
01.50 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
02.25 "Дорожный патруль-4"
04.15 "Кремлевская кухня"

### БСТ
**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро"**
**08.00 "По Аксаковским местам"**
**08.30 Мультфильм**
**09.45 "Надо знать!"**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Дело мастера"**
**13.00 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**13.30 "Взгляд без слов"**
**13.45 "Весело живем"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 Народный писатель. Юбилейный вечер Н. Асанбаева**
**17.15 "Хазина". Гала-концерт конкурса им. А. Искужина**
**18.45 "Замандаштар"**
**19.15 "Дарман"**
**20.00 "Башкорттар"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Парад планет"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Башкорт йыры"**
**22.30 Деловой Башкортостан"**
**23.00 "Муз-базар"**
**23.30 КВН. Высшая Уфимская лига. Полуфинал**

## 27 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Две сказки". Мультфильм
06.25 "Гарфилд"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.25 "Дисней-клуб"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Новый "Ералаш"
13.20 "Специальное задание"
14.35 "Минута славы. Самое лучшее"
16.40 "Апельсиновый сок"
18.30 "Большая разница" в Одессе"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Мульт личности"
22.30 "Yesterday live"
23.35 "Красная звезда". Хит-парад
01.00 "Обмани меня". Сериал
03.25 "В паутине закона"
04.15 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.25 "Одиночное плавание"
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Когда растаял снег". Военный сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Когда растаял снег". Продолжение
15.45 "Смеяться разрешается"
18.00 "Стиляги-шоу с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Эта женщина ко мне". Мелодрама
23.15 "Специальный корреспондент"
23.45 "Геннадий Хазанов. Повторение пройденного"
00.15 "Последний забой". Драма
02.15 "Бегство"

### НТВ
05.10 "Аэропорт". Сериал
07.00 "В поисках Франции"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Дорожный патруль-4". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Александр Буйнов. Исповедь назло смерти"
23.00 "НТВшники"
00.00 "СССР. Крах империи"
01.10 "Братва по-французски". Криминальная драма
03.25 "Главная дорога"
04.00 "Дорожный патруль-4". Сериал

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Встреча с молодостью"**
**08.30 "Хазина"**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Автограф"**
**10.00 "Бауырсак"**
**10.10 "Городок АЮЯ"**
**10.25 "Семэр"**
**10.40 "Шатлык йыры"**
**10.50 "Шэп арба"**
**11.00 "Байтус"**
**11.15 "Сулпылар"**
**11.30 "Гора новостей"**
**11.45 "Дарман"**
**12.30 Новости**
**13.00 "Тамле"**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.40 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**16.55 Открытый чемпионат**
**16.30 "Внимание, дорога!"**
**17.00 "Дорога к храму"**
**17.30 "Деловой Башкортостан"**
**18.00 "Тарихи фараз"**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00 "Весело живем"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "Новости спорта. Итоги"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "За порогом"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык"**
**23.00 "Вечер.com"**
**00.00 "Любимые мелодии"**

## БАШ ЭШЛӘТМӘК



**Горизонталь буйынса:** 7. Тын юлының боғаҙҙан артабанғы өлөшө. 8. Мемориаль таҡта. 9. Ҡаҙаҡ бүрке. 11. Дошманға ҡиҫкен һөжүм. 12. Библиотека. 15. Ҡыҙыл кәрзин сәскәле, телгеләнгән япраҡлы болон үләне. 18. Уғары ҡорт. 19. Хәрбиҙәрҙә һаҡланыу ҡоролмаһы. 20. Музыка ҡоралы. 21. Шыйғаҡлап торған ҡуйы шыйыҡса. 23. Ниндәйҙер төҙөлөш ҡаралтыһы. 26. Сей йүкәнән аяҡ кейеме. 27. Бармаҡ араһына сыҡҡан шешек. 31. Бейеү сәнғәте белгесе. 33. Киске намаҙ. 34. Кире зарядлы электрод. 35. Сабар. 36. Күп туптан өҙләкһеҙ алып барылған атыш.

**Вертикаль буйынса:** 1. Илдең вәкәләтле үҙәк идараһы. 2. Яҡ. 3. Логика. 4. Ер аҫтындағы төрлө тәбиғи байлыҡ. 5. Йылҡы малының туҡ эсәге. 6. Наркотиктарға әүәҫләнгән кеше. 10. Текә ярлы бик тәрән сокор. 13. Таралған таусыҡтың баҫымын үлсәй торған прибор. 14. Ҡаймаҡ һалып, һөткә шыйыҡлап иҙелгән йәш ҡорот. 16. Гөлйемеш. 17. Дөрөҫлөктө күрһәткән дәлил. 22. Бергә уҡыған иптәш. 24. Осмот. 25. Иң эре быуар йылан. 28. Сит илдә (...) булғансы, үҙ илеңдә олтан бул. (әйтем). 29. Ҡолаҡтың эстән эренләп шешеүе. 30. Шәриғәт буйынса, ирҙәрәең ҡатын айырыуы. 32. Бокста өс минут.

**Фәрит РӘМОВ.**

**40-сы һандағы кроссвордтың яуаптары:**

**Яуаптар:** 1.Ҡапҡа.2. Таш. 3. Ҡаршы. 4. Урман. 5. Маңҡорт. 6. Ҡамсы. 7. Зиһен. 8. Батша. 9. Ғашиҡ. 10. Ҡатылыҡ. 11. Түңәрәк. 12. Тәбиғәт. 13. Баҡса. 14. Ҡүҙ. 15. Теләк. 16. Ҡан. 17. Йәй. 18. Тән. 19. Тел. 20. Халыҡ. 21. Хәрәкәт. 22. Нигеҙ. 23. Ҡыуыш. 24. Ҡәләш. 25. Быуын. 26. Йәм. 27. Бәхәс. 28. Тараф. 29. Нөктә. 30. Йыһан. 31. Йөрәк. 32. Ҡылыс. 33. Ҡарымта. 34. Ҡыш.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**19 ноябрь Гөлли Мөбәрәкованың** юбилей кисәһе
**20 ноябрь "Минең ғаиләм"** (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама
**25, 26 ноябрь "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим), трагедия
**27 ноябрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия
**22 ноябрь "Юл билдәләре - беҙҙең дуҫтар"**, әкиәт-әсбап. Башлана 10.00, 12.00. (Бәләкәй зал)

### М. Кәрим исемендәге Милли Йәштәр театры

**22 ноябрь "Ғимаҙи мажаралары"** (А. Әхмәтов), әкиәт. Башлана 11.00
**23 ноябрь "Ромео һәм Джульетта"** (У. Шекспир), трагедия
**24 ноябрь "Тоҡ эсендәге бесәй или Башкирская пленница"** (М. Кәрим), спектакль-концерт
**22 ноябрь "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), тамаша
**25 ноябрь "Һаумы, әсәй!"** (Г. Ғиззәтуллина), моноспектакль

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 ноябрь Әлфиә Юлсуринаның** концерты
**24 ноябрь Сибәғәт Яруллиндың** (баян) юбилей кисәһе
**25 ноябрь "Гармун байрамы"** Халыҡ инструменттарының I фестивале

## ДОНЪЯ ХӘЛДӘРЕ

# БЕҘ КӘМЕЙБЕҘ...

## ә Ер шары халҡы арта

**Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы хәбәр итеүенсә, ошо көндәрҙә ер шарында халыҡ һаны ете миллиардтан ашып киткән. Халыҡтың артыуы ыңғаймы, әллә кире күренешме?**

Демографтар иҫәпләүенсә, был хәйерселәр күбәйеүенә, ҡораллы бәрелештәргә генә килтерәсәк. БМО-ның халыҡ иҫәбен алыу фонды иһә яңылыҡты ыңғай ҡабул итә. Әшсе ҡулдар артыу менән иҡтисади үҫеш күҙәтелергә тейеш, тиелә фондтың докладында. Әммә белгестәрҙең күбеһе был фекерҙе уртаҡлашмай. Юғары иҡтисад мәктәбенең Демография институты директоры Владимир Вишневский, мәҫәлән, ярлы, тотороҡһоҙ илдәрҙән мигранттар ағыласаҡ, тигән хәүеф белдерә. Сөнки тыуым башлыса Африка һәм Азияла арта. "Мигранттар өс тарафты - АҠШ, Европа һәм Рәсәйҙе һайлай. Америка уларҙы үҙ фәнен, иҡтисадын үҫтерер өсөн файҙаланһа, Европа мигранттарға ҡаршылыҡтар ҡуйып маташа. Ә Рәсәйҙең был юҫыҡта билдәләнгән йүнәлеше юҡ. Мигранттар артҡан һайын, хәл-ваҡиғалар менән идара итеүе ҡыйынлашасаҡ. Ил биләмәһенең бер өлөшө, буш торған Себер тарафтары, көс менән яулап алыныуы мөмкин", - ти белгес. Уның фекеренсә, беҙгә Америка юлын һайларға кәрәк. Мигранттарһыҙ илебеҙҙә халыҡ һаны кәмейәсәк, үҫеш туктаясаҡ, имеш.

Ләкин Америка юлы беҙҙең өсөн яраҡлымы? Рәсәй бөтөнләй башҡа ил икәнлеген барыһы ла аңлай бит. АҠШ - тыуғандан бирле мигранттар төйәге. Шуға күрә күсеп килеүселәрҙе ҡуш ҡуллап ҡабул итеүҙәре улар өсөн тәбиғи. Ниндәй генә милләт вәкиле, халыҡ унда килеп ултырмаһын, ул американлы буласаҡ. Беҙҙә иһә рәсәйлеләр түгел, рустар, башҡорттар һәм башҡалар йәшәй. Бында ҡытай кешеһе төпләнә икән, балалары ла ҡытай булып үҫәсәк. Тимәк, халыҡ һанын мигранттар иҫәбенә арттырыу ҡитһә, киләсәктә илебеҙҙә бөтөнләй икенсе милләттәр көн күреүе ихтимал. Бөгөн Европаның сит ил вәкилдәренә ҡарашын ҡырҡа үҙгәртеүе лә ошоға бәйле түгелме?

# ЮРАУҘАР ЫШАНДЫРМАЙ...

## әммә уйландыра

**Бәғзе ғалимдар, кеше үрсеүенән киләсәктә ерҙә йәшәргә урын ҡалмаясаҡ, тип барһа, икенселәре тап киреһен һөйләй.**

Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы бөтә илдәрҙең статистик мәғлүмәттәрен өйрәнеп, киләсәккә донъялағы демографик торошто күҙаллаған. Тикшеренеүселәр тәү сиратта ҡыҙҙар һанын иғтибарға алып һығымталар яһаған. Уларҙың фекеренсә, 120 үҫешкән илдең халҡына донъя йөҙөнән юғалыу янамай. Шулай уҡ Ирландия, Яңы Зеландия, Израилгә яҡты киләсәк юрайҙар. Ә бына 73 үҫешкән илгә хәүеф янай, тип иҫәпләйҙәр. БМО күҙаллауынса, Рәсәй 2888 йылда юҡҡа сығасаҡ, имеш. (йәнәһе, шул йылда илдә һуңғы ҡатындың ғүмере өҙөләсәк). Рәсәйгә, башҡа илдәргә ҡарағанда, иртә үлем юрала. Беҙҙең илдән алда Макао, Гонконг, Босния һәм Герцеговина халҡы ғына юғаласаҡ. Халҡы кәмегән ун ил иҫәбенә шулай уҡ Мальта, Словакия, Сингапур, Румыния, Венгрия, Македонияны индергәндәр. Иң оҙаҡ йәшәүсе Америка буласаҡ, тип фаразлай БМО. Американдарға ер йөҙөндә әллә күпме быуат яңғыҙ йәшәргә тура килер, ахыры.

Был мәғлүмәттәргә ирония күҙлегенән сығып ҡарарға кәрәк, тип тынысландыра Рәсәй белгестәре. Кеше күпме ейәнե тыуасағын да белә алмай. Шуға күрә, киләсәк быуындар тураһындағы фараздар бик шикле һәм урынһыҙ. Әммә бөгөнгө демография торошонан сығып, БМО мәғлүмәттәренә ышаныусылар ҙа бар. Тик барыбер киләһе меңйыллыҡта ғына түгел, бер быуаттан һуң да ни булырын бер кем дә белә алмай. Фәндең дә янылышыу ихтимал. Бигерәк тә сәйәсиләштерелгән булһа.

Беҙҙең эксперттар иһә үҙ хәҡиҡәтен иҫбатларға тырыша. БМО юрауынса, оҙон һәм бәхетле тормош кисерергә тейеш булған Францияны демографик проблемалар көтә, ти улар. Был илдә аҫаба халыҡты йәйлап Африканан ағылған мигранттар алыштыра. Үҙ сиратында эмигранттар тыуыны ла, Францияла йәшәй биргәс, һәсәлен ҡорота. Американың консерватив йәмғиәте был йәһәттән имеңлерәк күренә, тип иҫәпләй беҙҙең демографтар. Улар үҙ яҡташтарын да иҫкәртә. Артабан да тыуым артмаһа, айырылышыуҙар күп булһа, йәғни хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрмәһә, әлбиттә, беҙ 2888 йылға тиклем дә барып етә алмаясаҡбыҙ.

## ХОККЕЙ

# ҠЫУЫП ЕТЕРБЕҘ...

**Ҡыҫҡа ғына тәнәфестән һуң "Салауат Юлаев" Нижнекамск ҡалаһында "Нефтехимик" командаһы менән көс һынашты. Уйын башланыр-башланмаҫтан нефтехимиктар иҫәпте икегә еткерҙе. Ә юлаевсылар яуап ҡайтара алманы. Беренсе осор шулай 0:2 иҫәбе менән тамамланды.**

Икенсе осорҙа майҙан хужалары ҡунаҡтар ҡапҡаһына өсөнсө шайбаны сәпәне. Ҡапҡасы Виталий Колесник бик алама уйнаны. Тренерҙар штабы ҡапҡасыны алмаштырырға булды. Ә ҡапҡаға кемде ҡуйырға? Эрик Эрсберг имгәнгән. В. Колесник ҡалһа, еңелеү генә түгел, команда хурлыҡлы рәүештә тамам тар-мар ителәсәк. Ярай әле, "Торос" командаһының ҡапҡасыһы Н. Давыдов саҡырылған икән. Ҡапҡа һағына уны баҫтырҙылар.

Яңы ҡапҡасы һынатманы, ҡапҡаны ныҡлы йоҙаҡҡа бикләне. Ҡапҡасының ышаныслы уйнауы юлаевсыларға дәрт өҫтәне. Улар, тылдың ышаныслы булыуынан файҙаланып, көслө һөжүмгә күсте. Тиҙҙән һөжүмсе Олег Сапрыкин һуҡҡан шайбаны майҙан хужалары ҡапҡасыһы тота алманы.

Өсөнсө осорҙа иҫәп 2:3 булды. Ә уйын бөтөүгә күп ҡалманы. Ҡунаҡтар штурм башланы. Максим Сушинский иҫәпте тигеҙләне: 3:3.

Өҫтәмә ваҡытта ике яҡтың береһе лә уңышҡа өлгәшә алманы. Хәҙер - буллит һуғыу. Бында Сергей Зиновьев үҙенең оҫталығын, мәргәнлеген күрһәтте. Шулай итеп, ул уйынға еңеүле нөктә ҡуйҙы.

* * *

17 ноябрҙә "Салауат Юлаев" командаһы Мәскәүҙә "Динамо" хоккейсылары менән көс һынашты. "Динамо" Көнбайыш конференцияла иң көслө командаларҙың береһе. Ул һәр ваҡыт лидерҙар төркөмөндә килә. Баш ҡала хоккейсылары матчты иң тәүҙән уҡ көслө һөжүм менән башланы. Улар икенсе минутта уҡ иҫәп асты. Юрий Бобенко һуҡҡан шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡасыһы Виталий Колесник тота алманы. Бына шулай итеп майҙан хужалары уйын дилбегәһен иң тәүҙән уҡ үҙ ҡулдарына алды һәм һуңғы минутҡаса ҡулдан ысҡындырманы. Һөҙөмтәлә "Динамо" командаһы "Салауат Юлаев" хоккейсыларын 7:3 иҫәбенә тар-мар итте.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

✓ *Идеалдарҙың ҡиммәте шунда: уларға яҡынлаған һайын, улар юҡҡа сыға.*

*(Махатма Ганди).*



СМСНАМӘ - ШИҒРИ ӘЙТЕШ



# БАШҠОРТОСТАН - УМАРТА,

## Халыҡ эшсе, әреһеҙ ҡорт...

**Оҙонға һуҙылған байрамдарҙың бер насар яғы бар, туғандар! Тап шул сәбәпле гәзитебеҙ күп урындарға һунлап барып етте һәм үткән һанда шиғри әйтеш баҫылманы. Ярар, борсолмағыҙ, йыл аҙағында йомғаҡ яһағандан һуң, Алла бойорһа, алдағы йылда ла әйтештә тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ итеп дауам итербеҙ.**

**АҠЫҠ:**
Ҡайҙа һуң ул батша?
Тәүҙә үҙеңдән башла.
Фекерҙәрҙе туплайыҡ,
Башты ташҡа һуҡмайыҡ.
Кем булһа ла, шул батша,
Ғәҙеллектән, һин башла!
Булдыра алһа ҡатын-ҡыҙ,
Һүнмәҫ усаҡтағы ҡуҙ.
Ир затынанмы батша?
Самаһыҙлыҡты ташла.
Вәғәҙә биреп ялҡытма,
Аҙ һөйләп, һин күп эшлә,
Тоғролоҡто ла һаҡла...

**ЭТКОЛ:**
Дин ялғаны - иманһыҙлыҡ,
Унын нигеҙе ниҙә?
Мин үҙемсә баш ватайым,
Уйлағыҙ әле һеҙ ҙә.
Сәбәптәре унын күптер,
Тамыры унын төптә.
Кешенең үҙенән тора,
Власть ҡуялмаҫ нөктә.
Тистә йылдар совет иле
Ялған, тип дине тыйҙы.
Күрәбеҙ, иген сәсмәһән,
Баҫыуҙы баҫҡан ҡыйҙы.

**БАТЫР:**
Тәүге һүҙем:
Аҡмағандай кире Ағиҙелкәй,
Аҡмаҫ инде кире Амазон.
Кемдәр утын таба ут ягырға,
Кемдер утҡа аҫа ҡаҙанын.
Кемдер уҡ юнырға өйрәткәндә,
Бәрәү тун бесергә өйрәтә.
Кемдер һунар сыға, кемдер бәрәү
Ир ҡайтыуға тамаҡ йүнәтә.
Шулай булғанда тик тәртип була,
Ролдәр алмашынһа - эш хана...
Кәмһетмәйек ҡатын-ҡыҙҙар затын,
Ил тәртибе өйҙән башлана!
Икенсе һүҙем:
Этkол сәсәнгә аткан уҡ
Килеп тейҙе йөрәккә:
Диндең ялғаны арта шул,
Нисек быны әйтмәскә?
Ҡырағай алыпһатарҙар,
Ырыҫ ҡорҙаш әйтмешләй,
Динде алып һаталар шул
Шик уятып кешеләй.
Шикләнмә, халҡым, Исламда
Бындай һатыулашыу юҡ.
Беҙ тик ябай мосолманбыҙ,
Ҡөрьән, сөннәт - беҙҙең юл!

**ЫРЫҪ:**
Анлашыла, Эткол туған,
Уйҙарыңдын торошо:
Булмай ары уҙғәртмәйсә
Илебеҙҙең тормошон.
Аҡъюлайҙа - һайлауҙарҙа
Яңы кәстәр һайлайыҡ.
Торғонлоҡ, ҡорал, ҡырыуҙар
Илебеҙҙә булмаһын.
Һайлауҙарға йөрөмәй бит
Алла ла, Бәйғәмбәр ҙә...
Йоклап ятһаҡ, тапаясаҡ
Яһил, йылғыр бәндәләр.
Батыр туған, яһилдар ҙа
Шул уҡ Алла бәндәһе.
Улар менән көрәшергә
Баш үә рух беҙҙә бар әле.
Иң мөһиме - Рәсәйҙә
Ғәҙел һайлауҙар кәрәк.
Бынағайыш, бынын өсөн
Хоҡуҡи дәүләт кәрәк!
Өҙәләме дуңғәләк?

**КӨФӨ:**
**Бәндәбикә әйткәненә**
**Ҡолаҡ һалайыҡ, ирҙәр.**
**Беҙ бит әле ир затынан**
**Бисәүәхит түгелдәр.**
**Әгәр илһеҙ тороп ҡалһаҡ,**
**Ир тип аталырбыҙмы?**
**Үлгәс, тупраҡ аҫтарында**
**Тыныс яталырбыҙмы?**
**Эткол әйткән әре ҡорт**
**Үҙебеҙ һуң түгелме?**
**Йә, кемегеҙ дауам итер**
**Ошо хаҡта һүҙемде?**

**ЭТКОЛ:**
Инәйҙең данын алма,
Һин түгел Бәндәбикә.
Үҙ башын, үҙ аҡылында
Булып тор, Әҙәмбикә!
Бер тажикка һорау бирҙем:
"Һинә Памир тармы?" тип.
Яуап бирҙе минә шул саҡ:
"Һинең илең бармы?" тип.
Әгәр илһеҙ тороп ҡалһаҡ,
Ир тип аталырбыҙмы?
Әле лә был ялған илдә
Ир тип аталабыҙмы?
Эйеләгән башты әҙмәй, тип
Башын ҡылысҡа һалғас,
Итһеҙ мөсәйҙе ейһән,
Мәскәүҙән артып ҡалһа.
Әре ҡорт түгел халҡым,
Тик яҡлаусы юҡ хаҡын.
Һимеҙ ҡуй кеуек эттәрҙән
Талана тыуған илем.
Яралары уңалмаҫтан,
Һыҙлана торған ерем.
Талпандар һаман ҡубәйә,
Ҡайнар ҡанымды һура.
Илем эсе серек ағас,
Тыштан ялтырап тора.
Халҡыма мин әйтмәнем,
Башҡорт булмаҫ әре ҡорт.
Башҡортостан - умарта,
Халыҡ эшсе, әреһеҙ ҡорт.
Әҙер балға килеп тулды
Ҡаф тауынан әре ҡорт.
Һаман арта сит бауыр,
Уйлаһаң, уйҙар ауыр.
Кәмһетелә телебеҙ,
Бармы беҙҙең илебеҙ?
Ҡағыҙҙа бар исеме,
Күрәләрме есемен?
Төн йоҡлатмай уйҙарым,
Көтөүсеһеҙ ҡуйҙарым.
Ҡуйҙарымды ҡаманым,
Һығымтаһын һаланым.

**ДАРМАН:**
Унмаҫ ирҙәр ил тарҡатыр,
Бисәләрҙе әрләп ятыр.
Уңғандары таш булыр,
Ҡатындарға баш булыр.
Үҙ-үҙенән сәбәпһеҙ
Бер нәмә лә бар булмай.
Ирҙәр юҡҡа сығырмы,
Ҡыҙҙар янғыҙ ҡалырмы?
Ә ирҙәрһеҙ был донъя
Бушап ҡала түгелме?
Уларһыҙ бит күңелһеҙ.
Ҡатындарҙан торған дарья
Үҙен-үҙе йотор бит...

**ЫРЫҪ:**
Эткол, мәйтәм, башҡорт иле
Хәлен яҡшы билдәләй.
Тик хәлдәр бит аҙарынып
Ултырыуҙан төҙәлмәй.
Аҙарынып йә ҡыуанып,
Артты йәйеп ултырһаҡ,
Ейәндәргә нимә ҡалыр?
Шул турала уйлайыҡ.
Ҡәрҙәштәрем, көрәшмәһәк
Ирек һәм хоҡуҡ өсөн.
Ер-һыуҙы ҡурсаламаһаҡ,
Ирме беҙ, әллә кәсәк?
Көфө туғандың һорауы
Бисә-батша хаҡында -
Шартлылыр тип уйлайым,
Раҫ, эш тормай унда.
Барып сыҡмаҫ бар бәләне
Ҡатын-ҡыҙға япһарып.
Ятайыҡмы, ир-ат, шулай
Ҡуян һымаҡ ҡалтырап?
Ир аҡыллы бисәме ул,
Әллә аҡыллы ирме?
Илдә шәхестәр етерлек,
Иҫәпләһән - йөҙ илле.
Бәндәбикә, һүҙен дөрөҫ,-
Илдә ирҙәр вакланды.
Илдең хәлен үҙгәртеүҙе
Көтә ирҙәр ҡатындан.
Ана ҡара, Украинда
Ҡатын батша булғайны.
Хәҙер башын ҡороталар
Ир-егеттәр ханымдын.

**КӨФӨ:**
**Ырыҫ әйткән дуңғәләкте**
**Өҙәйекме, туғандар?**
**Эткол әйткән хәҡиҡәткә**
**Түҙәйекме, туғандар?**
**Атыбыҙҙы шулай итеп**
**Ярты юлда туғарһаҡ...**
**Бәхәсебеҙ инде-инде**
**Ҡыҙып ҡына барғанда,**
**Мөһим фекер аҫтарына**
**Һыҙып ҡына барғанда...**
**Әйҙә, тағы һөйләшәйек,**
**Кемдә ниндәй һүҙҙәр бар?**
**Ҡайҙа түбән төшөүҙәр бар,**
**Ҡайҙа алған үрҙәр бар?**
**Миненсә, бит хәлдәребеҙ**
**Зарланырлыҡ та түгел,**
**Ғәләмәт шәп йәшәйбеҙ, тип**
**Маҡтанырлыҡ та түгел...**
**Әйҙә, һәр кем атаһын**
**Һуңғы шатланған мәлен,**
**Ә унан һуң бәйән итһен**
**Тормошон, хәл-әхүәлен.**
**Ә үҙемә килгәндә**
**Һуңғы оло шатлығым:**
**Ерғә тағы ҡыш килеүе,**
**Был донъяның аҡлығы.**
**Эштән ҡайтыуымды ҡыҙым**
**Ҡаршылауы атлығып...**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**СМСнамә - шиғри әйтеш дауам итә. Яңы ҡушылыусылар өсөн телефоныбыҙ: 8-917-477-09-74.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨЙӨКЛӨ...

## көйөк ашар

"Табамын" тип ашама, күп ашаһаң, ҡоҫторор, "беләмен" тип һөйләмә, күп һөйләһәң, боҫторор.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Теләктәр күберәк йәш йөрәктәргә хас, ул теләктәр ғүмер буйы һинең йөрәкте тулҡынландырасаҡ, тип уйлаусылар ахмаҡ: күп тын йылғалар шаулы шарламалар менән башлана, әммә уларҙың береһе лә диңгеҙгә ҡәҙәре ҡубекләнеп сапмай.

**(Михаил Лермонтов).**

Тормош бер ваҡытта ла түләүһеҙ бирелмәй һәм яҙмыш бүләк иткәндең һәр береһенең үҙ хаҡы бар.

**(Стефан Цвейг).**

Идеалдарҙың ҡиммәте шунда: уларға яҡынлаған һайын, улар юҡҡа сыға.

**(Махатма Ганди).**

Беҙ шул ҡәҙәре күпте теләйбеҙ: беҙҙең бөтөн теләктәребеҙ тормошҡа ашһа ла беҙ барыбер үҙебеҙҙе бәхетһеҙ тойор инек.

**(Бертольд Ауэрбах).**

Тормошта ике трагедия бар: Береһе - үҙеңдең иң изге хыялыңдың тормошҡа ашмауы, икенсеһе - тормошҡа ашыуы.

**(Бернард Шоу).**

Хыял менән уйнау ҡурҡыныс: сепәрәмә килгән хыял кешене ғүмерлеккә бәхетһеҙ итеүе ихтимал; хыял артынан ҡыуып йөрөп, ғүмереңдән үтеп китеүең һиҙмәй ҡалыуың, йә хыялый тойғолар менән янып, уны ҡорбан итеүең бар.

**(Дмитрий Писарев).**

Һәр кемдең башҡа берәүгә лә белдермәй торған, шулай уҡ хатта үҙенә лә белдерергә ҡурҡҡан теләктәре була.

**(Зигмунд Фрейд).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:**
**"- Хөрмәтле Уҡытыусы, мин нисәмә йылдар үҙ-үҙемде тәрбиәләү, камиллаштырыу, үҙемдең эске проблемаларымды хәл итеү менән шөғөлләнәм. Ләкин алға китеш һиҙелмәй. Мин нимәне дөрөҫ эшләмәйем икән?" - тип һораған берәү.**
**-Һин урыныңдан алға китмәйһең, сөнки үҙеңде проблемалары бик күп булған шәхес итеп тояһың, - тигән Уҡытыусы.**
**-Ә нисек хәл итергә һуң ул проблемаларҙы, улар бит ысынлап та бик күп, - ти икән теге кеше.**
**- Һин үҙеңде ул проблемаларҙы нисек хәл итергә икәнде белгән шәхес итеп той, - тип аҡыл биргән Уҡытыусы.**
**-Шул ғынамы? - тип аптыраған кеше.**
**-Бары шул ғына, - тигән Уҡытыусы..."**

15822181911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 18 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 4563